ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Кискe Өфө

27-5 февраль - март (шаҡай - буранай) 2021

№9 (947)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуға хаҡы ирекле

"Башҡорттар элек-электән йәштәргә һүҙ оҫталығы - сәсәнлек тәрбиәләүгә ҙур иғтибар биргән. Башҡорт кешеһе, үҙенең ырыуы менән нәҫеле тарихын ныҡлы белеүҙән тыш, риүәйәттәр, өләңдәр, йырҙар, батырҙар тураһында ҡиссалар өйрәнергә һәм һөйләй белергә тейеш булған".

М.В. ЛОССИЕВСКИЙ.

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

Республиканы иңләй...
ырыуҙар хәрәкәте



6

Үҙ-үҙенде ышандырыу ысулы...
дарыуҙарҙан һөҙөмтәлерәк булырға мөмкин



8-9

Әртисләнергә яратыуын...
бер ҙә тыйып ҡуйманыҡ



11

Кем ул Мөхәммәт-Ғәли Соҡорой?



12-13

ТВ-программа 14

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## ? Физик культура һәм спорт тураһында һөйләгәндә йыш ҡына ауыл спортын айырып әйтәләр. Был йүнәлештә проблема барлығын аңлатамы ул? Һеҙҙең тарафта ауыл спорты нисек үҫешә?

***Фәнүр ҒӘЙНЕТДИНОВ, Мәләүез районы Ергән ауылы Балалар-үҫмерҙәр спорт мәктәбе директоры:*** Егерме йыл ауыл ерендә Балалар-үҫмерҙәр спорт мәктәбе етәксеһе дилбегәһен тартҡан дәүерҙә төрлө саҡ булды. Әммә шуныһын ышанысլы әйтә алам: беҙҙең районда һәр ваҡыт ауыл спортына ҙур иғтибар бүленде. Быға физик культураны һәм спортты үҫтереүгә йүнәлтелгән төрлө кимәлдәге программалар ҙа булышлыҡ итеүен билдәләп китергә кәрәк. Һөҙөмтәлә торал пункттарҙың үҙенә хас спорт төрө үҫеште, йәғни бер төбәктә милли көрәш, икенсеһендә самбо, өсөнсөһөндә волейбол командаһы көслө. Һәр тораҡ пункттың үҙенең билдәле спортсылары барлыҡҡа килде. Ауыл спортсыларының физик потенциалын, шулай уҡ спорт күрһәткестәре юғары булыуын иҫәпкә алып, 2004 йылда Ергәндә Физкультура-һауыҡтырыу комплексы, 2014 йылда бассейн асылды. Был заманса спорт ҡоролмаларының икеһе лә балалар һәм үҫмерҙәргә генә түгел, ә төрлө йәштәге ауыл халҡын әүҙем спорт менән шөғөлләнергә йәлеп итеүгә булышлыҡ итте.

Бөгөн беҙҙең Ергән спорт мәктәбенең 12 филиалы ауылдарҙа уңышлы эшләй. Ауыл йәштәре күпләп милли көрәш, шулай уҡ самбо менән шөғөлләнә, гер күтәреү, волейбол спорты ла үҫешкән. Үҙ эшенә яуаплы ҡараған тренер-уҡытыусыларыбыҙ бар. Ғөмүмән, ауыл спортсылары районды дөйөм спорт уңыштарына һиҙелерлек өлөш индерә. Шуға ла Мәләүез республикала хаҡлы рәүештә спортсы төбәк иҫәпләнә. Атап әйткәндә, беҙҙә спорттың ҡырҡтан ашыу төрө үҫешә, мәләүездәр араһында халыҡ-ара, бөтә Рәсәй, һәм республика ярыштары еңеүселәре, исемдәре билдәле спортсыларыбыҙ бар. Мәҫәлән, Ергән ауылы егете Альберт Рәхмәтуллин билбау көрәше буйынса биш тапҡыр донъя чемпионы булды. Рәсәйҙең атҡаҙанған спорт мастеры исемен яуланы.

Ауыл балаларын физик культураға һәм спортҡа йәлеп итеү өсөн, тәү сиратта, шарттар кәрәк. Был йәһәттән беҙгә төрлө кимәлдә ҙур иғтибар бүленә. Спорт ҡоролмалары үҙгәртеп ҡорола һәм төҙөлә, матди-техник база нығына. Былтыр Республика көнө алдынан Восточный ауылы мәктәбендә "Башҡортостан мәктәптәренә - спорт көрәше" проекты сиктәрендә көрәш залы асылды. Бындай көрәш залы районда әлегә беренсе. Киләсәктә лә был тәңгәлдә ауыл мәктәптәренең спорт залдары төҙөкләнделер, тип уйлайым. Был спорт программаһының төп маҡсаты, билдәле инде, ауыл уҡыусылары өсөн өҫтәмә физкультура дәресен индереү, уларҙы сәләмәт тормошҡа йәлеп итеү.

Ауыл спортын үҫтереүгә иғтибар ҙур булғас, спортсыларыбыҙ ҙа төрлө кимәлдәге ярыштарҙа һынатмай. Улар республика, Рәсәй йыйылма командаларында уңышлы сығыш яһайҙар. Был йәһәттән Смаҡ, Шәрип ауылдарынан Батыр, Рамаҙан Юлмөхәмәтовтарҙы, Динислам Кәшәфетдиновты миҫалға килтерергә мөмкин. Ергән ауылы ҡыҙҙары волейбол буйынса былтыр Башҡортостан Республикаһы мәктәп уҡыусылары спартакиадаһында беренсе урын алды.

Әгәр ауылдың спорт инфраструктураһы яҡшы булһа, шулай уҡ спорт саралары сифатлы һәм мауыҡтырғыс ойоштолһа, физик культура һәм спортҡа ылығыусылар, ҡыҙыҡһыныусылар бермә-бер артасаҡ. Быны тораҡ пункттарҙа үткәрелгән саралар иҫбат итте инде. Нимә генә тимәһендәр, компьютер һәм телефондар барыбер техник яҡтан заманса йыһазландырылған спорт залдарына конкурент түгел. Шөғөлө булмаған балалар ғына гаджеттарҙа ултыра бит ул. Шуға ла нисек тә булһа йәш быуынды физик культура һәм спортҡа йәлеп итеү кәрәк. Айырыуса бөгөн. Спорт һәр кемгә үҫеү, сынығыу, үҙенден нимәгә һәләтле икәненде иҫбатлау, раҫлау мөмкинлеген генә бирмәй. Ул шулай уҡ тәмәке тартыу, иҫерткес эсемлек эсеү, наркотик ҡулланыу кеүек зарарлы ғәҙәттәрҙән дә аралай. Илһөйәрлек тәрбиәләй, рухын нығыта. Был сифаттар бөгөн бигерәк тә кәрәк.

ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!

# ШАЙМОРАТОВСЫЛАР...

## бәйге тотто



**Баш ҡаланың күп профилле полилингваль мәктәптәрендә һәм Рәми Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназия-интернатында Рәсәй Геройы генерал-майор Миңлеғәли Шайморатов исемендәге күсмә Кубокка "Ҡышҡы Шайморатов уйындары" үтте.**

Ҡатнашыусылар тәүге көндә тигеҙ сафтарҙа йөрөү, йыр башҡарыу кеүек оҫталыҡҡа һынау тотто. Отряд командирҙарының үҙ-ара көс һынашыуы ла мауыҡтырғыс булды. 44-се күп профилле полилингваль мәктәптә педагогтар һәм юғары синыф уҡыусыларынан торған ирекмәндәр "шайморатовсылар" өсөн интеллектуаль квест үткәрҙе. Ул уҡыусыларҙың Бөйөк Ватан һуғышы, 112-се Башҡорт кавалерия дивизияһының ҡаһарманлыҡ тарихын, бөйөк полководецтарҙың билдәле һүҙҙәренән өҙөмтәләрҙе белеү кимәлен һәм зыян күреүсегә беренсе ярҙам күрһәтеү оҫталығын, атыу ҡоралы менән эш итеү белемен асыҡланы. 1-се Башҡорт республика гимназия-интернатының "Шоңҡар" спорт комплексында төрлө спорт ярыштары үтте. Дөйөм һөҙөмтәләр буйынса 162-се "Смарт" полилингваль мәктәбе командаһы "Ҡышҡы Шайморатов уйындары" еңеүсеһе тип табылды һәм уларға Рәсәй Геройы генерал-майор Миңлеғәли Шайморатов исемендәге күсмә Кубок тапшырылды. Иң яҡшы күрһәткестәргә эйә уҡыусылар БР Мәғариф һәм фән министрлығының Маҡтау ҡағыҙҙарына һәм иҫтәлекле бүләктәргә лайыҡ булды.

12+

✓ *Финанслау булып та, стадиондар, спорт майҙансыҡтары төҙәлеп тә сәләмәт тормош пропагандаланмаһа, юғары квалификациялы белгестәр йәлеп ителмәһә, ауылда ярыштар уҙғарылмаһа, спортҡа ылыҡҡан кеше булмаясаҡ.*



БЫЛ АЙҘА...



# АҠМАН-ТОҠМАН АЛТЫ КӨН,

## алтыһы ла ҡаты көн

**Ниндәй генә заман, йә йыл, йә ҡыш булмаһын, әҙәм балаһының күңеле һәр дайым яҙҙы көсәй, ялҡытҡыс ҡышҡы бер төрлөлөктән ҡотолғоһо килә, тормошонда, тирә-йүндә, тәбиғәттә үҙгәрештәр башланыуын көтә, сөнки тап яҙҙан башлап ҡояш туң ергә, ниһайәт, көләс йөҙөн бора; сөнки яҙ ысын мәғәнәһендә уяныу, тирә-йүндә йәнле тормош башланыу билдәһе ул. Яҙ, тимәк, күңел йылыныу, гөрләүектәр йыры, тал бөрөһө, ҡоштар сутылдашыуы, ҡояш нуры һәм... бөгөн бөтәбеҙгә лә бик кәрәкле D витамины - ҡояш дауаһы.**

Бына бит - һүҙ көсө - күңелдә шатлыҡ хисе тыуҙырыу өсөн күп тә кәрәкмәй - бер-ике яғымлы, көләс һүҙ ҙә етә. Хәҙер аңлашыла ни өсөн Бөтөн донъя яҙыусылар **(3)** көнө менән Бөтөн донъя шиғриәт **(21)** көндәре яҙҙың тәүге айына тап килгән. Әйткәндәй, яҙ ябай кешенән дә бына тигән шағир яһай ала - яҙыусыларың таң ҡалыр. "Бәйләнештә" диуары авторҙары һәм күмәк сәхифәләренә күҙ һалып алыу ҙа етә. Милләттәш замандаштарыбыҙ - кем генә булмаһын улар: йорт хужабикәһеме, хаҡлы ялдағылармы, уҡытыусы йә мәҙәниәт хеҙмәткәрҙәреме - йөрәктән сыҡҡан ихлас шиғырҙары, сәсмә яҙмалары менән гәжәпләндерәләр. Мәҫәлән, Баймаҡ районы Ишбирҙе ауылынан ғына ла үҙем өсөн ҡыуаныслы асыш булған шиғри күңелле ауылдаштарым: Йомаш килене Сәлимә Барлыбаева, Баймаҡта йәшәүсе класташым Мансур Рәхимғолов, Сибайҙан хаҡлы ялдағы уҡытыусы, хажиә Таңһылыу Йәнтүриналарҙың шаҡтай тос ижад емештәре менән танышмын. Уларға уңыштар һәм артабан да шиғриәтте юлдаш итеп, оҙаҡ-оҙаҡ ижад мөхитендә ҡалыуҙарын теләйем.

Яҙ, яҙ, тип ҡыуана кеүек бар донъя - иҙрәп кителгәндәй хатта... Ә шулай ҙа, бәлки, ашыҡмай торорбоҙ? Ни тиһәң дә, тәүге яҙ айын халыҡ юҡҡа ғына буранай тип атамағандыр. Аҡман-тоҡман хужаһы ла бит әле ул. Мартта - шарт та шорт, тип тә әйтәләр. Башҡорт халҡында аҡман-тоҡман мәләнең хәтәр бурандары хаҡында әллә күпме легенда, тарих, ысынбарлыҡ ваҡиғалары йөрөй. Ағалы-ҡустылы Аҡман менән Тоҡмандың буранай ғәрәсәтендә аҙашып ғәйеп булыуҙары хаҡындағы хикәйәттең әллә күпме варианты бар. "Бишҡунаҡ", "Мәликә бураны" тип тә йөрөтөлә был осор. Реаль ысынбарлыҡта ла мәлле-мәлһеҙ юлға сығып китеп, тап ошо буранда аҙашып, туңып үлеүселәр иҫәпһеҙ-һанһыҙ. Мәлле-мәлһеҙ тип әйтеү шунан, сөнки аҡман-тоҡман көтмәгәндә-уйламағанда, ап-аяҙ көн уртаһында ла боларып китеүсән. Айҙың йә башында, йә уртаһында, хатта аҙаҡтарында ла килеп ябырылыуы һәм тирә-йүндә ҡарға күмеп, бер нисә көн тулап алыуы ихтимал. "Аҡман-тоҡман алты көн, алтыһы ла ҡаты көн" тип халҡыбыҙ белмәйенсә әйтмәгән бит. Шуға күрә буранайҙа алыҫ юлға сығыуҙан тыйылып торорға, метеорологтар мәғлүмәттәренә иғтибарлы булырға кәңәш ителә.

Әйткәндәй, буранайҙа Гидрометеорология хеҙмәте **(23)** көнө лә билдәләнә. Ошо уңайҙан Рәсәй Гидрометүҙәк лабораторияһы мөдире Людмила Паршина буранайға ҡуҙаллауҙарын тәҡдим итә: "Илдең төньяғында һәм көньяҡ Европа өлөшөнә ҡараған төбәктәрҙә был ай һалҡын киләсәк, ә бына Уралда уның норма сиктәрендә булыуы көтөлә. Уртаса һауа температураһы минус 2,5-3 тирәһе, ай аҙаҡтарында нулгә тигеҙләнә. Волга буйы, Урал, Көнбайыш Себер, Ханты-Манси, Иркутск, Байкал аръяғы төбәктәрендә яуым-төшөм мул буласаҡ..." Быларға өҫтәп, шуны ғына әйтергә ҡала: һауа торошо белгестәренең фаразлауҙары киреһенсәрәк килеп сығыуы ла ихтимал: шундай "үҙһүҙле-үҙкөйлө" мәл инде ул буранай. Уның ҡарауы, йылдың иң көләс, яғымлы, наҙлы байрамы - Халыҡ-ара ҡатын-ҡыҙҙар көнөн **(8)** бүләк итә ул беҙгә!

Үкенескә, байрамдарҙың да тиҙ генә үтеп китә торған гәзәте бар, ә беҙ йыш ҡына кәйефте боҙоп, тормошобоҙҙо йәмһеҙләгән иҫке проблемаларыбыҙ, хәл итеүҙе көткән мәсьәләләребеҙ менән тороп ҡалабыҙ. Мәҫәлән, рәсәйҙәр йышыраҡ банктар һәм ҡиммәтле ҡағыҙҙар баҙарына, сауҙа, һаулыҡ һаҡлау, коммуналь хеҙмәттәр сифатына зарланыу белдерә, тип яҙа интернет сығанаҡтар. Башҡортостанда, мәҫәлән, һаулыҡ һаҡлау мәсьәләләренә ҡа-

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

**?**

## *Физик культура һәм спорт тураһында һөйләгәндә йыш ҡына ауыл спортын айырып әйтәләр. Был йүнәлештә проблема барлығын аңлатамы ул? Һеҙҙең тарафта ауыл спорты нисек үҫешә?*

***Филүс ҠАЗЫХАНОВ, Ҡыйғы районы хакимиәтенең йәштәр сәйәсәте һәм спорт комитеты рәйесе:*** Ауылдарҙа балаларҙы, йәштәрҙе спортҡа ылыҡтырыу мәсьәләһе һәр ваҡытта ла актуаль булды һәм шулай булырға тейеш тә, тип уйлайым. Ә быға фәҡәт тораҡ пункттарҙа күп функциялы спорт залдары, физкультура-һауыҡтырыу комплекстары төҙөп, өҫтәмә белем биреү учреждениеларының матди-техник базаһын нығытып, үҙ эшен белгән һәм яратҡан тренерҙар, физик культура уҡытыусыларын йәлеп итеп кенә өлгәшеп була. Беҙҙең районда иһә, һәр тораҡ пунктта күмәк спорт саралары йыл әйләнәһенә тиерлек туҡталмай. Ҡышын ауыл балалары хоккей уйнай. Тораҡ пункттарҙа биш хоккей ҡумтаһы төҙөкләндерелгән. Тәбиғи катоктарҙы һаны унға яҡын. Йыл һайын биләмәләр араһында турнирҙар үтә. Футбол яратыусылар өсөн дә ярыштар үткәрелә. Саңғы юлы ла буш тормай, һәр төрлө эстафеталар, төрлө кимәлдәге ярыштар ойошторолоп тора. Февралгә ауыл спортсылары араһында шорт-трек планлаштырылған. Ғөмүмән, республиканың традицион ауыл спорт уйындарында һәр бер спортсыбыҙ үҙен тик яҡшы яҡтан күрһәтә. Рәсәй кимәлендә сығыш яһаған спортсыларыбыҙ бар. Карате, баскетбол, көрәш менән дан тотабыҙ, бынан тыш спорттың халыҡ төрҙәре лә үҫешкән беҙҙә.

Быларҙың барыһына ла, әлбиттә, ауыл мәктәптәрен квалификациялы физик культура уҡытыусылары, тренерҙар менән тәьмин итеп, матди-техник базаны, инфраструктураны яҡшыртып, шулай уҡ ауыл халҡын әүҙем спортҡа йәлеп итеп кенә өлгәшәбеҙ. Былтыр Арыҫлан ауылында "Башҡортостан мәктәптәренә - спорт көрәше" проектына ярашлы, бөтә уңайлы шарттары булған көрәш залы асылды. Ләүзә ауылында резина япмалы баскетбол, футбол стадионы булған яңы мәктәп һалдылар. Был замансә майҙансыҡ ауыл балалары араһында спортты үҫтерергә, уларҙы сәләмәт тормошҡа йәлеп итергә булышлыҡ итәсәк. Ғөмүмән, ауыл ерендә спорт һәм физик культура проблемаһын хәл итеү өсөн власть органдарының, шулай уҡ халыҡтың да теләге бик мөһим. Финанслау булып та, стадиондар, спорт майҙансыҡтары төҙөлөп тә сәләмәт тормош пропагандаланмаһа, юғары квалификациялы белгестәр йәлеп ителмәһә, ауылда ярыштар уҙғарылмаһа, спортҡа ылыҡҡан кеше булмаясаҡ. Әлегә беҙҙең районда 3 йәштән 79 йәшкә тиклем спорт менән даими шөғөлләнеүселәр дөйөм халыҡтың 49,10 процентын тәшкил итә. 2024 йылға был һан 55 процентҡа тиклем артырға тейеш. Бынан тыш, балалар-үҫмерҙәр спортын ойошторған хеҙмәткәрҙәрҙең һәм тренерҙарҙың социаль статусын күтәреү ҙә кәрәктер, тип уйлайым.

Ауыл һәм ҡала балаларының буш ваҡытын, ялын ойоштороу йәһәтенән айырма булырға тейеш түгел. Оло йортҡа ни кәрәкһә, кесеһенә лә шул кәрәк тигән кеүек, ҡараш бер булыуы мөһим. Ауыл спортын үҫтереү йәһәтенән төрлө программаларҙы бойомға ашырыу сиктәрендә был айырымлыҡ йылдан-йыл юғала бара, шуныһы ҡыуаныслы. Йәштәрҙе илһөйәрлек рухында тәрбиәләү өсөн спортты отошло ҡулланырға мөмкин, сөнки улар төрлө кимәлдәге ярыштарҙа еңеүен тәүҙә үҙ мәктәбенә, аҙаҡ районына, республикаһына һәм иленә арнай, ошо тырышлығы, ныҡышмаллығы менән ватансыллығын, рух ныҡлығын күрһәтә. Рухлыларҙың, илһөйәрҙәрҙең ихтыярын иһә тиҙ генә һындырып булмай.

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров 2024 йылда Өфөнөң 450 йыллығын билдәләүгә әҙерлек тураһында указға ҡул ҡуйҙы. Республика етәксеһе баш ҡаланың юбилейына әҙерләнеү буйынса ойоштороу комитетын төҙөргә ҡушты. Ойоштороу комитеты Өфө хакимиәте менән берлектә Башҡортостандың баш ҡалаһының 450 йыллығын үткәреүгә бәйле саралар планын әҙерләргә һәм раҫларға тейеш. Республика Хөкүмәтенә указды ғәмәлгә ашырыу менән бәйле сығымдарҙы финанслау сығанаҡтарын билдәләү бурысы йөкмәтелгән.

✓Башҡортостанда 2021 йылда Мифтахетдин Аҡмулланың 190 йыллығы билдәләнә. Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте вице-премьеры Азат Бадранов рәйеслегендәге ойоштороу комитетының составы раҫланған. Төп юбилей саралары Өфөлә һәм Миәкә районында уҙғарыла. Ойоштороу комитетына юбилей сараларына әҙерләнеү, уларҙы үткәреү планын төҙөү һәм раҫлау бурысы йөкмәтелгән.

✓Башҡортостан Республикаһының Тәбиғәттән файҙаланыу һәм экология министрлығы ҡарамағындағы Йәмәғәтселек советы "Шүлгәнташ" ҡурсаулығының уға ғалим-зоолог, палеолит осорондағы яҙмаларҙы беренсе булып асҡан Александр Рюминдың исемен биреү тураһында башланғысын тикшерҙе һәм урындағы халыҡтың ҡурсаулыҡ исемен үҙгәртеү менән килешмәүен иҫәпкә алып, ғалимдың иҫтәлеген башҡа ысул менән мәңгеләштерергә тәҡдим итте.

✓Республикала ҡайһы бер райондарҙа сүп-сар сығарыу өсөн түләүгә хаҡ әлеккесә ҡала. Мәғлүм булыуынса, 1 февралдә ТКО өсөн түләүҙәр артты, әммә "Дюртюлимелиоводстрой" яуаплылығы сикләнгән йәмғиәт төбәк операторы хаҡ арттырыуҙы мартҡаса киСектереп торғайны. 24 февралдә үткән кәңәшмәлә БР Хөкүмәте Премьер-министры Андрей Назаров тарифты 1 марттан индереүҙе иртәрәк тип иҫәпләүен белдерҙе.

✓Ростов өлкәһендәге яңы музей комплексында 112-се Башҡорт кавалерия дивизияһына арналған мультимедиа системаһы эшләй башлай. 2020 йылдың авгусында "Самбек ҡалҡыулығы" милли хәрби-тарихи музей комплексы асылды. Тантана Ростов өлкәһен немец илбаҫарҙарынан азат итеү көнөнә арналған ине. Комплекстың бер өлөшө баштан уҡ 112-се Башҡорт кавалерия дивизияһына тәғәйенләнде.

*✓ Физкультураның күп кенә ауырыуҙарҙы иҫкәртеүен, йәш быуында илһөйәрлек тойғоһо тәрбиәләүҙә лә ҙур роль уйнауын оноторға ярамай. Ата-әсәләрҙең балаларына спорт инвентары һатып ала башлауы ла ҡыуаныслы.*



ғылышлы страховкалау компанияларына йүнәлтелгән ялыуҙарҙың 60 проценты Йәмәғәт палатаһы тарафынан нигеҙле тип табылған. Һәр төрлө хеҙмәт күрһәтеүҙәр менән файҙаланыусы, тимәк, Клиенттар көнөн **(19)** дә онотмаған март көндәлеге. Теге йәки был мәсьәләнең хәл ителеше тап ана шул клиенттарҙың үҙҙәренең әүҙемлегенә бәйле лә инде. Тап шул арҡала Башҡортостан граждандарының сифатһыҙ тауар һәм хеҙмәт күрһәтеүҙәргә меңгә яҡын ялыуы буйынса 12 млн аҡса ҡайтарып бирелгән. Аныҡлабыраҡ әйткәндә, ваҡлап һатыу өлкәһендә халыҡ күберәк көнкүреш техникаһы, аяҡ һәм өҫ кейемдәре, мебель сифатына дәғүә белдерә икән. Әйткәндәй, клиент үҙ проблемаһы менән яңғыҙы түгел. Уны яҡлаусы, кәрәк икән, тейешле дәғүә һәм юллау документтары төҙөүҙә ярҙам күрһәтеүсе ойошма барлығы бөтәбеҙгә лә яҡшы мәғлүм. Клиенттар көнө менән бер ҡатар шуға ла Ҡулланыусы хоҡуҡтарын Бөтөн донъя яҡлау көнө **(15)** лә юҡҡа булдырылмағандыр. Һәм, ысынлап та, үҙегеҙ шаһит: ҡулланыусы бөгөн йоҡомһорап ятмай, кәрәк икән, йыйналышып, ғәҙел талаптарын даулап урамдарға ла сыға, Роспотребнадзор ишектәрен дә ҡыйыу асып инә, сөнки ул артығын талап итмәй, ә хәләл көсө менән тапҡанын бынауы ише, мәҫәлән, йылылыҡ ресурстарының ҡомһоҙ хужаларынан кире ҡайтартыу, ҡурсыу - ғәҙеллек булһын өсөн тырыша. Роспотребнадзорҙың бер хеҙмәткәре билдәләүенсә, бөгөн халыҡтың "хоҡуҡи грамоталылыҡ кимәле" арта бара. Бик хуп, шулай ҙа булмаһа, артабан нисек йәшәргә?..

Был айҙа тағы ла Бөтөн донъя граждандар оборонаһы **(1)**, Халыҡ-ара шырпы көнө **(2)**, Халыҡ-ара теш табибы **(6)**, Халыҡ-ара балалар телевидениеһы һәм радиоһы **(7)**, РФ Архивтар көнө **(10)**, Наркотиктар әйләнешен контролләү органдары хеҙмәткәрҙәре **(11)**, Бөтөн донъя йоҡо **(12)**, Геодезия һәм картография хеҙмәткәрҙәре **(13)**, ОБХСС (ОБЭП), Бөтөн донъя социаль хеҙмәткәр **(16)**, Һыу аҫты моряктары **(19)**, Сауҙа, халыҡҡа көнкүреш хеҙмәте күрһәтеү һәм торлаҡ-коммуналь хеҙмәттәр көнө, Рәсәй Эшсе-Крәҫтиән хөкүмәте менән Башҡортостан хөкүмәте тарафынан Башҡортостан Совет Автономияһы хаҡында Килешеүгә ҡул ҡуйылған көн **(20)**, Бөтөн донъя һыу **(22)**, Бөтөн донъя туберкулез менән көрәш **(24)**, Мәҙәниәт хеҙмәткәрҙәре көнө **(25)**, Милли гвардия, Халыҡ-ара театр көндәре **(27)**, Ерҙе һаҡлау көнө **(30)**, Федератив килешеү һәм Федератив килешеүгә Башҡортостан Республикаһынан Ҡушымтаға ҡул ҡуйылған **(31, 1992)** көндәр билдәләнә.

**Буранайҙа тыуғандар:**

**4 -** дәүләт эшмәкәре, БР Конституция суды Рәйесе, юридик фәндәр докторы, Башҡортостандың атҡаҙанған юрисы, Салауат Юлаев ордены кавалеры **Зөфәр Еникеевҡа - 70 йәш** (1951).

**6 -** спортсы, самбо көрәше буйынса 5 тапҡыр БАССР чемпионы, самбо һәм милли көрәш буйынса СССР-ҙың спорт мастеры, Рәсәй һәм Башҡортостандың атҡаҙанған физик культура хеҙмәткәре **Юнир Вәлиевҡа - 80 йәш** (1941).

**8 -** гвардия лейтенанты, Советтар Союзы Геройы, сығышы менән Миәкә районынан булған **Миңлеғәли Ғөбәйҙуллиндың тыуыуына - 100 йыл** (1921-1944).

**20 -** Башҡортостан Республикаһы Башлығы Радий Хәбировтың тыуған көнө (1964).

**-** мәҙәниәт эшмәкәре, БР Милли әҙәбиәт музейы етәксеһе, Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре **Гөлдәр Моратоваға - 70 йәш** (1951).

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

## БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР



# ИТ ИЗГЕЛЕК...

## көт итле бөйөрөк

**Тормошта изгелек юҡ, ә мутлашыусылар язаһын алмай йәшәп ята, тигәнде йыш ишетергә тура килә. Шуға һеҙгә үҙем менән булған бер хәлде яҙырға булдым әле, бәлки, ошо өмөтһөҙ, күңелһеҙ фекерҙә булғандарға фәһеме булыр.**

Бер көндө эштән ҡайтышлай йыш ҡына инеп йөрөгән хужалыҡ тауарҙары магазинына һуғылдым. Көндәлек кәрәк-яраҡтарҙы теүәлләп алдым, тауарҙарымды моҡсайға һалып, рәтләп биреүсе мөләйем һатыусы ҡатынға рәхмәт әйтергә лә онотманым. Ҡайтып, әйберҙәрҙе урынлаштырып, ул-был итеп йөрөгән арала нишләптер күҙ әлеге магазин чегына төштө. Иғтибарлап ҡараһам, һатыусы 69 һумлыҡ бер тауарымды иҫәпләмәгән булып сыҡты! Тәүҙә аптырап ҡалдым, былай бушлай ҡулға бер ниндәй ҙә мал төшкәне юҡ ине әле. Һатыусы үҙе оноттҡас, шул көйө ҡалдырайым да ҡуйыйыммы икән әллә, тигән уй ҙа йүгереп үтте башта. Шунан ул ҡатындың мөләйем йөҙө, иғтибары, иплəп кенә бөтә әйберҙәрҙе муҡсаға һалырға ярҙамлашыуы күҙ алдына баҫты. Иҫәпләп еткермәгән 69 һум унын елкәһенә бурыс итеп һалынасаҡ бит инде, тип уйлап, яңынан магазинға йүнәлдем. Барҙым, өйгә алып ҡайтҡан баяғы тауарҙың фотоһын күрһәтеп, өҫтәп түләп сыҡтым, ә күңелгә шундай рәхәт булып ҡалды. Һатыусының рәхмәтеме шулай тәьҫир итте. Шунан эргәләге икмәкханаға инеп, сәй эсергә бер кәбеҫтәле бөйөрөк һатып алдым. Бүтән мажараларға тарымай ғына ҡайтып, әлеге бөйөрөк менән сәй эсергә ултырҙым. Тик... кәбеҫтәле тип һатып алһам, итле бөйөрөк булып сыҡты был! Үҙем яңылыштыммы, һатыусымы, әллә бәләкәй генә изгелегем өсөн шундай бүләк булдымы был итле бөйөрөк?

**Ысынында, тормош эшләгән изгелегең өсөн ҡулыңа шунда уҡ итле бөйөрөк килтереп тоттормаһа ла, күңеленә еңеллек һәм выждан азатлығы килтерә. Мутлашҡандар күп булһа ла, эргә-тирәбеҙҙә намыҫы таҙа кешеләр ҙә юҡ түгел. Шулай ҙа, бик-бик ундайҙарҙы тап итә алмаһаң, эште үҙеңдән башла...**

**Камила ҒӘЛИЕВА.**

## ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

### ? *Физик культура һәм спорт тураһында һөйләгәндә йыш ҡына ауыл спортын айырып әйтәләр. Был йүнәлештә проблема барлығын аңлатамы ул? Һеҙҙең тарафта ауыл спорты нисек үҫешә?*

***Илмира СӘҒИТОВА, Әбйәлил районы хакимиәтенең социаль үҫеш мәсьәләләре буйынса бүлеге баш белгесе:*** Беҙҙең райондағы барлыҡ 15 ауыл биләмәһендә лә спорт һәм физик культураны үҫтереү йәһәтенән эшмәкәрлек киң йәйелдерелгән. Төбәктә бәйге, уҡ атыу, көрәш кеүек спорттың милли төрҙәре лә, футбол, волейбол һәм башҡалар ҙа ныҡлы үҫешкән. Ауыл биләмәләре араһында үткәрелгән ярыштар йылдан-йыл күмәк спорт сараларында ҡатнашырға теләүселәрҙе арттырыуы ҡыуаныслы. Быға тиклем ойошмалар, ир-егеттәр командалары ғына төрлө спорт сараларында осраша, уҙған йыл ҡатын-ҡыҙҙар араһында ла спартакиада ойоштора башланыҡ. Был ярыш гүзәл заттарға шул тиклем оҡшаны, һөҙөмтәлә йыл һайын үткәрергә тигән теләк менән таралыштылар. Шулай уҡ күптән түгел беренсе тапҡыр 45 йәштән өлкәндәр өсөн спорт байрамы уҙғарҙыҡ. Улар араһында беренсегә дротик тотоп, үҙен мәргәнлектә һынағандар, тәүгә өҫтәл теннисында уйнап ҡарағандар бар ине. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, дуҫлыҡ, берҙәмлек мөхитендә үтһә лә, барыһының да еңеүгә ихтыяры шул тиклем көслө булды. Бик йылы тәьҫорат алып таралды улар.

Күп кеше ҡатнашҡан саралар ойоштороу өсөн матди-техник база бар. Мәктәптәрҙең спорт залдары ишеге һәр ваҡыт асыҡ. 3-тән 79 йәшкә тиклемгеләр араһында физик культура менән шөғөлләнеүселәр һаны райондың дөйөм халыҡ һанының 51,81 процентын тәшкил итә. 2019 йыл менән сағыштырғанда был күрһәткестә үҫеш күҙәтелә. Һуңғы йылдарҙа айырыуса өлкән йәштәгеләр Скандинавия таяҡтары менән йөрөргә әүәҫләнеп алдылар. Был спорт төрө бигерәк тә Аҫҡар ауылында популярлыҡ менән файҙалана.

Йыл әйләнәһенә спорт ярыштары, төрлө эстафеталар үткәрелеүе ауыл халҡының зарарлы ғәҙәттәрен иҫкәртеүҙә лә ҙур роль уйнаны, тип әйтергә мөмкин. Төбәктә эскелек кәмеүе, ауылдарҙың "Айыҡ ауыл" республика конкурсында әүҙем ҡатнашыуы ла шуны иҫбатлай. Таштимер ауылында ошо конкурс сиктәрендә быйма кейеп хоккей, йәйәнән, пневматик винтовканан атыу, биатлон буйынса Рәсәйҙең атҡаҙанған тренеры, тау саңғыһы, биатлон, велоспорт буйынса СССР-ҙың спорт мастер, Маҙһар Алсынбаев иҫтәлегенә саңғы ярышы буйынса ғаилә эстафеталары үтте. Шулай уҡ хоккей буйынса республика төбәк ярышына әҙерләнәбеҙ, биш райондан спортсылар көтәбеҙ. Әйткәндәй, беҙҙең ауылдарҙа хоккей менән мауығыусылар күп. Әле районда 12 хоккей ҡумтаһы эшләй, бынан тыш, балалар һәм үҫмерҙәр район үҙәге биҫтәләрендә, йылғаларҙағы боҙ өҫтөндә лә уйнай.

Беҙҙең маҡсат - физик культура менән шөғөлләнеүгә һәм ярыштарҙа ҡатнашыуға күберәк кеше йәлеп итеү. Физкультураның күп кенә ауырыуҙарҙы иҫкәртеүен, йәш быуында илһөйәрлек тойғоһо тәрбиәләүҙә лә ҙур роль уйнауын онотторға ярамай. Ата-әсәләр ҙә үҙенә тәмәке, спиртлы эсемлек урынына балаларына спорт инвентары һатып ала башлауы ла ҡыуаныслы.

**Лена АБДРАХМАНОВА яҙып алды.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостан дәүләт ҡурсаулығындағы "Башһырт" экологик-этнографик үҙәгендә "Урал батырҙың ҡышҡы уйындары" үтте. Ойоштороусылар хәбәр итеүенсә, программа бик бай: "Ылаҡ" уйыны, ат сабышы, "Урал батыр" эпосын яттан һөйләүселәр конкурсы, уҡ атыу турниры. Быйыл ат сабышы башҡа райондарҙан ҡатнашыусыларҙы ла йәлеп итте, араларында төрлө ярыштарҙа бер нисә тапҡыр еңеү яулаған тәжрибәле һыбайлылар байтаҡ.

✓Хеҙмәткәрҙәргә медицина тикшереүе үткәреүҙең яңы ҡағиҙәләре табиптар бригадаһының эш урынына барыуын күҙ уңында тота. Ҡағиҙәләр 2021 йылдың 1 апреленән 2027 йылдың 1 апреленә тиклем ғәмәлдә була, тип хәбәр итте Дәүләт хеҙмәт инспекцияһының матбуғат хеҙмәте. Медицина тикшереүенә йүнәлтмәлә (ул электрон булырға мөмкин) мотлаҡ медицина страховкалау полисының номеры күрһәтелергә тейеш.

✓Башҡортостанда 2021 йылда Башҡорт телендәге киң мәғлүмәт сараларының форумы - "Медиайыйын" ойоштоpола. Тейешле бойороҡҡа республика етәксеһе ҡул ҡуйған. Сара республиканың Ғафури районында була. Хөкүмәт вице-премьеры Азат Бадранов һәм Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Президиумы рәйесе Эльвира Айытҡолова етәкселегендәге ойоштороу комитетына форумды үткәреү буйынса саралар планын әҙерләү һәм раҫлау бурысы йөкмәтелгән.

✓Дәүләт Думаһының Башҡортостандан халыҡ һайланыусыһы Инга Йомашева ингән бер төркөм депутаттары ауырлы ҡатын-ҡыҙҙарға 20 мең һум түләү тураһында закон проекты әҙерләй. Авторҙар әсәләргә йыл ярым буйына айлыҡ түләүгә хоҡуҡ биргән махсус сертификат тапшырыу тәҡдиме менән сығыш яһай. Инга Йомашева, Николай Земцов һәм Петр Толстой был буласаҡ әсәнең матди хәлен яҡшыртып ҡына ҡалмаҫ, демографик хәлгә лә ыңғай йоғонто яһар тип иҫәпләй. Документтарҙы яҙғы сессияла уҡ ҡарауға индереү планлаштырыла.

✓2020 йыл йомғаҡтары буйынса, мәҙәниәт хеҙмәткәрҙәренең уртаса эш хаҡы 33 300 һум тәшкил иткән. Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәтенең өҫтәмә матди ярҙам күрһәтеүе һөҙөмтәһендә хеҙмәт хаҡы 2019 йыл менән сағыштырғанда 3,3 процентҡа артҡан. 2020 йылда муниципаль учреждениелар буйынса уртаса эш хаҡы - 28 440 һум, мәғариф ойошмалары буйынса - 34 885 һум, дәүләт учреждениелары буйынса 43 682 тәшкил

ҠЫҪҠАСА

## ҮҘМӘШҒҮЛЛЕККӘ КҮСӘЛӘРМЕ?

✓ **Республикала үҙмәшғүлдәр һаны арта. БР-ҙың Эшҡыуарлыҡ буйынса дәүләт комитеты башлығы Римма Бойцова белдереүенсә, бөгөнгә улар 37,7 мең кешегә еткән.** Республикала "Һөнәри килемгә һалым" махсус режимы 2020 йылдың 1 ғинуарынан ғәмәлдә. Үҙмәшғүлдәргә физик шәхестәр менән эшләгәндә 4 процентлы льготалы һалым ставкаһы ҡулланыла, ойошма-предприятиелар һәм шәхси эшҡыуарҙар менән эшләгәндә - 6 процент. Рәсми мәғлүмәттәр буйынса, былтыр 1900 бәләкәй һәм урта эшҡыуарлыҡ субъекты (МСП) эшмәкәрлеген туҡтатҡан һәм үҙмәшғүл статусында теркәлгән. Хәҙер Волга буйы федераль округында, тотош илдәге кеүек үк, МСП-лар һаны кәмей, шул уҡ ваҡытта Башҡортостанда был күрһәткес сағыштырмаса яҡшыраҡ - кәмеү 3,45 процент тәшкил итә (Волга буйы федераль округы - 4,47 процент, Рәсәй - 3,93 процент). Республика Хөкүмәте, пандемия һөҙөмтәһендә көрсөккә терәлгән бәләкәй һәм урта эшҡыуарлыҡҡа мөмкин тиклем ярҙам күрһәтергә тырыша һәм быйыл уларҙың һанын, шәхси эшҡыуарҙарҙы ла индереп, 456 меңгә еткерергә, йәғни МСП-ларҙы 145 меңгә, үҙмәшғүлдәрҙе 35 меңгә арттырырға планлаштыра.

✓ **Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров коронавирус инфекцияһы таралыу хәүефенә бәйле юғары әҙерлек тәртибе тураһында указға яңы үҙгәрештәр индерҙе.** Документтың яңы редакцияһына ярашлы, республиканың эш биреүселәре өсөн хеҙмәткәрҙәрҙе COVID-19 буйынса хәл тотороҡһоҙ булған илдәргә һәм төбәктәргә командировкаға ебәреүҙән, шулай уҡ сит ил вәкилдәре ҡатнашлығындағы саралар уҙғарыуҙан тыйылып торорға тигән тәҡдим ғәмәлдән сығарылды. 65 йәштән өлкәндәргә, хроник сирҙәрҙән яфаланғандарға мотлаҡ изоляция режимы 2021 йылдың 11 мартына тиклем һаҡлана. "Белем биреү учреждениеларында инфекция йоҡтороу билдәләре (температура, йүтәл, тын ҡыҫылыу) булған уҡыусыларҙы һәм хеҙмәткәрҙәрҙе асыҡларға, уларҙы эшләгән һәм уҡыған урындарына индермәскә кәрәк", - тип билдәләнә Башҡортостан Башлығы сайтында.

✓ **Республикала йәрминкә эшмәкәрлеген үҫтереү концепцияһы раҫланды. Ул заманса йәрминкә хеҙмәтен, йәрминкә инфраструктураһын үҫтереүҙе тәьмин итеүҙе, республикала етештерелгән тауарҙарҙы эске һәм тышҡы баҙарға сығарырға ярҙам итеүҙе, сауҙа объекттарын берҙәм стилдә эшләү талаптарын булдырыуҙы планлаштыра.** Әлеге ваҡытта Башҡортостанда йәрминкә үткәреү өсөн 321 майҙансыҡ эшләй, уларҙа барлығы 16675 сауҙа урыны бар. Республиканың иҡтисади үҫеше өсөн был күрһәткестәр генә аҙ. Шуға күрә концепция йәрминкә майҙандарын реконструкциялауҙы, яңы тәр объекттар төҙөүҙе, эшмәкәрлектә бизнестың ҡатнашыуын дәртләндереүҙе, йәрминкә сараларына һәм республика эшҡыуарҙарына, тауар етештереүселәренә үҙ тауарын һатыуҙа рәсми ярҙам күрһәтеүҙе күҙаллай.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

## УҢАЙЛЫ ИНТЕРНЕТ

**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров социаль селтәрҙә республикала "Уңайлы интернет" программаһының нисек ғәмәлгә ашырылыуын хәбәр итте.**

Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, "Уңайлы интернет" төбәк проектының инициаторы - республика Хөкүмәте һәм "Башинформсвязь" йәмғиәте. Ҡулөмле проекттың төп маҡсаты - ауылдарҙа йәшәүселәрҙең интернетҡа тоташыу мәсьәләһен хәл итеү, тип билдәләнәләр Хөкүмәттә. Әлеге ваҡытта Башҡортостандың 30 ауылында төҙөлөш эштәре алып барыла. Проект, сүс-оптик технологиялар ҡулланып, 262 бәләкәй ауылда бүлеү селтәрҙәре төҙөүҙе күҙ уңында тота. "Быны дәүләт-шәхси партнерлыҡ сиктәрендә эшләйбеҙ. Сығымдарҙың яртыһын "Башинформсвязь" йәмғиәте үҙ өҫтөнә ала, - тип билдәләнә республика етәксеһе. - Изоляция тәртибе һәм дистанциялы уҡытыу беҙгә көсһөҙ урындарҙы күрһәтте. Хатта ниндәйҙер кимәлдә рәхмәтлемен был хәлгә. Хәҙер аныҡ маҡсат - ауылдарыбыҙға интернет үткәреү. Тиҙлекле интернет, IP-телевидение һәм IP-телефония - республикала һәр кем ҡуллана алырлыҡ замансамы минимум". Билдәләнеүенсә, был проекттың үҙенсәлеге шунда: интернет ауылға ғына түгел, ә граждандарҙың ғаризаһы буйынса һәр йортҡа еткерелә. Башҡортостанда бөтәһе 100 мең кешене һәм 40 меңгә яҡын йортто интернет менән тәьмин итеү күҙаллана.

## АЛИМЕНТ ТҮЛӘЙҺЕҢМЕ?

**Башҡортостанда алимент буйынса бурысы булғандар менән социаль килешеүҙәр төҙөлә. Был ауыр тормош хәленән сығырға, бюджеттан аҡса алырға, эш табырға, кәрәк икән, яңы һөнәр үҙләштерергә, эшҡыуар булып китергә һәм килемдән алимент түләргә мөмкинлек бирергә тейеш.**

Ошо хаҡта Суд приставтары федераль хеҙмәтенең Башҡортостан идаралығы һәм республиканың Хеҙмәт министрлығы ойошторған онлайн матбуғат конференцияһында билдәле булды. Билдәләнеүенсә, килешеүгә ҡул ҡуйған һәр кемгә унда яҙылған сараларҙы тормошҡа ашырырға ярҙам итеү өсөн куратор тәғәйенләнә. 2020 йылда Башҡортостанда алты мең контракт төҙөлгән, быйыл уларҙың һанын арттырыу планлаштырыла. Шул маҡсатта федераль бюджеттан 383 миллион һум алыу күҙаллана. Контрактта бәйлелектән дауаланыу, шулай уҡ артабан реабилитациялау ҡаралған. Суд приставтары федераль хеҙмәтенең Башҡортостан идаралығы етәксеһе Илнур Мәхмүтов һүҙҙәренсә, әлеге ваҡытта Башҡортостанда алимент буйынса бурысы булған биш кеше ошондай ярҙам ала. Социаль килешеү төҙөү өсөн ғаризаны күп функциялы үҙәктә, Республика социаль ярҙам үҙәгендә, мәшғүллек үҙәктәрендә бирергә мөмкин. Консультация алыу өсөн телефон: 8-347-200-80-80.

## БЕРЛӘШКӘНДӘН ҺУҢ...

**Башҡортостандың яңы юғары уҡыу йорто исемендә мотлаҡ "Башҡорт" һүҙе була. Ошо хаҡта "Коммерсантъ-Башкортостан" гәзите ойошторған сарала белдерелде.**

"Был - йәмғәтселектең ҙур теләге, республика Хөкүмәте лә быны менән риза. Милли үҙенсәлек һаҡланырға тейеш. Әлеге ваҡытта яңы юғары уҡыу йортона ниндәй атама биреү тураһында фекер алышыу бара", - тине вице-премьер Азат Бадранов.

Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, 2021 йылдың ғинуар аҙағында Башҡортостан Башлығы Хакимиәте етәксеһе Александр Сидякин республиканың ике ҙур юғары уҡыу йортон берләштереү идеяһы тураһында әйткәйне. Властар фекеренсә, тәү сиратта, был яңы белем биреү учреждениеһына конкурентлыҡҡа һәләтле булырға ярҙам итергә тейеш. Әле берләштереү мәсьәләһе хәл ителгән. Проекттың "юл карта"һы әүҙем тикшерелә. Республикала донъя кимәлендәге университет булдырыу студенттар һанын ҡыҫҡартыу түгел, ә арттырыуҙы күҙ уңында тота, тине Башҡортостан Хөкүмәте вице-премьеры Азат Бадранов Башҡорт дәүләт университеты менән Өфө дәүләт авиация техник университетын берләштереүгә арналған матбуғат конференцияһында. "Бөгөнгә Башҡорт дәүләт университеты һәм Өфө дәүләт авиация техник университеты студенттарының дөйөм һаны яҡынса 40 мең тәшкил итә. Донъя кимәлендәге университеттың маҡсаты - студенттар һанын 100 меңгә еткереү. Шуға күрә, йәнәһе, бөтәһе лә бинаны тартып алыу, оптимизация үткәреү, студенттар һанын кәметеү өсөн эшләнә, тигән һүҙҙәр бөтөнләй нигеҙһеҙ", - тип белдерҙе Азат Бадранов.

## "ҮЛЕМҺЕҘ ПОЛК" ТУРАҺЫНДА...

**Башҡортостан Хөкүмәте Йортонда үткән "Рәсәйҙең Үлемһеҙ полкы" хәрәкәтенең төбәк штабы ултырышында быйыл Өфөлә һәм республикала "Үлемһеҙ полк" акцияһын ойоштороу мәсьәләләре тикшерелде.**

Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, былтыр коронавирусҡа бәйле хәл арҡаһында акция үҙенсәлекле форматта үтте. Виртуаль "Үлемһеҙ полк" ойошторолдо. Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашыусыларҙың анкеталары polk02.ru порталына урынлаштырылды. Геройҙарҙың фотоһүрәттәре Башҡортостан юлдаш телеканалында һәм медиаэкрандарҙа күрһәтелде. Быйыл акция тулы масштаблы форматта уҙғарыла. Ултырышта Өфөнөң "Үлемһеҙ полк"ы колоннаһын һәм хәрәкәт маршрутын төҙөү урыны билдәләнде. Геройҙарҙың портреттары менән колонна Октябрь проспекты менән Галле ҡалаһы исемендәге урам киҫелешенән Шота Руставели урамына тиклем атлай. Шулай уҡ республиканың барлыҡ муниципалитеттарында "Үлемһеҙ полк" колоннаһын теҙеү, уның хәрәкәт итә башлау ваҡыты, дөйөм республика Тынлыҡ минуты билдәләнде.

## БЕР ТАПҠЫР БИРЕЛӘ

**2020 йылдың 1 июленән һуң балаһы тыуған йәки уллыҡҡа алған, шулай уҡ йыл дауамында Пенсия фондына балалар аҡсаһы алыу өсөн мөрәжәғәт итмәгән ғаиләләр 1 апрелгә тиклем 5 мең һум күләмендә бер тапҡыр бирелә торған түләүгә ғариза яҙырға мөмкин.**

Ғаризаны дәүләт хеҙмәттәре порталы аша ебәрергә йәки Рәсәй Пенсия фондының ҡала-районндарҙағы клиент хеҙмәттәренә мөрәжәғәт итергә була, шул иҫәптән 2020 йылдың 1 июленән һуң тыуған балаларға ла. "Һәр баланың тыуыу тураһында таныҡлығы мәғлүмәттәрен һәм аҡса күсереү өсөн банк иҫәбе реквизиттарын күрһәтергә кәрәк. Балаларға аҡса алған ата-әсәләрҙең банк иҫәбе ябылған осраҡта ла ғариза талап ителә", - тип белдерҙеләр Рәсәй Пенсия фонды Башҡортостан буйынса бүлексәһенең матбуғат хеҙмәтендә. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, 7 йәшкә тиклемге балаларҙың ата-әсәләре, опекундары һәм попечителдәре 5 мең һум күләмендәге бер тапҡыр бирелә торған түләү алыуға хоҡуҡлы. Былтыр 3 йәшкә тиклемге балаларға айлыҡ түләү йәки 3-16 йәшлек балаларға бер тапҡыр бирелә торған аҡса алған ғаиләләргә декабрҙә Пенсия фонды 5 мең һумды автоматик рәүештә күсерҙе. Башҡортостанда 2020 йылдың 17 декабренә 8 йәше тулмаған 387 мең балаға аҡса ғаризаһыҙ күсерелде.

## Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Башҡортостанда совет дипломаты Кәрим Хәкимовҡа һәйкәл ҡуйыу урыны билдәләнде. Ул В.И. Ленин исемендәге паркта, Совет һәм Тукай урамдары киҫешкән ерҙә урынлаштырыла. Мәҙәниәт министрлығы Өфө ҡалаһында һәйкәлдең иң яҡшы проектына конкурс иғлан итте. Конкурста ҡатнашыу өсөн ғаризалар, проекттар, аңлатмалы яҙыуҙар, график материалдар һәм смета-финанс иҫәпхисаптары 2021 йылдың 21 майына тиклем "Рәсәйҙең рәссамдар союзы" Бөтә Рәсәй ижади ойошмаһының Башҡортостан Республикаһы төбәк бүлексәһендә ҡабул ителә: Өфө ҡалаһы, Октябрь проспекты, 148. Телефон: 8 (347) 284-42-47.

✓Өфө хакимиәте кубогына туғыҙынсы ҡышҡы Корпоратив уйындарҙа ҡатнашыусылар быйма кейеп хоккей уйнау, ҡарҙа волейбол, конькиҙа уҙышыу спорты, саңғы ярышы һәм тау саңғыһы спорты буйынса таҫыллығын күрһәтте. Ярыштар "Кашҡаҙан" паркында, 33-сө, 10-сы олимпия резервындағы спорт мәктәптәрендә, тау саңғыһы спорты буйынса олимпия резервындағы спорт мәктәбендә ойошторолдо. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, беренсе ҡышҡы Корпоратив уйындары 2013 йылда булғайны.

✓ Рәсәй 2021 йылдың 27 ғинуарынан Вьетнам, Һиндостан, Финляндия һәм Катар менән авиабәйләнеште тергеҙҙе. 2021 йылдың 27 ғинуарынан Вьетнамға (Мәскәү - Ханой), Һиндостанға (Мәскәү - Дели), Финляндияға (Мәскәү - Хельсинки һәм Санкт-Петербург - Хельсинки) - аҙнаһына ике тапҡыр, Катарға (Мәскәү - Доха) аҙнаһына өс тапҡыр осорға мөмкин. Бынан тыш, оперштаб Мәскәү - Ҡаһирә маршруты буйынса Мысырға даими рейстар һанын аҙнаһына биш тапҡырға тиклем арттырыу тураһында ҡарар ҡабул итте.

✓Өфөлә 4 мартта пенсия алды һәм пенсия йәшендәгеләр өсөн вакансиялар йәрминкәһе ойоштороласа. Автомобиль йөрөтөүсе, һаҡсы, урам һепереүсе, контролер, кондуктор, кухня эшсеһе, производство биналарын йыйыштырыусы, балта оҫтаһы, слесарь-сантехник, электрик һөнәрҙәре вакансиялары булыуы хәбәр ителә. Йәрминкә Ибраһимов бульвары, 47/1 адресы буйынса көндөҙгө сәғәт 10-12 -лә үтә.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

✓ **Беҙҙә әлегәсә асфальт түшәлмәгән юлдар, инеүе лә ҡурҡыныс булған ихаталар, хәүефле парктар бар. Халыҡ йылылыҡ өсөн хаҡ артыуына борсолоу белдерә, тимәк, тиҙ арала хәл ителергә тейешле системалы проблема бар.**



ҠАЛА ХАКИМИӘТЕНДӘ

# ДЕПУТАТТАР ХАТАЛАНМАНЫ



**Өфө ҡала Советының сираттағы ултырышында Өфө ҡала хакимиәте башлығы Сергей Греков эшмәкәрлеге һәм киләсәккә пландары тураһында отчет менән сығыш яһаны. Сарала Башҡортостан Республикаһы Хакимиәте етәксеһенең эске сәйәсәт буйынса урынбаҫары Урал Килсенбаев ҡатнашты.**

Эш башлауына ике ай тирәһе генә ваҡыт үтеүгә ҡарамаҫтан, Сергей Греков баш ҡалала күҙенә салынған етешһеҙлектәр булыуын да билдәләп үтте. Перспективаға килгәндә иһә, ул барлыҡ өлкәләргә лә йоғонто яһарға тырышырға тигән ҡараштан сығып күҙаллауҙарын бәйән итте. Йәғни, башҡалары менән сағыштырғанда былай ҙа яҡшыраҡ эшләй алған бурыстарҙы "бишлегә" башҡарыу менән генә ҡәнәғәтләнмәҫкә, артта ҡалған позицияларҙы ғына алға сығарырға тырышмаҫҡа, ә барлыҡ күрһәткестәр буйынса ла даими рәүештә һәм ышаныслы аҙымдар менән алға барырға кәрәклегенә баҫым яһаны. Әлбиттә, былтыр барлыҡ пландарҙы селпәрәмә килтергән пандемия кеүек көтөлмәгән күренештәргә лә әҙер булырға кәрәк.

Шулай уҡ мэрҙың иғтибарынан демография мәсьәләһе лә ситтә ҡалманы: элегерәк Өфөлә халыҡ һаны йылдан-йыл арта барһа, былтыр ул кәмегән һәм быны сәбәптәре тыуымдың кәмеүе йәки үлемдең артыуына ғына бәйле түгел, ә пандемия арҡаһында миграция ағымының сикләнеүендә.

Миҙал ике яҡлы булған кеүек, кире яҡтың ыңғай яғы ла була: былтыр электрон муниципаль хеҙмәт күрһәтеү өлөшө күпкә артҡан. Был социаль селтәрҙәрҙең ике яҡлы бәйләнеш булдырыуға ыңғай йоғонто яһауын дәлилләй. Әлеге ваҡытта өфөләргә ҡыҙыҡлы һәм матур идеялары менән бүлешеү мөмкинлеген биреү өсөн ҡала хакимиәте онлайн-платформа әҙерләй. Бындай майҙансыҡтар етәкселек күреп өлгөрмәгән проблемаларҙы, киҫекмәҫтән хәл ителергә тейешле мәсьәләләрҙе халыҡ аша алыу мөмкинлеге бирә.

Эшләнгән эштәр менән бер рәттән, Сергей Греков алда торған бурыстарға ла туҡталды. "Өс йылдан Өфө үҙенең юбилейын билдәләйәсәк һәм беҙҙең пландарыбыҙ бик ҙур, әммә, әйҙәгеҙ, хыялдарҙан ергә төшәйек - байрамға тиклем беҙгә "тығын"дарҙа ултырырға ла, ҡаҙылған урамдар аша йөрөргә лә тура киләсәк. Ҡаланың урынлашыу үҙенсәлеге беҙҙе һәр саҡ транспорт проблемаһына алып ҡайтасаҡ, шуға күрә иң перспективалы һәм экологик төрҙө - электр транспортын үҫтереү зарур. Дөрөҫөн әйткәндә, Өфөнөң транспорт схемаһы иҫкергән һәм заманса талаптарға яуап бирмәй. 2019 йылдан алып Генераль план эшләнә, уны тормошҡа ашырыу өсөн һәр гектар ерҙе иҫәпкә алып, уның килем ҡеүәтен баһаларға, уларҙы эксперттар ярҙамында иң файҙалы йүнәлештә ҡулланыу кәрәк. Шулай уҡ архитектурала берҙәм һәм аңлайышлы стандарттар булдырыу зарур. Яңы йорттар төҙөгәндә уларҙы баштан уҡ социаль инфраструктура менән тәьмин итеү процесын яйға һалыу бурысы ла тора. Шулай уҡ Генплан Өфө агломерацияһы үҫешен дә иҫәпкә алырға тейеш", - тине Сергей Греков.

Әлеге ваҡытта Өфө халҡы миллиондан ашҡан ҡалалар араһында торлаҡ менән тәьмин итеү буйынса бишенсе урында тора. Тағы ла 4 миллион квадрат метр торлаҡ төҙөлөшөнә рөхсәт бирелгән. Бөгөн Өфө, нигеҙҙә, Глумилино, Затон, Дим, Кузнецов затоны, Башҡортостан сәскәләре, 8 Март ҡасабаһы биҫтәләрендә төҙөлә. Шулай уҡ Ағиҙел аръяғына ла ҙур өмөттәр бағлана. Бер үк ваҡытта алданған өлөшсөләр, авария торошондағы йорттарҙа йәшәүселәр проблемалары ла хәл ителә. Шулай уҡ баш ҡалала төҙөлөп бөтмәгән ташландыҡ биналар ҙа бар. Уларҙың һаны 80-гә етә. Улар ҡаланың йөҙөн генә боҙоп ҡалмай, граждандар өсөн хәүеф тә тыуҙыра.

Бөгөн Өфөнөң сәнәғәт секторын 122 эре һәм урта предприятие, 4 меңдән ашыу бәләкәй бизнес тәшкил итә. Уҙған йыл һөҙөмтәләре буйынса сәнәғәт предприятиелары тейәп оҙатҡан продукция күләме 785 миллиард һум тәшкил итә, пандемия тәьҫирендә был күрһәткес 200 миллиард һумға кәмегән. Шулай уҡ ҡулланыусылар һорауы ла төшкән. Эшһеҙлек тә артҡан. Шуныһы иғтибарға лайыҡ - пандемияға ҡарамаҫтан, инвестициялар күберәк йәлеп ителгән.

"Мәктәптәргә килгәндә, уларҙың 30 проценты уҙған быуаттың 60-70-се йылдарында төҙөлгән, һәм балаларҙың күпселеге шунда белем ала. Әлбиттә, яңы, заманса мәктәптәр менән уҙған быуат мәктәптәрен сағыштырып булмай һәм балаларҙың унда уҡыуы ғәҙел түгел. Балалар баҡсалары тиҙ темптар менән төҙөлә, әммә 226 балалар баҡсаһының 61-ендә генә ясле төркөмө бар. Тимәк, ҡайҙалыр әсәйҙәр эшкә һәм уҡыуға иртәрәк сыға алмай. Былтыр баш ҡалаға уҡырға һәм эшкә 25 меңдән ашыу йәш кеше килгән, беҙгә уларҙы тыңларға һәм ишетергә, уларҙың теләктәрен төрлө яҡтан уйлап өйрәнергә, уларға социаль, спорт, ижади потенциалын тормошҡа ашырыу мөмкинлеге бирергә кәрәк.

Баш ҡалала, бигерәк тә ҡала үҙәгендә, мәҙәниәт һәм сәнғәт учреждениелары менән тәьмин итеү мәсьәләһе киҫкен тора. Булғандары ла ремонт һәм модернизация талап итә. Мәҙәни йүнәлештәге дәрестәрҙе бер сменала эшләүсе мәктәптәр базаһында ойошторорға мөмкин, мәҫәлән, уларҙа сәнғәт мәктәбе филиалы асыу. Әгәр тәжрибә үҙен аҡлаһа, уны таратырға ла була.

Әлеге ваҡытта транспорт йөрөгән юлдар йәйәүлеләр йөрөгән юлдарға ҡарағанда таҙараҡ. Ләкин беҙ шуны оноторға тейеш түгелбеҙ: ҡалалар йәйәүлеләр өсөн. Урамдарҙы яҡтыртҡанда, тротуарҙарҙы ҡарҙан таҙартҡанда, уларҙы халыҡ өсөн уңайлы итеп эшләгәндә беҙ ысынлап та глобаль мәсьәләләрҙе хәл итәбеҙ. Шундай ябай эштәрҙе башҡарыуҙы ғәҙәткә индерһәк, маҡсатыбыҙға тағы ла нығыраҡ яҡынлашасаҡбыҙ.

Былтыр туристар ағымы 2,5 тапҡырға кәмеһә лә, Өфө тарихи һәм мәҙәни саралар сиктәрендә генә түгел, ә йәйәүлеләр, велотуризм, йылға туризмы, шулай уҡ ваҡиға, сәнәғәт, медицина, гастрономия туризмы ҡалаһы була ала.

Әгәр бер йылдан һуң 2020 йыл менән 2021 йылды сағыштырып ҡарап, беҙ һәр һан буйынса ыңғай үҫеш күҙәтә алһаҡ, йыл уңышлы булды, тип әйтергә мөмкин булыр. Беҙҙең маҡсаттар бер, берҙәм булып ҡына алға ҡуйған бурыстарҙы йырып сыға аласаҡбыҙ", - тине Сергей Греков.

Башҡортостан Республикаһы Башлығы Радий Хәбиров Өфө ҡалаһы мэрының ҡала Советының 75-се сессияһындағы программа сығышын түбәндәге комментарий менән баһаланы:

- Сергей Греков Өфөнөң ҡаҙаныштары тураһында һөйләне, әммә, иң мөһиме - ҡаланың бизмәнгә һалып хәл итә торған проблемалары хаҡында белдерҙе. Беҙҙә әлегәсә асфальт түшәлмәгән юлдар, инеүе лә ҡурҡыныс булған ихаталар, кисҡырын йөрөүе хәүефле булған парктар бар. Халыҡ йылылыҡ өсөн хаҡ артыуына борсолоу белдерә, тимәк, тиҙ арала хәл ителергә тейешле системалы проблема бар. Мәсьәләләр бик күп. Әйтеүемсә, беҙгә "паркет" түгел, ә "ялан" етәксеһе кәрәк. Сергей Николаевичтың беренсе аҙымдарын күрәм, улар дөрөҫ йүнәлештә яһала. Депутаттар сити-менеджер һайлауҙа хаталанманы, тип уйлайым. Мин дә үҙ яғымдан баш ҡала мэрына барлыҡ башланғыстарында ла ярҙам итәсәкмен. Беҙҙең дөйөм бурысыбыҙ - берҙәм эшләп 2024 йылға Өфөгә уңайлы йәшәү өсөн мөһим объекттар һәм инфраструктура бүләк итеү.

**Земфира ХӘБИРОВА әҙерләне.**

*ҠЫҪҠАСА*

## ҠАЙҘА УҠЫРҒА БАРЫРҒА?

✓ **Ҡала округы хакимиәтендә Өфө биләмәһендәге юғары уҡыу йорттарына инеү үҙенсәлектәренә арналған онлайн форматтағы брифингтар серияһының йомғаҡлау ултырышы үтте.** Мәғлүм булыуынса, 5 февралдән алып бындай брифингтар һәр аҙна һайын ойошторола, ҡатнашыусылар үҙҙәренең вузы менән таныштыра, һорауҙарға яуаптар бирә. Унда төбәктең 10 юғары уҡыу йорто ҡатнашҡан. Ошо ваҡыт эсендә эфирҙарҙы 7,5 меңдән ашыу кеше ҡараған. Сираттағы брифингта Башҡортостан Республикаһы Башлығы ҡарамағындағы Башҡортостан дәүләт хеҙмәте һәм идара итеү академияһы ректоры Илгиз Ҡәҙерғолов, РФ Хөкүмәте ҡарамағындағы Финанс университеты Өфө филиалының уҡытыу-тәрбиә эше буйынса директор урынбаҫары Елена Козлова ҡатнашты. Улар быйыл үҙҙәре эшләгән уҡыу йорттарына уҡырға инеү үҙенсәлектәре, документтар тапшырыу ваҡыты һәм ҡағиҙәләре, һөнәрҙәр, конкурс шарттары тураһында ентекле һөйләп, һорауҙарға яуап бирҙе.

✓ **Өфөлә 25 февралдән иң популяр булған 290-сы "Өфө ағас эшкәртеү комбинаты - "Пушкин" сауҙа-сервис комплексы" маршрутының расписаниеһы үҙгәрә, йәғни рейстар һаны арттырыла һәм эш режимы оҙайтыла.** Тәүге автобус иртәнге алты тула ете минутта маршрутҡа сыҡһа, автобустар пассажирҙарҙы төнгө беренсе 15 минутҡа тиклем хеҙмәтләндерәсәк. Пик сәғәттәрендә интервал - 5-7, башҡа ваҡытта 8-10 минут буласаҡ. Маршрутта билет өсөн түләүҙе ҡулаҡсаһыҙ башҡарырға мөмкин. "Алға" картаһын ҡулланғанда "бәхетле сәғәт" тарифы ғәмәлдә, йәғни бер сәғәт эсендә шул уҡ билет менән икенсе маршрутҡа күсеп ултырып, бушлай барырға була.

## Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Ашҡаҙан яман шеше

❖ Был сирҙән халыҡ дауаһы ҡайын ороһо (чага) төнәтмәһен эсергә кәңәш итә. Ҡайын ороһон эмалле кәстрүлгә һалып, өҫтөнә сығарғансы ҡайнап йылымысланған һыу ҡойорға (40-50 градус С). Уны 4-5 сәғәт төнәткәс, ҡырғыс йәки ит турағыс ярҙамында онтарға. Ебетеү өсөн ҡулланылған һыуҙы 50 градусҡа тиклем йылытырға һәм 5 өлөш һыуға 1 өлөш нисбәтен һаҡлап, онталған ҡайын ороһон эсенә төшөрөргә. Ике тәүлек төнәткәс, марля һәм беше туҡыма аша һөҙөргә. Көн дауамында аҙлап эсеп йөрөргә, 3 стакандан да кәм булмаһын.

❖ Бер балғалаҡ ваҡланған ҡылыс үлән (аир) тамырына 200 мл һыуыҡ һыу ҡойорға һәм төнгөлөккә ҡалдырырға. Иртәнсәк һөҙөргә, саҡ ҡына йылытырға. Төнәтмәне ашарҙан ярты сәғәт алда һәм ашағандан һуң ярты сәғәт үткәс, берәр уртлам эсергә. Көнөнә 6 тапҡыр ҡулланырға. Иртәнле-кисле 200-әр мл меңъяпраҡ сәйе эсеү һауығыуҙы тиҙләтә.

### Тромбоцитоз

❖ Ҡанда тромбоциттар кимәле юғары булғанда уны нормаға килтереү өсөн 50 грамм ат каштаны емеше ҡабығына ярты литр араҡы ҡойоп, ауыҙы ҡаты ябылған һауытта ике аҙна төнәтергә кәрәк. Төнәтмәне көнөнә ике тапҡыр (төшкә һәм кискә) ашарҙан ярты сәғәт алда саҡ ҡына шәрбәтләндерелгән 50 мл һыуға 30-35 тамсы тамыҙып эсергә кәрәк. Дауаланыу осоро - 3 аҙна. Кәрәк булғанда, бер аҙна туҡтап торғандан һуң тағы ла ҡабатларға була.

❖ Күгән (терн) һәм бәпембә сәскәләрен бер тигеҙ нисбәттә алып ҡушырға. Йыйылманың 2 ҡалағына 400 мл ҡайнар һыу ҡойорға, 1 сәғәт төнәтергә һәм һөҙөрҙгә. Көнөнә 3-4 тапҡыр ашарҙан алда 100-әр мл эсергә. Дауаланыу осоро - 1 ай.

### Көҙән йыйырыу

Иртәнсәк һәм кискегә табандарға лимон һуты һөртөргә. Һут тирегә һеңгәс, ойоҡ кейергә. Дауаланыуҙы 10-15 көн дауам итергә.

**Ғәлиә ШӘМСИЕВА әҙерләне.**

ЙОЛАНДАН ЙӰН ТАП!



# БАШҠОРТ ТУҠЫМАҺЫ

Йөн епте һәм әҙер әйберҙе һыуҙа сайҡаған һәм йомғаҡланған епте буяған ваҡытта, һирәк һуғылған билбау, сылғау һәм башҡа әйберҙәрҙе тығыҙландырған саҡта термик эшкәртеү башҡарылған. Тула кейеҙ кеүек баҫылған. Тығыҙ туҡылған ике киҫәк туҡыма бергә ҡушып тегелгән, уны септәгә йәйеп һалғандар һәм өҫтөнән ҡайнар һыу ҡойғандар. Шунан уны төргәкләп бауҙар менән уратып бәйләгәндәр һәм кейеҙ кеүек баҫҡандар. Ҡайһы бер осраҡта әлпәлә (начес) - йылытылған әйбер эшләү маҡсатында туҡыма өҫтөнә йоҡа ғына итеп йөн мамыҒын таратып һалғандар.

Малсылыҡ менән шөғөлләнгән ҡусмәндәр араһында йөн ҡулланыу тәбиғи күренеш, әммә был халыҡтарҙың барыһында ла туҡыусылыҡ үҫешмәгән; ҡайһыларында туҡыма урынына йоҡа кейеҙ ҡулланылған.



*Ҡулдан һуғылған туҡыманан өҫ һәм аяҡ кейеме. РЭМ. XX быуат башы.*

Көньяҡ Себерҙең скиф һәм һун-сармат осороно ҡараған Тува, Алтай ҡәберлектәре, Ноинулин ҡурғандары һәм башҡа урындарындағы ҡаҙылмалар йөн туҡымалар һәм кейемдәр үрнәктәрен бирә. Туҡыма киҫәктәрен тикшереү һөҙөмтәһендә, улар урын агасында ябай туҡыма ысулы менән туҡылғанлығы билдәле булған. В.В. Радлов альбомындағы (Санкт-Петербургтағы Антропология һәм этнография музейы архивында) һүрәттәрҙе өйрәнгәндә тикшеренеүсе А.А. Гаврилова 1-се Катандин ҡурғанында табылған йөн кейем туҡымаһы һәм ҡырғыҙҙарҙың дөйә йөнөнән һуғылған әрмәге араһында оҡшашлыҡ барлығына иғтибар итә. Ноинулин ҡурғандарындағы (беҙҙең дәүерҙән алдағы осор) йөн туҡымаларҙың киңлеге 32-33 см булған. Туҡыманың буйғауы күпселек осраҡта ике ҡат ептән торған; йөн менән мамыҡ йыш ҡына бергә ҡулланылған. Ул ябай туҡыма ысулы менән һуғылған һәм һунынан ғына әсеүташ йәки тимерле ҡушымталарҙан торған протравалы үҫемлек буяуҙары ярҙамында буялған (шул иҫәптән марена). Үрҙә телгә алынған осраҡтар Азия һәм Европаның һуңғы осор малсылыҡ менән шөғөлләнеүсе халыҡтары тәжрибәһендә лә күҙәтелгән. Айырып әйткәндә ҡырғыҙҙарҙа, көньяҡ һәм көнсығыш башҡорттарында. Уларға ике ҡатлап сиратылған еп, туҡыманың киң булмауы, туҡыманы һуҡҡас буяу, минераль протравалы үҫемлектәрҙән алынған тәбиғи буяуға өҫтөнлөк биреү хас булған.

**Светлана ШИТОВА.**

**"Халыҡ сәнғәте: көньяҡ башҡорттарында кейеҙ, балаҫ һәм туҡымалар. Этнографик очерктар" китабынан.**

ҠОРОЛТАЙ ЗЫҢҒЫРЫ

# РЕСПУБЛИКАНЫ ИҢЛӘЙ...

## ырыуҙар хәрәкәте



**Ошо көндәрҙә Ҡариҙел районында унлар ырыуы башҡорттары ҡор йыйҙы. Сара Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты иғлан иткән Башҡорт тарихы йылы һәм Республика халыҡ ижады үҙәге тормошҡа ашырған "Ырыу ағасы" фольклор фестивале сиктәрендә ойошторолдо.**

Хәҙерге ваҡытта унлар вәкилдәре Башҡортостандың Асҡын районының - Упҡанкүл, Борай районының - Баҡалы (Имәнкүпер), Дауытлар, Иҫке Киҙгән, Иҫке Ҡарағош, Кәшкәләү, Яңы Киҙгән, Яңы Ҡарағош, Ҡариҙел районының - Абдулла, Дүртөйлө, Иҫке Аҡбүләк, Йәнсәйет (Иҫке Йәнсәйет), Кантон, Кедесе, Ҡараяр, Малик, Маты, Тигермән, Туйыш, Хәлил, Шамрат, Юлдаш, Яҡуп, Яңы Аҡбүләк, Яңы Бәрҙәш, Яңы Йәнсәйет ауылдарында, шулай уҡ Балтас һәм Мишкә районларында йәшәй

Оло ҡорға Ҡариҙел, Борай, Асҡын райондарынан унлар ырыуы вәкилдәре йыйылды. Ҡунаҡтарҙы тантаналы ҡаршы алғандан һуң уларҙы ырыу халҡына ғына хас үҙенсәлектәр, төрлө ҡул эштәре, традицион башҡорт ғаиләһе кәрәк-ярағтары һәм йорт йыһаздары ҡуйылған күргәҙмә менән таныштырыу хәҙер инде айырым бер йолаға әүерелде. Хәлил, Түбәнге Булмазы, Иҫке Баҡазы, Яңы Бәрҙәш, Тайкаш ауылдары оҫталары алып килгән кейем-һалым, биҙәү-естәр, милли аш-һыу төрҙәре һәм башҡа экспонаттар барыһында ла ҡыҙыҡһыныу уятты.

Шулай уҡ съезд эшендә Борай районында йәшәүсе унлар ырыуы вәкилдәре лә ҡатнашты. Улар ҙа йыйынға тарихы, көнкүреше һәм мәҙәниәтен сағылдырған башҡорт милли кейеме һәм биҙәүестәре күргәҙмәһе әҙерләп алып килгәйне.

Мөртәбәле ҡунаҡтар - Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте Премьер-министры урынбаҫары, Ауыл хужалығы министры Илшат Фаҙрахманов, Ҡариҙел районы башлығы Айҙар Шәйҙуллин, Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты рәйесе Ғәлим Яҡуповтан тыш, йыйын эшендә тарихсы ғалимдар, билдәле унлар ырыуы вәкилдәре - ветеран педагог Сәймә Ғиззәтуллина, журналистар Ришат Миндияров менән Вәрисә Ниғмәтуллина ҡатнашты. "Тамыр" республика балалар телеканалының "Нурбостан"ы ла ырыуҙар буйлап сәйәхәтен дауам итә, кескәйҙәрҙе тарих менән генә түгел, "Нурбостан" беренсе башҡорт йәнһүрәт сериалы менән дә таныштыра. Балалар ҙа осрашыуға буш ҡул йөрөмәй улар үҙҙәренең шәжәрәһен эшләп, ағайапайҙарына үҙҙәренең тәрән тамырлы булыуын һөйләй. Был юлы "Тамыр" менән осрашыуға Ҡараяр, Абдулла, Яңы Бәрҙәш ауылдарынан ҡыҙҙар һәм малайҙар йыйылғайны.

Йыйынды район башлығы Айҙар Шәйҙуллин асып: "Башҡортостан халыҡтары мәҙәниәтен үҫтереү һәм уларҙың үҙенсәлеген һаҡлау - республика һәм район алдында торған өҫтөнлөклө бурыстарҙың береһе. Йылдар дауамында тупланған ғилем һәм тәжрибәне йәш быуынға тапшырыу белем биреү учреждениеларында туған телде, тыуған төйәк һәм республика тарихын уҡытыу аша башҡарылһын өсөн күп эштәр атҡарыла", - тине. Урындағы тыуған яҡты өйрәтеүсе тарихсылар Өлфәт Ҡыямов, Фидаил Сафин, Әлиә Камалиева, Камил Солтанов һәм башҡаларҙың сығыштары бик ҡыҙыҡлы һәм мауыҡтырғыс булды.

"Без башҡортлар" хәрәкәте етәксеһе Радик Бәхтиев шәжәрәләрҙең ғәмәлдәге файҙаланыу мөмкинлеге һәм ата-бабалар алдындағы яуаплылыҡ хаҡында һөйләне. Ғалимдар Салауат Хәмиҙуллин, Юлдаш Йософовтың сығышы йыйылыусыларҙа ҙур ҡыҙыҡһыныу уятты. Ғөмүмән, Башҡортостан Республикаһының төньяҡ-көнбайыш районларында тыуған яҡты өйрәнеүселәр айырыуса әүҙем эшләй. Һөйләштәре әҙәби телдән айырмалы булғас, төньяҡкөнбайыш башҡорттарына үҙ башҡорт тамырҙарын иҫбатлау өсөн тарихына, килеп сығышына айырыуса иғтибар итергә, шәжәрәләрен барларға тура килә. Әйтергә кәрәк, һуңғы йылдарҙа республикала был өлкәлә ыңғай яҡҡа ярайһы уҡ үҙгәреш тәр күҙәтелә. Төньяҡ-көнбайыш диалектын төбәк мәктәптәрендә өйрәнеү, ошо телдә гәзит-журнал сығарыу, китаптар баҫтырыу мөмкинлеге ҡарала.

Форумдағы фәһемле һәм файҙалы һөйләшеүҙән, фекер алышыуҙарҙан һуң делегаттар съезд Советын, ҡор башын һайланы. Ырыуҙар йыйыны штандарты Бүҙәк районы вәкилдәренә тапшырылды. Хәҙер инде Ҡаңлы ырыуы башҡорттары ҡор йыйаҡ.

...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ

# РУХЛЫ ОСРАШЫУ



**Баш ҡаланың Мостай Кәрим исемендәге 158-се Башҡорт гимназияһында Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, Шәйехзада Бабич исемендәге дәүләт республика йәштәр премияһы лауреаты, шағирә Зөлфиә Ханнанова менән "Шиғриәттә халҡым тарихы" тип аталған осрашыу үтте.**

Был сара Башҡортостан Яҙыусылар союзының Мәҙәниәт министрлығы һәм Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы менән берлектә иғлан ителгән "Тарих яҙыр инем ташына" тигән Республика әҙәби марафонын лайыҡлы ҡабул итеү булды. Осрашыуға марафондың кураторы, Яҙыусылар союзы рәйесе урынбаҫары Нурлан Рәшит улы Ғәниев һәм Киров районы мәктәптәренең башҡорт теле уҡытыусылары килде. Был гимназияла эшләгән уҡытыусылар ойошторған саралар һәр ваҡыт рух күтәренкелеге, телһөйәр, илһөйәр балаларҙың аһәңле сығыштары менән айырылып тора. Был юлы ла шулай булды. Уҡытыусылар аралашыу мөхитенә үҙенсәлекле йылылыҡ өҫтәһә, уҡыусыларҙың матур итеп шиғыр һөйләүе күңелдәргә май булып ағылды. Зөлфиә Ханнанова иһә үҙенең шиғриәтен яҡын иткән мәктәп коллективына ихлас рәхмәтен белдерҙе, үҙе лә шиғри күстәнәстәрен бүләк итеп, милләт тарихы, киләсәк быуынға ышаныс тураһында көслө фекерҙәрен еткерҙе. Уҡыусыларға ла, килгән ҡунаҡтар өсөн дә бик фәһемле бындай әҙәби осрашыуҙар гимназияла артабан да дауам итәсәк.

"Киске Өфө" гәзитенең махсус бите

27

# Шифа

27-5 февраль - март (шаҡай - буранай) 2021 йыл

№9 (947)

КӨНАУАЗ

**Ил буйынса пандемия бәләһе таралғанда профессиональ медицина хеҙмәткәрҙәре менән бер рәттән, медицина уҡыу йорттары студенттары ла көрәш сафына баҫты. Улар төрлө йүнәлештәрҙәге табиптарҙы алмаштырҙы, ауырыуҙарға ярҙам итте, йорттарында ғына ултырған ололарҙың хәлен еңеләйтеү өҫтөндә лә эшләне. Шундай ҡыйыу, илһөйәр, батыр йәштәр менән танышып үтәйек.**

# ИЗГЕЛЕККӘ ҺЫНАУ БУЛДЫ



***Резеда Үлмәҫова, Башҡорт дәүләт медицина университетының 4-се курс студенты, "Беҙҙең хәстәрлек" волонтерҙар штабы акцияһында ҡатнашыусы:*** Илгә ниндәй бәлә килгәндә лә медицина хеҙмәткәрҙәре ситтә ҡала алмай. Һуғыш булһынмы, эпидемиялармы - табиптар халыҡты ҡурсаларға бурыслы, тип иҫәпләйем мин. Шул маҡсаттан мин дә ирекмәндәр штабына яҙылдым. Иртәнсәктән штабҡа бирелгән заявкаларҙы ентекле өйрәнеп сығам, шунан уларҙың адрестарын дөрөҫләйем һәм был адрестар буйынса уңайлы маршруттар төҙөйөм. Төшкә тиклем һәр заявкала һоралған әйберҙе һатып алабыҙ. Төштән һуң инде ирекмәндәр менән был кәрәк-яраҡтарҙы өйҙәр буйлап йөрөп таратып сығабыҙ. Бына шулай бер нисә ай дауам итә инде...

Әлеге ирекмәнлек хәрәкәтендә мине иң һоҡландырғаны кешеләр булды. Нисек кенә ауыр булмаһын,улар һәр ваҡыт асыҡ, ярҙамсыл, изге булып ҡала белделәр. Ирекмәндәр араһында ғаиләләре менән йөрөгәндәр ҙә бар ине. Берәүҙәр дуҫтарын алып килде, икенселәр коллегаларын. Бер ваҡытта ла мәшәҡәт тимәнеләр, адрестары алыҫ йә тапмайбыҙ тип торманылар. Һәр ваҡыт эштәрен еренә еткереп үтәп, килеп хәбәр иттеләр. Ошо пандемия ваҡытында мин кешеләргә ышанырға, бер-береңә ярҙам итә белергә кәрәк икәнде аңланым. Беҙ бергә булғанда ғына көслөбөҙ!

***Виктория Моратова, Республика Клиника-педиатрия үҙәгенең врач-ординатор неонатологы:*** Мин Башҡорт дәүләт медицина университетының 6-сы курс студенты, шул уҡ ваҡытта яңы тыуған сабыйҙар бүлегендә медсестра булып эшләйем. Медицина университеты етәкселеге студенттарын ирекмәндәр хәрәкәттәренә ҡушылырға саҡырғас, беҙ барлыҡ курс менән ҡалҡып сыҡтыҡ һәм баш ҡаланың төрлө бала табыу йорттарына таралып урынлаштыҡ. Пандемияны бөтөн төрлө кимәлдәрендә лә күрергә тура килде. Беҙҙең алда сир йоҡторған кешеләрҙе ваҡытында күреү, таныу һәм изоляциялау бурысы торҙо. Был шулай уҡ яңы тыуған сабыйҙарға ла ҡағыла ине. Бала табыу һәм йәш балаларҙы тотоу бүлектәрендә мөмкин тиклем сирҙе таратмау, бәләкәстәрҙе һаҡлау өсөн тырыштыҡ. Хәҙер ауырыу бер аҙ сигенде, әммә беҙ әле лә һаҡта.

***Айгөл Нуриева, Республика перинаталь үҙәге педиатры, студент-ординатор:*** Пандемия тоҡанып киткәс тә халыҡтың күпселеге уның ни тиклем етди икәнен аңлап етмәне әле. Участка педиатры булып эш башлағас, сит илдәрҙән йәйге ялдан килгән балаларҙы теүәлләргә тура килде. Ата-әсәләр балаларын тикшертеүҙән алып ҡасты, ишектәрен асмай аҙапланы. Улар өсөн баланың ауырып ҡуйыу ихтималы хәүефлерәк булды, ахыры. Тикшереү эштәрен участка полицияһы менән йөрөп атҡарырға ла тура килгән осраҡтар булды. Балалар араһында ауырыу күпкә еңелерәк үтә, әммә сир уларҙа юҡ түгел. Күп балалар ауырығандарын тоймаҫҡа, белмәҫкә лә мөмкин, әммә вирус йөрөтөүсе булып иҫәпләнәләр. Тап ошо ваҡытта ата-әсәләрҙе балаларға иғтибарлы булырға, уларҙың кәйеф үҙгәрешенә, хәленә күҙ һалып торорға кәңәш итәм. Мөмкин тиклем бәләкәстәрҙе лә, мәктәп уҡыусыларын да халыҡ йыйылған урындарға йөрөтмәҫкә һәм дуҫтары менән дә аралашыуҙы сикләргә кәрәк. Былар барыһы ла ваҡытлыса ҡыйынлыҡтар, сабыр булайыҡ, бөтөн һаҡланыу сараларын да үтәйек.

***Ринат Ғафаров, "Тиҙ ярҙам" фельдшеры, Башҡорт дәүләт медицина университетының студент-ординаторы***: "Тиҙ ярҙам" саҡырыуҙары шул тиклем күп, бер осор хатта транспорт, медицина хеҙмәткәрҙәре етешмәне. Башта халыҡ араһында паника булды һәм ниндәй генә симптомдар булғанда ла ярҙам саҡырҙылар. Әлеге ваҡытта был тулҡын үткән, коронавирус сирләләр ҙә өйҙә ҡалдырыуҙы һораған осраҡтар йыш. Яйлап ауырыуҙар тынысланды һәм үҙаллы дауаланыу юлдарын да өйрәнеп алды.

Мин бында эшләй инем инде, пандемия башланғас та хеҙмәтемде дауам иттем. Ҡурҡманым. Бөтөн һаҡланыу сараларын күрҙем һәм әлегә тиклем имен-һау постамын. Беҙҙең хеҙмәттә иң беренсе сиратта тыныслыҡ һәм ышаныслы эш итә белеү кәрәк, тип иҫәпләйем. Ауырыуҙы дауалай башларҙан алда уға психологик ярҙам кәрәк. "Тиҙ ярҙам" медиктары тап шул өлкәлә оҫтара ла инде. Һөйләшеү, аңлатыу, хәлен асыҡлау күптәргә ыңғай тәьҫир яһай. Был сир беҙҙең бөтәбеҙ өсөн дә кешелеклелектә, изгелектә һәм бер-беребеҙҙе ҡәҙерләй белеүҙә ҙур һынау булды.

**Әлиә ИСМӘҒИЛЕВА яҙып алды.**

ҺӘР КЕМ ҠОЛАҒЫНА



# ТАЖЗӘХМӘТ ТУРАҺЫНДА

• **Бөтә донъя һаулыҡ һаҡлау ойошмаһының Рәсәйҙәге вәкиле Мелита Вуйнович коронавирустың өсөнсө тулҡыны башланыуы халыҡтың үҙ-үҙен тотошона бәйле тип белдерҙе.** Пандемияның тамамланыуына килгәндә, бында Мелита Вуйнович фаразлап торманы. Уның һүҙҙәренсә, сирләләр һаны донъяның бөтә төбәктәрендә бер үк ваҡытта эпидемиологик сиктән түбәнерәк кимәлгә тиклем кәмей башлаһа, ә коронавирус менән бәйле йөкләмә һаулыҡ һаҡлау системаһының ғәҙәти эшенә ҡамасауламаһа, ошо хаҡта һөйләргә мөмкин.

• **Яңы коронавирус инфекцияһын тикшереү йүнәлештәренең береһе - ауырыуҙың һәм ҡан төркөмөнөң бәйләнешен эҙләү.** "Ауырығандар араһында иң аҙы - I ҡан төркөмөнә эйә булған кешеләр. Ә бына II, IV ҡан төркөмөнә ҡарағандар йышыраҡ һәм ауырыраҡ сирләй", - тип хәбәр итте Европа Медицина Үҙәгенең дөйөм практика табибы Анна Кулинкович. Беренсе ҡан төркөмөнә ҡараған кешеләрҙә тромбоэмболия һәм йөрәк-ҡан тамырҙары сирҙәре башланыу хәүефе түбәнерәк. IV төркөмгә эйә пациенттарҙа инфекция ҡатмарлыраҡ үтә.

• **Рәсәйҙәрҙең 20-25 процентында яңы коронавирус инфекцияһына антиматдәләр бар.** Был хаҡта Беренсе каналға интервьюһында Роспотребнадзор башлығы Анна Попова хәбәр итте. Ведомство етәксеһе һүҙҙәренсә, COVID-19 менән ауырымаған һәр кемгә вакцина эшләтергә кәрәк. Шуға бәйле, рәсәйҙәр 2021 йылда уҡ йәмәғәт урындарында битлек кейеп йөрөүҙән һәм башҡа шәхси һаҡланыу сараларынан баш тартырға мөмкин, тигән өмөт белдерҙе белгес. Роспотребнадзор башлығы һүҙҙәренсә, коронавирус респиратор вирустар ғаиләһенә ҡарай һәм миҙгелле булырға тейеш.

• **Башҡортостанға COVID-19 менән ауырыған пациенттарҙы бушлай дарыуҙар менән тәьмин итеү өсөн Рәсәй хөкүмәтенең резерв фондынан тағы 66,9 миллион һум бүленде.** Бушлай препараттар амбулатор дауаланған пациенттарға бирелә. Дарыуҙар исемлеге федераль кимәлдә раҫланған. Йыйылмала антибиотиктар, вирусҡа ҡаршы, температураны төшөрә торған һәм башҡа препараттар бар.

• **2021 йылдың яҙына коронавирус менән ауырыу һәм вафат булыу күрһәткестәренең икеләтә кәмеүе ихтимал.** Был хаҡта Иҡтисади тикшереүҙәр үҙәгенең статистика һәм моделләү буйынса эксперты Агаси Тавадян хәбәр итте. "Ләкин артабан тәбиғи яҙғы пик менән бәйле сирҙең йәнә таралыуы мөмкин", - тип өҫтәне эксперт. Тиҙҙән хәлдең ҡапыл яҡшырыуы ихтимал, тип иҫәпләй ул. Вакцинация ковидты бөтөнләй юҡҡа сығарыу һәм яңы тулҡындың башланыуына юл ҡуймау өсөн мотлаҡ, тип иҫәпләй Агаси Тавадян. Эксперттарҙың һығымтаһына ярашлы, республика ауырыу буйынса бер тигеҙ кимәлгә сыҡты.

• **Ярамағанлығын билдәләгән башҡа сәбәп булмаһа, шәкәр диабеты менән ауырығандарға COVID-19 вирусынан прививка яһатырға тәҡдим ителә.** Был хаҡта Рәсәй Һаулыҡ һаҡлау министрлығының эндокринология үҙәге директоры, Рәсәй Фәндәр академияһы мөхбир-ағзаһы Наталья Мокрышева хәбәр итте. Уның әйтеүенсә, 1 һәм 2-се типтағы йәки шәкәр диабетының башҡа төрҙәре менән ауырыусыларға аллергияның ауыр реакцияһы, йоғошло сире, ауырлы булмаһа, хроник ауырыуы киҫкенләшмәһә, бала имеҙмәһә, коронавирустан вакцина эшләтергә кәрәк. Прививка, әлбиттә, дауалаусы врачтың дөйөм тикшереүенән һуң ҡабул ителгән ҡарарына таянып яһалырға тейеш.

✓ ***Башҡа осраҡтарҙа бауырҙы нормаға килтереү өсөн оҙайлы ваҡыт талап ителһә, ковидтан барлыҡҡа килгән эҙемтәләрҙән һуң бауыр, ашҡаҙан аҫты биҙе эшмәкәрлеген тергеҙеү еңелерәк.***

# ҮҘ-ҮҘЕҢДЕ ЫШАНДЫРЫУ

## дарыуҙарҙан һөҙөмтәлерәк

**Инде бер йылдан ашыу тормошобоҙға әллә ҡайҙан ер аяғы, ер башынан килеп ингән тажзәхмәттең әсирлегендә йәшәйбеҙ. Һәр беребеҙ тиерлек өйҙә ҡурсаланыуҙа булды, был күренеш әле лә дауам итә. Аралашыу, күберәген, телефон йәки социаль селтәрҙәр аша ғына бара. Медицина хеҙмәткәрҙәре һәм етәкселек көнө-төнө сир хәүефе тураһында тылҡып ҡына тороуға ҡарамаҫтан, ҡайһы ваҡыт һаҡлыҡ тураһында онотоп ебәрәбеҙ. Мәкерле вирустарға шул ғына кәрәк тә инде - улар шунда уҡ нескә урынды таба һәм һөжүм итә башлай. Сирләүселәр һаны ла, вафат булыусылар һаны ла көндән-көн арта бара. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, ковид тураһында һаман да аныҡ ҡына бер нәмә лә белмәйбеҙ тиергә мөмкин. Эйе, ул үпкәне зарарлай, ә башҡа ағзаларға уның тәьҫире ниндәй? Ауырып һауыҡҡандан һуң уның эҙемтәләре күпме дауам итә, был ваҡытты ҡыҫҡартырға мөмкинме? Бөгөн ошо һорауҙарға яуапты "Йәшел сауҡалыҡ" шифаханаһы поликлиникаһы буйынса директор урынбаҫары, медицина фәндәре кандидаты Альберт ШӘМСЕТДИНОВ менән бергә эҙләйбеҙ.**

**Альберт Рәшит улы, кеше хәлен кеше белмәй, үҙ башына төшмәһә, тигәндәй, сир организмға килеп эләккәс, күберәк зыян эшләргә тырышалыр инде. Шул уҡ ваҡытта көслө антибиотиктар бер ағзаны дауалай, икенсеһен зарарлай, тигәндәй, төрлөсә тәьҫир итә. Ковид, организмға килеп эләккәс, ниндәй мәкерле эштәр башҡара?**

- Сирләп һауыҡҡан категорияны реабилитациялау менән былтыр апрелдән шөғөлләнә башланым. Үкенескә күрә, ошо ваҡыт эсендә нимәгә шаһит булдым: ковид үткәреүселәрҙең барлыҡ эске ағзалары һәм системалары зарарлана. Зыян күрмәгән бер генә ағза ла ҡалмай, тиһәм дә хаталанмам, моғайын. Әлбиттә, беҙ белгәне һәм киң таралғаны - үпкәләрҙең зарарланыуы. Икенсе урынға нервылар системаһын ҡуйыр инем. Бәлки, ауырыуҙы еңел, хатта үҙҙәре лә тоймайынса үткәреп ебәреүселәр ҙә барҙыр, әммә миңә мөрәжәғәт итеүселәрҙең һәр ҡайһыһында тиерлек нервылар системаһының тайпылышын күрәм.

Нервылар системаһына килгәндә, "когнитив етешһеҙлек" тигән матур һүҙ бар. Әммә һүҙе матур булһа ла, уның асылы - хәтер юғалыуы, күптәрҙә транзитор-ишемик һөжүм, йәғни ишемик төр буйынса баш мейеһе ҡан әйләнешенең ваҡытлыса боҙолоуы: аң томаланыу, тәндең ҡайһылыр өлөшөнөң ойоуы, терәк-хәрәкәт ағзалары эшмәкәрлегенең боҙолоуы (аяҡтар тыңламай башлай), ишетеү һәләте насарайыуы, һөйләшеү ауырлашыуы - былар барыһы ла ваҡытлыса ғына күҙәтелә. Халыҡта был торошто инсульт алды торошо тип тә атайҙар, әммә инсультҡа барып етмәй. Шундай ауырыуҙар бик күп. Шулай уҡ инсульт кеүек ауыр өҙләгәүҙәр ҙә бар.

Күптәрҙә депрессия барлыҡҡа килә һәм йөрәк-ҡан тамырҙары зарарлана. Бында миокардитты билдәләп китергә була, аритмия - йөрәк тибешенең йышайыуы - күҙәтелә. Бындай пациенттар бик күп. Шулай уҡ перикардит - йөрәк ҡаҙнаһында шыйыҡлыҡ йыйылыуы - осрай. Бындай пациенттар ҙа йыш мөрәжәғәт итә. Шуға һәр ваҡыт экокардиография - йөрәккә ультратауышлы тикшереү эшләргә тырышабыҙ, һәм унда ковидтан ҡалған миокардит йәки перикардит билдәләрен күрәбеҙ.

Сирҙе үткәргәндәрҙең барыһы ла билдәләгән өҙләгәүҙәрҙең береһе - ашҡаҙан-эсәк тракты эшмәкәрлегенең боҙолоуы. Бында төрлө теория бар: береһе - дарыу препараттары - антибиотиктар һәм башҡа дарыуҙар ҡулланыу эҙемтәһе, улар ашҡаҙан-эсәк трактына кире йоғонто яһай. Икенсе теория: был теорияны сит ил медиктары белдерә - ҡайһы бер осраҡтарҙа вирус ашҡаҙан-эсәк трактына эләгә һәм уны зарарлай. Күптәр был теорияны ҡабул итмәй, әммә ашҡаҙан-эсәк трактындағы тамырҙарҙа тромбтар барлыҡҡа килеүен инҡар итеп булмай.

Кемдәр антибиотиктар ҡабул иткән, уларҙа күңел болғаныуы, эс күбеүе күҙәтелә, былар барыһы ла көслө дисбактериоз менән бәйле. Мин нимәгә иғтибар иттем: коронавирустан антибиотиктар ҡабул итеү һөҙөмтәһендә барлыҡҡа килгән дисбактериоз ни өсөндөр башҡа этиология һөҙөмтәһендә барлыҡҡа килгән дисбактериозға ҡарағанда еңелерәк дауалана. Күрәһең, был хәҙер дауаханаларҙа табиптарҙың барыһына ла дисбактериоз булдырмаусы дарыуҙар биреүенә бәйлелер. Элек быға бик иғтибар биреп бармайҙар ине.



*Әгәр кеше мөкиббән китеп ышана икән, үҙеңде ышандырыу менән хатта сирҙе лә еңергә, ул ғына ла түгел, теләһә ниндәй ауырыу менән бәйләнештә булғанда ла сирләмәҫкә мөмкин. Беҙҙең барлыҡ депрессия, үҙ-үҙеңде ышандырыу иммун системаһына йоғонто яһай. Әгәр кеше, сирләйем, тип үҙенә һеңдермәһә, ул сәләмәт килеш ҡалыуы ла, сир уны урап үтеүе лә ихтимал. Шуға һау-сәләмәт булыуыңа, һиңә бер ниндәй ҙә сир-зәхмәт ҡағылмаясағына ышанырға кәрәк. Юҡҡа ғына медицинаға плацебо термины килеп инмәгән бит. Быны тәжрибә лә раҫлай, йәғни бер төркөмдә дарыу препараты, икенсе төркөмдә ябай һыу менән дауалайҙар һәм һөҙөмтәне сағыштырып ҡарайҙар. Үҙеңдең фекер, һүҙ көсөң көслө икән, ышандырыу ысулы дарыуҙан һөҙөмтәлерәк тә булыуы мөмкин.*

Шулай уҡ күптәрҙә панкреатит күҙәтелә. Был да ашҡаҙан аҫты биҙендә тромбоздар барлыҡҡа килеүе эҙемтәһе һәм дарыуҙар йоғонтоһо. Бауыр тураһында әйтеп торорға ла кәрәкмәйҙер, сөнки барыбыҙ ҙа уның организмды барлыҡ бысраҡтан таҙартҡанын, шул иҫәптән дарыуҙарҙың кире тәьҫирен иң элек үҙенә ҡабул иткәнен беләбеҙ. Ковид менән сирләп һауығыусылар араһында нормаль бауыр булмай, әммә шуныһы ҡыуандыра - бауыр һәм ашҡаҙан аҫты биҙе дауалауға бирелә һәм тиҙерәк нормаға инә. Сағыштырыу өсөн шундай миҫал килтерергә була: башҡа осраҡтарҙа бауырҙы нормаға килтереү өсөн оҙайлы ваҡыт талап ителһә, ковидтан барлыҡҡа килгән эҙемтәләрҙән һуң бауыр, ашҡаҙан аҫты биҙе эшмәкәрлеген тергеҙеү еңелерәк. Әммә, алдан әйтеп китеүемсә, нервы, йөрәк-ҡан тамырҙары, үпкә зарарланыуы бик ауыр һәм оҙайлы дауалау талап итә. Шулай уҡ ковид сире тире ауырыуҙарын, мәҫәлән, сабыртма, барлыҡҡа килтереүе мөмкин, әммә минең тәжрибәмдә был бик һирәк күренеш булды.

**Йәғни ковид үҙенең һөжүмен комплекслы алып бара. Ә бына ошо эҙемтәләрҙе бер юлы реабилитациялау нисек башҡарыла? Бында төп урында "Зыян итмә!" тигән тәғлимәт торорға тейеш, ә ҡайһы бер саҡта, бер урынды йүнәтеп, икенсеһен ҡыйратыу осраҡтары ла юҡ түгел...**

- Әйҙәгеҙ, үпкәләрҙән башлайыҡ, сөнки ковид менән сирләүселәрҙә күберәген үпкәләр зарарланыуы күҙәтелә. Унда үпкә фиброзы, абструктив синдромдың үҫеше, хроник бронхит (бәлки, улар алдан да хроник бронхит менән ауырығандыр, әммә үҙҙәре белмәгәндер, шуға күрә, хроник бронхитты коронавирус эҙемтәһе тип уйламайым - А. Ш.) асыҡлана. Үпкә фиброзы - ул 100 процентҡа ковид эҙемтәһе. Бөгөнгә өс пациенттың таҙа үпкәһендә бронхоэктаз булған фиброз барлыҡҡа килгән. Бронхоэктаз - ул ваҡ ҡына бронхалар урынында муҡсалар барлыҡҡа килә һәм ғүмерлеккә шулай ҡала. Шуға күрә уларҙы, пациенттың хәле тотороҡланғас, операция юлы менән алыу яҡшы. Үкенескә күрә, ошо өс пациенттың бары береһенә генә операция эшләргә мөмкин, сөнки бронхоэктаз бер урында ғына, ә ҡалған икәүҙеке төрлө урындарҙа. Шуға күрә мин бронхоэктаз барлыҡҡа килгән фиброзды иң етди эҙемтә тип һанайым.

Икенсеһе - уҡмашҡан (слипчивый) плеврит. Плевра - ул үпкәнең "күлдәге". Тын алған һайын үпкә күкрәк ситлегенә ҡағыла. Улар бер-береһенә ышҡылмаһын өсөн үпкәнең дә, күкрәк ситлегенең дә үҙҙәренең "күлдәге" бар. Плевра елһенеп, үпкә насар тын алған ваҡытта улар бер-береһенә йәбешә (спайка барлыҡҡа килә). "Слипчивый плеврит" тип ошоно әйтәләр ҙә инде. Ҡайһы берҙә үпкәлә шыйыҡлыҡ йыйылған пациенттар ҙа осрай. Ундайҙар күп түгел. Күпселек осраҡта ҡоро плеврит күҙәтелә һәм барыһы ла сирләгән ваҡытта, унан һуң да күкрәк ауыртыуына зарлана. Ҡайһы берҙә кеше күкрәк ауыртыуын остеохондроз тип уйлай, юҡ, плеврит үҙен шулай һиҙҙертә.

**Һеҙҙең поликлиникала был сир эҙемтәләрен нисек дауалайҙар?**

- Сатурацияны тыныс торошта тикшерәбеҙ. Шәхсән мин сатурацияны алты минут прогулкала йөрөгөндән һуң билдәләргә ятатам. Күптәренең шундай прогулканан һуң сатурацияһы түбән була, улар менән инструктор шөғөлләнә, тын алыу гимнастикаһы эшләтә. Әгәр кемдеңдер прогулканан һуң сатурацияһы, киреһенсә, юғары булһа, тимәк уларға күберәк саф һауала йөрөргә һәм дауалау физкультураһы кәрәк. Йәғни дауа һәр пациентҡа шәхсән һайлана. Шулай уҡ тренажер залына йөрөргә лә, бассейнда йөҙөргә лә мөмкин. Әммә сатурация түбән булғанда физик көсөргәнеш әҙерәк булырға тейеш. Минең талап: алты минутлыҡ прогулканан һуң сатурация түбән булғанда сауна ла, бассейн да, физик көсөргәнеш тә ярамай.

Стандарт дауалауға массаж инә, сөнки ул ҡан әйләнешен яҡшырта, ойошҡан урындарҙы йомшарта. Шулай уҡ батҡаҡ менән дауалау ҙа ойошҡан

# ЫСУЛЫ...

## булырға мөмкин

тәнде яҙырға ярҙам итә. Батҡаҡ менән үпкә ауырыуҙарын дауалауҙы хатта уҙған быуаттың 70-се йылдарында уҡ ҡулланалар, сөнки улар үпкә фиброзын бәләкәй ваҡытында һурып ала. Шулай уҡ күкрәк ситлегенә электробатҡаҡ, физиотерапия процедураларының төрлө ысулдарын аралаштырып ҡулланабыҙ. Йәғни пациент килеү менән - бер, 3-4 сәғәттән һуң икенсе физиопроцедура ала.

Беҙгә мөрәжәғәт итеүселәрҙең барыһының да иммунитеты көсһеҙләнгән. Постковид реабилитацияһы ваҡытында иммунитетты көсәйтеү, ҡанды шыйыҡлатыу, уның микроциркуляцияһын яҡшыртыу өсөн иң элек озон терапияһы ҡулланабыҙ, венаны лазер менән дауалайбыҙ. Ашҡаҙан-эсәк тракты зарарланғанда, дисбактериоз асыҡланғанда озон терапияһы тура эсәк аша башҡарыла, ул вена аша эшләнгән йоғонтоға эйә. Бер ыңғай ике ҡуяндың ҡойроғон тотабыҙ: иммунитетты ла күтәрәбеҙ, дисбактериозды ла дауалайбыҙ, асыҡ сей яраларҙың бөтәшеүенә лә булышлыҡ итәбеҙ.

**Озон терапияһы, лазер терапияһы... Медиктар өсөн ул ябай термин, ә бына гәзит уҡыусыларға ябай телдә нисек аңлатырға?**

- Физраствор озон тәьҫире аҫтында тотола һәм һуңынан укол итеп ҡаҙала. Ректаль юл менән эшләгәндә иһә тәүҙә клизма ҡуйылып, эсәктәр таҙартыла, һуңынан озон газы ебәрелә. Әлбиттә, күптәр ректаль ысулды бик өнәмәй, әммә ашҡаҙан-эсәк трактын дауалау өсөн ул һөҙөмтәле ысулдарҙың береһе. Тағы бер мәлгә иғтибар итергә кәрәк: бауыр зарарланғанда озонды эсәк аша индерһәк, ул бауырға ла ыңғай йоғонто яһай, йәғни уның тәьҫире вена аша индереүгә ҡарағанда һөҙөмтәлерәк. Өсөнсө вариантта озон терапияһын үпкәлә фиброзға шик булғанда, йәғни барлыҡҡа килгән усаҡтарҙы таратыу өсөн ҡулланабыҙ: венанан 12 миллилитр ҡан алып, ул озонлаштырыла һәм мускулға (внутримышечно) ҡаҙала, һөҙөмтәлә организмда актив матдәләр барлыҡҡа килә һәм улар организмдағы теләһә ниндәй фиброзды тарата. Әлбиттә, венаға эшләнгән лазер көслөрәк йоғонто яһай, шуға күрә, пациенттың веналары яҡшы икән, мотлаҡ веналарға яһарға кәрәк. Әгәр веналар насар булғанда, вена тамыры өҫтөнә эшләнә. Был ысул да иммун, нервылар системаһын нығыта, ҡан әйләнешен яҡшырта, йәғни ҡанды шыйыҡландыра.

Тағы бер ысул ҡулланабыҙ: күкерт-водород ваннаһы. Ванна ҡабул иткәндән һуң барыһының да тәндәре ҡып-ҡыҙыл була. Был ҡыҙыллыҡ көкөрт-водородтың тәьҫире менән аңлатыла, тәндә ҡыҙыллыҡ ни тиклем көслөрәк, организмдың эске ағзалары туҡымаларында ла шундай уҡ үҙгәрештәр бара, сөнки кеше ҡабул иткән көкөрт (сера) тире аша инеп ҡанға эләгә. Әлбиттә, сероводород ваннаһынан һуң пациенттарҙан икенсе көнөнә лә көкөрт еҫе килә, тимәк, ҡан әйләнешендә көкөрт һаман да бар, тимәк, барлыҡ ағзаларҙа һәм туҡымаларҙа ҡан әйләнеше яҡшыра. Беҙ тап шифахана территорияһында урынлашҡан тәбиғи сығанаҡтан көслө концентрациялы көкөрт-водород ҡулланабыҙ.

Артабан - ҡоро углекислый ванналар. Уларҙы ҙур дозала бирергә кәрәк, әммә технологияларҙың боҙолмауын, пациенттың ҡоро пар менән ағыуланмауын күҙәтеп торорға кәрәк. Унда туғыҙ режим бар һәм мин пациенттарыма туғыҙынсы режимды тәғәйенләйем, сөнки был осраҡта организмда шунда уҡ ҡандың сатурацияһы, йәғни ағзаларҙың ҡан менән тәьмин ителеү күләме арта.

Шулай уҡ барокамера менән дауалау тәғәйенләнә, йәғни юғары баҫымлы кислород бирелә. Хәҙер инде коронавирус инфекцияһын дауалағанда организмды кислород менән тәьмин итеү төп маҡсат булып тора. Сатурация түбән тиҙәр икән - тимәк, туҡымаларҙағы кислород кимәле түбән.

Дауалауҙа бына ошо ысулдарҙы бигерәк тә йыш ҡулланабыҙ, дөрөҫөрәге, ошо процедуралар комплексын тәҡдим итәбеҙ.

**Аңлауымса, был процедуралар барыһы ла түләүле. Әлбиттә, кемдең мөмкинлеге бар - улар был процедураларҙы ала, ә мөмкинлеге булмағандар, ауыл халҡы... Тажзәхмәт бит уларҙы ла урап үтмәй. Ауылдарҙа ла сир кешеләрҙең үпкәһен 80 процентҡа тиклем зарарлай. Бәлки, ниндәйҙер ташламалар барҙыр?**

- Беҙ шифахана булғас, эйе, барлыҡ процедуралар ҙа түләүле. Коронавирус сирен үткәреүселәр өсөн ниндәйҙер ташламалар, программалар юҡ. Әлбиттә, Башҡортостан Хөкүмәтенең һөнәри бурысын үтәгәндә тажзәхмәт йоҡтороп сирләгән хеҙмәткәрҙәрҙе шифаханаларға реабилитацияға ебәреү тураһындағы ҡарары бар. Улар - медицина хеҙмәткәрҙәре, социаль хеҙмәткәрҙәр, карантин иғлан ителгән социаль учреждениелар хеҙмәткәрҙәре (балалар йорттары, интернаттар, ҡарттар йорттары һ.б.), уҡытыусылар (әгәр белем усаҡтарында карантин иғлан ителһә), полиция хеҙмәткәрҙәре, ирекмәндәр. Уларға сертификаттар бирелә һәм шуның буйынса бушлай реабилитация курсы үтәләр.

**Әңгәмә башында уҡ коронавирус менән сирләүселәрҙә неврылар системаһының ҡаҡшауы, депрессия барлыҡҡа килеүе тураһында әйтеп киттегеҙ. Реабилитация үтеүселәр өсөн психотерапевт хеҙмәте ҡараламы? Ғөмүмән, ундай ярҙам кәрәкме?**

- Мейенең ҡан әйләнешен яҡшыртыусы, нервылар системаһын нығытыусы процедуралар тураһында әйтеп торманым, улар дөйөм комплексҡа инә. Ғөмүмән алғанда, пациенттарҙың барыһына ла психотерапевт ярҙамы тәҡдим ителә. Был йәһәттән проблема юҡ, әммә пациенттар күпселек осраҡта психотерапевҡа йөрөргә яратмай. Тәжрибә күрһәтеүенсә, психика, нервылар системаһы яғынан барлыҡ үҙгәрештәр дөйөм дауалау фонында үҙ аллы үтә. Постковид реабилитацияһы үтеүселәрҙә был тайпылыштар тиҙ - 10-20 көн эсендә нормаға инә. Миңә реабилитацияға килеүселәрҙән ни бары ике кеше генә психотерапевт хеҙмәтенә мөрәжәғәт итте.

**Күптәр медикаменттарға ҡарағанда халыҡ дауаһына өҫтөнлөк бирә. Һеҙҙең халыҡ медицинаһына ҡарашығыҙ?**

- Бик ыңғай ҡарайым. ОРЗ, ОРВИ, киҙеүҙе профилактикалауға, уны булдырмауға, сирләгәндән һуң организмды тергеҙеүгә йүнәлтелгән барлыҡ ысулдар һәм мөмкинлектәр коронавирусты профилактикалауға ла ярай. Бары тик шуны аңларға кәрәк: тажзәхмәт ауырыраҡ үтә, ул башҡа респиратор сирҙәренә ҡарағанда күпкә мәкерлерәк, шуға бары тик халыҡ медицинаһы менән генә ҡотолоп та булмауын оноторға ярамай. Шул уҡ ваҡытта профилактиканы алдан башлағанда һәм даими ҡулланғанда тажзәхмәтте еңел үткәрергә мөмкин. Шуға мин лимон, имбер, ҡымыҙ, әрем ҡулланыуға ҡаршы түгел, әммә рәсми медицинаны ла инҡар итергә кәрәкмәй. Халыҡ медицинаһы - ул профилактика өсөн яҡшы.

**Шулай уҡ кеше үҙендә булған эске механизмды, эске ҡеүәтте лә ҡуллана ала бит, мәҫәлән, үҙеңде ышандырыу (самовнушение). Бөгөн уй, фекер шул тиклем ҙур көскә эйә, әммә сир алдында был мөмкинлек бөтөнләй онотола ла ҡуя...**

- Әгәр кеше мөкиббән китеп ышана икән, үҙеңде ышандырыу менән хатта сирҙе лә еңергә, ул ғына ла түгел, теләһә ниндәй ауырыу менән бәйләнештә булғанда ла сирләмәҫкә мөмкин. Беҙҙең барлыҡ депрессия, үҙ-үҙеңде ышандырыу иммун системаһына йоғонто яһай. Әгәр кеше, сирләйем, тип үҙенә һеңдермәһә, ул сәләмәт килеш ҡалыуы ла, сир уны урап үтеүе лә ихтимал. Шуға һау-сәләмәт булыуыңа, һиңә бер ниндәй ҙә сирзәхмәт ҡағылмаясағына ышанырға кәрәк. Юҡҡа ғына медицинаға плацебо термины килеп инмәгән бит. Быны тәжрибә лә раҫлай, йәғни бер төркөмдә дарыу препараты, икенсе төркөмдә ябай һыу менән дауалайҙар һәм һөҙөмтәне сағыштырып ҡарайҙар. Үҙеңдең фекер, һүҙ көсөң көслө икән, ышандырыу ысулы дарыуҙан һөҙөмтәлерәк тә булыуы мөмкин.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**
**Йәш, һау-сәләмәт ваҡытта организмды файҙалы матдәләр менән туҡландырып тороу, уға ныҡ, көслө булырға ярҙам итеү тураһында уйлап та ҡарамайбыҙ, сир "әсирлегенә" эләккәс, ниндәй мөмкинлек бар - барыһын да ҡулланырға тырышабыҙ, әммә үҙенә уңайлы урын тапҡан вирустар һәм бактериялар ғына беҙҙең организмды тиҙ генә ташлап киткеһе килмәй интектерә. Сир ботлап инһә лә, мыҫҡаллап сыға, тип юҡҡа ғына әйтмәйҙәр инде. Һәр хәлдә, уның сыҡҡан ваҡытын оҙаҡҡа һуҙмаҫҡа, организмыбыҙға мәлендә ярҙам итергә өлгөрһәк ине.**

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ әңгәмәләште.**

РӘХМӘТҺҮҘЕ



# ХӘЛДӘРЕНӘ ИНӘЙЕК...

**Мин бөгөн гәзит уҡыусыларҙы Республика йоғошло ауырыуҙар клиник дауаханаһының 8-се бүлеге мөдире, юғары категориялы табип, һаулыҡ һаҡлау отличнигы Фәғилә Ҡотлоғужина менән таныштырып үтмәксе булдым. Бер юлы уға оло рәхмәтемде лә еткермәксемен.**

Фәғилә Ғаяз ҡыҙы 23 йыл ошо дауаханала инфекционист булып эшләй, күпме ауырыуҙарҙы терелтеп, аяҡҡа баҫтырған ул. Үҙ эшен генә түгел, һәр бер ауырыуҙы яратырға ла етә уның күңел йомартлығы. Бүлек мөдире вазифаһындағы табип ауырыуҙарҙы дауалау менән генә сикләнмәй бит әле, ул бүлектәге һәр бер хеҙмәткәр, һәр бер ауырыу өсөн яуаплы, бүлектең хужалыҡ эштәре лә уның өҫтөндә. Барыһын да күңел төшөнкөлөгөнән аралар өсөн психолог та булырға тура килә Фәғилә Ғаяз ҡыҙына. Уколдар, дарыуҙар менән генә түгел, яғымлы ҡараш, йылы һүҙ менән дә дауалай ул ауырыуҙарҙы.

Коронавирус афәтенә ҡаршы көрәшкә иң тәүҙә инфекционист табиптар ҡушылды, тип беләбеҙ. Ысынлап та, 2020 йылдың февраль айынан алып быға са күберәк сысҡан биҙгәге, талпан энцефалиты менән ауырыусыларҙы дауалаған бүлек тулыһынса ковид вируслы пациенттарҙы ҡабул итеүгә күсә. Хәтерегеҙҙәлер, үткән йәй үтә лә эҫе булды. Тәүлек әйләнәһенә махсус костюмдарҙа йөрөгән табиптарға ла, шәфҡәт туташтары һәм санитаркаларға ла мунсалағы һымаҡ пар эсендә эшләргә тура килде. Ләкин уларҙың үҙҙәрен ҡайғыртырға ваҡыттары ла, сараһы ла юҡ ине. Нәҡ тә фронттағыса фиҙаҡәрлек талап ителде уларҙан, һәм улар ошо һынауҙы лайыҡлы үтте. Табиптарҙың был фиҙаҡәрлеген киләсәк баһалар, тип ышанайыҡ.

Фәғилә Ғаяз ҡыҙы тураһындағы һүҙҙе дауам итеп, уның күренекле табип булыуҙан тыш, ғаиләһендә уңған хужабикә, иғтибарлы, һөйөклө ҡатын, өс ҡыҙына әсә икәнен дә әйтеп үтәйем. "Ҡайҙан көс табаһың барыһына ла өлгөрөргә?" - тип һорағас, ул миңә: "Башҡортостаным тәбиғәтенән көс алам. Йәйы сыҡҡан һайын тауҙарға китәм. Тауға менгәндә физик яҡтан үҙемде тағы бер һынайым, ә тау башына менгәс тойған ирекле хисен бер нимә менән дә сағыштырып булмай. Шулай ял итеп ҡайтам да тағы эшкә сумам", - тип яуапланы...

Эйе, бөгөн бик хәүефле осор. Көнө-төнө телевизор, радио, гәзиттәр аша коронавирус тураһында һөйләйҙәр, ҡурҡыталар, күңелгә шөбһә һалалар. Халыҡ ауырыуҙан түгел , ә унан ҡурҡып, бына-бына сирҙе йоҡтороуҙан шөрләп арыны. Ә беҙҙең сәләмәтлек һағында торған медицина хеҙмәткәрҙәренең хәлен иһә улар үҙҙәре генә белә. Беҙ ҙә инәйек улар хәленә, беҙ ҙә уларҙан йылы һүҙебеҙҙе йәлләмәйек, тип кенә әйтмәксе булғайным.

**Светлана ШӘРИПОВА.**

ТӨРЛӨҺӨНӘН

## НИҢӘ КИТӘЛӘР?



**2020 йылда Башҡортостан дауаханаларынан һәм поликлиникаларынан 2,5 меңдән ашыу медицина хеҙмәткәре эштән киткән.**

Был хаҡта республиканың Хөкүмәт ултырышында БР һаулыҡ һаҡлау министры Максим Забелин хәбәр итте. 2020 йылдың 31 декабренә республиканың медицина ойошмаларында 50,2 мең хеҙмәткәр эшләгән, шуның 14350-һе врач, 35886-һы урта медицина хеҙмәткәре. Былтыр һаулыҡ һаҡлау системаһына 2705 белгес ҡабул ителгән, 2504 врач эштән киткән. Төбәктә бер үк ваҡытта бер нисә, шул иҫәптән белгестәрҙе дәртләндереүгә йүнәлтелгән программалар бойомға ашырыла. Мәҫәлән, 2021 йылда дефицит тип иҫәпләнгән һөнәр эйәләре 1 миллион һум күләмендә бер тапҡыр бирелгән компенсация түләүен аласаҡ. Әлеге ваҡытта түләү алыуға хоҡуҡлы дефицит тип иҫәпләнгән һөнәрҙәрҙең яңы исемлеге раҫлана. Шулай уҡ 2012 йылдан 50 меңгә тиклем кеше йәшәгән ауыл еренә йәки эшсе ҡасабаһына, ҡала тибындағы ҡасабаға эшкә килгән юғары белемле медицина хеҙмәткәрҙәренә бер тапҡыр 1 миллион һумлыҡ компенсация түләнә. 2021 йылда бындай түләүҙе 150 врач аласаҡ. Бынан тыш, БР Хөкүмәтендә бер тапҡыр компенсация түләүе бирелгән медицина хеҙмәткәрҙәренең йәшенә ҡағылышлы ҡарарға үҙгәрештәр индереләсәк. Быға тиклем был түләүҙе алыуҙың бер шарты 50 йәшкә тиклем ине. 2021 йылда 38 фельдшерға түләү планлаштырылған. Шулай уҡ "Ауыл докторы" программаһы сиктәрендә 2021 йылда төпкөлдә урынлашҡан ауыл еренә, эшсе ҡасабаһына, ҡала тибындағы ҡасабаға эшкә килгән 83 врач 1,5 миллион һум һәм 10 фельдшер 750 мең һум аласаҡ. Ошондай уҡ шарттарҙа эшләргә килгән 10 врачҡа 1 миллион һум, 2 фельдшерға 500 мең һум түләйәсәктәр. Республиканың медицина хеҙмәткәрҙәренең торлаҡ шарттарын яҡшыртыуҙа ла ярҙам күрһәтеләсәк.

## ТИКШЕРЕЛЕП ТОР!



**15 февралдән Башҡортостанда халыҡты диспансерлаштырыу башланды. Мәғлүм булыуынса, коронавирус пандемияһына бәйле, ул былтыр туктап ҡалғайны.**

Быйыл республикала был һаулыҡ һаҡлау сараһына яҡынса 939058 кешене йәлеп итеү планлаштырыла. Унда район-ҡалаларҙан бөтәһе 85 медицина ойошмаһы ҡатнашасаҡ. БР Һаулыҡ һаҡлау министрлығының медицина профилактикаһы буйынса баш штаттан тыш белгесе Сара Әхтәмова: "Медицина тикшереүе беҙгә юғары артериаль баҫым, ҡандағы холестерин һәм глюкоза кимәле, тәмәке тартыу, алкоголь, наркотик, психотроп матдә ҡулланыу, дөрөҫ туҡланмау, артыҡ ауырлыҡ, аҙ хәрәкәтсәнлек кеүек төп хәүеф факторҙарын билдәләргә булышлыҡ итә", - тип билдәләй. Ул шулай уҡ диспансерлаштырыуға кешенең буйы, ауырлығы, артериаль баҫымы, ҡандағы дөйөм холестерины һәм глюкоза кимәлен үлсәү ингәнлеген иҫкә төшөрҙө. Шулай уҡ ике йылға бер тапҡыр флюорография, 35 йәштән - ЭКГ, 40 йәштән - ҡандың дөйөм анализы, күҙ баҫымы үлсәнә. 40-тан 75 йәшкә тиклемге ҡатын-ҡыҙҙар ике йылға бер тапҡыр маммография үтә. 40-тан 64 йәшкә тиклемгеләр тиҙәктә ҡан булыуына тикшерелә. Ир-егеттәргә, ҡатын-ҡыҙҙарға йәшенә ҡарап башҡа төрлө анализдар биреү ҡаралған. Диспансеризация өс йылға бер тапҡыр үткәрелә. Быйыл уны 2003, 2000, 1997, 1994, 1991, 1988, 1985, 1982, 1979 йылдарҙа тыуғандар үтә. 40 йәштән уҙғандар, инвалидтар, Бөйөк Ватан һуғышы ветерандары, блокадала ҡатнашыусылар йыл һайын тикшерелә ала. Һаулыҡ һаҡлау өлкәһендәге законға ярашлы, хеҙмәткәрҙәр диспансерлаштырыу үткәндә өс йылға бер тапҡыр бер эш көнөнән азат ителә. Эш урыны һәм уртаса хеҙмәт хаҡы һаҡлана.

ХАЛЫҠ ДАУАҺЫ

# ТАШТАР СЕРЕН АСАҺЫ БАР...

**"Киске Өфө" гәзитендә "Кешелектең иң боронғо юлдашы ул таштар" тигән яҙманы уҡығас, шул турала белгәндәремде яҙырға булдым әле. Беҙ, тәбиғәт йәнле ағинәйҙәр булараҡ, йыш ҡына тау-таштар араһын гиҙәбеҙ, өйрәнәбеҙ, күҙәтеүҙәр алып барабыҙ. Беҙҙең ауыл янында ла шундай мөғжизәле Ташморон тип аталған ҡая бар. Уның хаҡында "Киске Өфө"гә 2017 йылда яҙғайным. Ошо дүрт йыл эсендә байтаҡ яңы мәғлүмәттәр тупланыҡ. Ул айырым һөйләшеү темаһы, әлбиттә. Ә хәҙер мин таштарға бәйле ҡайһы бер хәлдәрҙе генә телгә алып үтәйем, тинем.**



### Күҙҙәрҙе ял иттерәм...

Бер ваҡыт Әлмирә исемле әхирәтем "Һиңә кәрәк буласаҡ", тип, ҡулыма бер йоморо ҡара таш тотторғайны. Был хәл бынан ун биш йылдар самаһы элек булды. Был хәлдең хәтеремдә уйылып ҡалыу сәбәбе лә бар: шул йылда хаҡлы ялға сығып, компьютерҙа эшләргә өйрәнә генә башлағайным. Тегеләй бәләкәй генә ҡуш йоморҡаһына оҡшаған оҙонса ҡара ташты ҡарайым да кире һалып ҡуям. Ташларға ҡыймайым, "Һиңә кәрәк буласаҡ", тигәнде иҫтән сығармайым. Йәнә осрашырға яҙғанда: "Уны ҡайҙан алдың?" - тип һораным. Күпме генә тырышмаһын, ташты ҡайҙан алғанын хәтеренә төшөрә алманы әхирәтем. "Миңә мәғлүмәт килә һәм тиҙ генә юғала", - тине. Бер мәл минән бөрәү: "Компьютерҙа ултырғандан һуң күҙҙәреңдең арығанын нисек бөтәрәһең?" - тип һораны. "Ә һин нисек бөтөрәһең?" - тип, һорауға һорау менән яуап бирәм. "Яҙынып бөткәс, сей бәрәңгене ҡырып, шуны күҙ ҡабағымдың өҫтөнә һалам", - тип аптыратмаҡсы был. "Ундай алымдарым байтаҡ ул минең. Компьютерҙы салауат әйтеп асам һәм ябамын. Кискеһен эш бөткәс, ҡалаҡҡа һыу һалам (шишмә һыуы яҡшыраҡ). Шул һыу өҫтөнә Фәтихә, Ихлас сүрәләрен уҡыйым. Эйелеп, күҙҙәремде алмаш-тилмәш шунда тотам. Күҙҙең аҫҡы моҡсайына эләккән ҡыл һ.б. шуның кеүек сүп-сар һыуға сыға. Имеҙгән әсә күҙҙәренә имсәк һөтө һала ала, һыйыр һөтөн дә күҙгә һалғаным булды..." - тип тезеп китәм. "Улай икән..." - ти танышым, уйланып. Шул саҡ теге үҙемдә оҙаҡ йылдар эшһеҙ ятҡан таш иҫемә килеп төштө. Һәм кисен, йоҡларға ятыр алдынан, уны күҙ ҡабағым өҫтөндә алмаш-тилмәш тота башланым. Шул ваҡыттан алып уны "күҙташ" тип атаным. Ысынлап та, күҙҙәргә ял биреүе һиҙелде... Таштарҙың шифаһы хаҡында күберәк белергә теләп, мин биология-химия уҡытыусыһы Ишморатова Лариса Ғирфан ҡыҙына мөрәжәғәт иткәйнем. Ул бына ниндәй мәғлүмәт бирҙе: баҡтиһәң, кеше организмы өсөн файҙаһы буйынса кислородтан ҡала икенсе урында кремний (силициум) тора. Кремний етешмәһә, бихисап сирҙәр арта: күҙҙәр ауырта, тырнаҡтар һына, сәстәр ҡойола, һәм башҡалар. Лариса Ғирфан ҡыҙы миндәге ташты ҡараны ла, унда балсыҡ менән кремний ҡатнашмаһы кремнезем барлығы тураһында әйтте. Ундай ҡатнашмалар аҡ, күк балсыҡ, шифалы ләмдә, диңгеҙ һыуҙарында, минераль һыуҙарҙа, балсыҡташтарҙа, картуф ҡабығында, әрем, меңъяпраҡ үләндәрендә барлығын да белдем. Организмда кремний етешле миҡдарҙа булмаһа, күпме генә аҡбур ҡулланма, барыбер кальций үҙләштерелмәй икән. Был бигерәк тә өйкәлә ҡатындарға ҡағыла. Шул сәбәпле ауырлы әсәләр аҡбур көсәй. Ҡайһы берәүҙәрҙең аҡ балсыҡ ашауҙарының сәбәбе хәҙер аңлашыла. Йәш баланың һөйәгендә лә кремний бар икән.

### Тағы бер ҡара таш...

Бер мәл аят табыны тамамланғас, ағинәйҙәр менән әлеге таш тураһында һүҙ сыҡты. Миндәге кеүек ҡара таш Гүзәл тигән ҡатында ла булған икән. Уны әле йәшәгән йортоноң бәрәнге баҡсаһынан табып алған. Килтереп күрһәтте был. Ҡулдан-ҡулға йөрөтөп ҡараныҡ. Күңелдә тик бер һорау тора: кем һәм уны ни өсөн файҙаланған? Ололарҙан һораштыра торғас, бына ниҙәр асыҡланды: әлеге Ҡәйүмова Гүзәл йәшәгән йорт урынында бынан ярты быуат элек Ҡобара (мәғәнәһе аура була икән) әбейе менән Иғытулла бабай йәшәгән. Бабай дегет ҡайнатып һатыусы, әбейе таштар ярҙамында сирлеләрҙе имләүсе булараҡ халыҡ хәтерендә ҡалған. Үҙҙәре вафат булғас, әлеге таш унда-бында ҡағылып йөрөгәндән аҙаҡ, баҡсала урынын таба. Гүзәл шуны табып ала һәм өйөнә алып ҡайтып, ауҡам урынға һалып ҡуя. Беҙҙең ауылдағы музейға экскурсияға бер ханым килгәйне. Музейҙа ла һаҡлана бер йомро таш. Әлеге ханым уны ҡулында тотоп ҡараны ла: "Был таш каруан менән килгән. Ауылда уның йәнә ике ише бар икән", - тип аптырауға ҡалдырмаһынмы (миндәге һәм Гүзәлдәге ул таштарҙы ҡайҙан, нисек белде икән, тип һаман аптырайым). Уның һүҙҙәрен раҫлауҙан башҡа бүтән сара тапманым...

### Йәй ташы

Минең архивта 1996 йылдағы "Башҡортостан" гәзите һаҡлана. Унда Фәсхетдин Ишбулдин тигән авторҙың таштар коллекцияһы тураһындағы яҙмаһы баҫылған. Ейәнсурала тыуып үҫкән был ир Ырымбур өлкәһенең Бөкәтәр ауылы тауҙарынан йыйған таштарын бер сумаҙанға тултырып, редакцияға килә. Уның таштар коллекцияһында хатта аҫҡы яғы йомро, өҫкө яғында йөрәктә хәтерләткән таплы Йәй ташы ла булған. Мине бигерәк тә уның ҡулланылышы ҡыҙыҡһындырҙы. Шул юлдарҙы ҡабат-ҡабат уҡыным... Борон ямғырҙар оҙон-оҙаҡ яуып йонсотһа, йә иһә, ҡоролоҡ көсәйһә, үҫәргән ырыуы халҡы иң бейек тауға күтәрелгән. Усаҡ яҡҡандар. Һыу тулы таш ҡаҙанға Йәй ташын һалғандар: уның яҫы яғы ҡаҙан төбөнә, ә йөрәк яғы өҫкө ҡарап ятырға тейеш икән. Усаҡҡа утын өҫтәп торған ыңғайы Аллаһы Тәғәләнән ямғырҙы туҡтатыуын һорағандар. Һәм күҙ алдында ҡуйы болоттар таралышҡан. Көн аяҙыған. Был йолаға бар ауыл халҡы шаһит булған. Беҙҙең музейҙағы әлеге йомро таштың да өҫкө яғында йөрәккә оҡшаш нәмә бар. Кем белә, бәлки ул да Йәй ташылыр? Нисек кенә булмаһын, беҙ таштарҙың серен белеп бөтөрмәйбеҙ шул. Ул серҙәрҙе ата-бабалар белгән, таштар менән дауалау башҡорт халыҡ медицинаһында төп урындарҙың береһен алып торған. Тик ул белемде беҙ юғалтҡанбыҙ, ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы.

**Әйткәндәй, "Киске Өфө" гәзитендә лә (9-сы һан, 2018 йыл) Йәй ташы тураһында этнограф Әминев Закирйән бик ҡыҙыҡлы мәҡәлә менән сығыш яһағайны. Төрөк теленән башҡорт теленә тәржемә ителеп, 1998 йылда Башҡортостан "Китап" нәшриәте тарафынан "Шаманизм тарихта һәм бөгөн" тигән китап баҫтырып сығарыла. Уның 14-се бүлеге "Яҙа (йәй ташы) һәм ямғыр тылсымдары" тип атала. Зәкирйән Әминев үҙенең ошо йоланы нисек атҡарғандарын күргәненә ниғеҙләнеп, "Ямғыр саҡырыу" йолаһының беҙҙең замандарға бер ниндәй үҙгәрешһеҙ килеп еткәнен һыҙыҡ өҫтөнә ала. Был мәҡәләнең дауамы бигерәк ҡыҙыҡлы ине. Йәй ташының ҡулланылышы тураһында автор мажаралы формала бәйән иткәйне. Шул һанды табып уҡырға кәңәш итәм ҡыҙыҡһыныусыларға. Ғөмүмән, өйрәтәһе ололар барҙа башҡорт халыҡ дауалау алымдарын берәмтекләп йыйһаҡ ине, тигән теләктә ҡалам.**

**Зөбәйҙә ҠӘЛӘМОВА,**
**Учалы районы Сораман ауылы ағинәйе.**

КЕМ БАЛАҺЫ, ТИЕП...

**Баланан шәхес тәрбиәләүҙә ата-әсәнең роле ҙур. Ояһында ни, осҡанында шул, ти бит халыҡ әйтеме лә. Һәм борондан да баланың ат-затын белеү өсөн "Кем балаһы?" тигән һорау биргәндәр. Был һүҙҙәр һорау булып та, хуплау булып та, әсенеп әйтеүгә лә әйләнә ала. Бөгөнгө йәмғиәт бына ошо хәҡиҡәттә яҡшыраҡ төшөнә, аңлай барған кеүек. Беҙҙең быуында, мәҫәлән, ғаиләлә балаларға икенсе төрлөрәк ҡараш булһа, хәҙерге йәш ғаиләләрҙә киләсәк быуынды тәрбиәләүгә ҙур иғтибар бүленә.**

**"Кем балаһы?" тигән һорауҙы, моғайын, башҡорт киноһы йондоҙсоғо, "Һеңлекәш" фильмында төп ролдә башҡарыусы Арыҫлан Ҡырымсуринға ҡарата ла бирәләрҙер. Һәм бына, беҙ уның кем балаһы булыуын асыҡлау өсөн атаһы Вәгиз ҠЫРЫМСУРИН менән һөйләштек.**

# ӘРТИСЛӘНЕРГӘ ЯРАТЫУЫН...

## бер ҙә тыйып ҡуйманыҡ



**➔ Вәгиз , шундай шәп малай үҫтереүсе ата-әсә, йәғни үҙегеҙ хаҡында мәғлүмәт бирһәгеҙ ине?**

- Мин Мәләүез районынан, ҡатыным Мәләүез ҡалаһынан. Үҙем Республика халыҡ ижады үҙәгендә администратор, ҡатыным әлегә декрет отпускыһында. Ғаиләбеҙҙә ике бала, Арыҫлан өлкәне. Ҡыҫҡаһы, беҙ ғәҙәти ябай ғаилә. Балаларҙы ла бер ниндәй айырым методика буйынса тәрбиәләмәйбеҙ, борон-борондан килгән бер алым - яратыу. Башҡорт халҡында бит баланы яратыу, балаға аяулы булыу тигән яҙылмаған ҡанун бар. Рус сәйәхәтселәре яҙмаларында ла "Башҡорт ғаиләләрендә балаларҙы иркәләп-һөйөп үҫтерәләр, уларҙы һуҡмайҙар, хәлдәренән килмәҫтәй эш ҡушмайҙар, аяйҙар, тәрбиәләйҙәр", тигән юлдар бар. Ошо хәҡиҡәткә тура килә беҙҙең бөгөнгө йәшәйешебеҙ ҙә.

**➔ Арыҫландың әртис булып китеүе нимәнән башланды?**

- Дүрт йәшендә әсәһе уның менән "Тамыр"ға барып, һынау тотоп ҡарағайны. Һынауҙы уңышлы үтеп, "Сәңгелдәк"те алып барҙы. Берҙән-бер көндә әлеге "Һеңлекәш" фильмына биш йәштән һигеҙгә тиклемге малайҙар эҙләйҙәр, тигән иғлан күреп ҡалғандар ҙа, бөхетте һынап ҡарайыҡ әле тип, видеороликтар ебәрҙек. Ләм-мим, тауыш-тын булманы. Инде онотоп бара инек, өс ай тирәһенәндер, шылтыратып, икенсе турға саҡырҙылар. Быныһында балаларҙы төрлө яҡлап ҡуйылған камералар аҫтында һөйләштереп ҡаранылар. Унан өсөнсө турға режиссер Александр Галибин килде, Марта ла бар ине. Фильмдағы "ата-әсәһе" һәм башҡа геройҙар менән таныштырып, аралаштырып ҡарап, уйнатып ҡаранылар... Беҙҙең Арыҫланды ниндәй сифаттарына ҡарап был ролгә һайлағандарын аныҡ ҡына әйтмәнеләр. Ә, асылда, үҙем күҙәтеп йөрөп, Арыҫланды тикторлмаҫлығы, тиҙ генә аңлап, отоп алыуы, ихласлығы өсөн һайлағандарҙыр, тип уйлайым.

**➔ Бала ошо эштең мөһимлеген, етдилеген һәм яуаплылығын аңларлыҡ инеме?**

- Юҡ, аңларлыҡ түгел ине әле. Ул түгел беҙ үҙебеҙ, ололар, ниндәй ҙур һәм шанлы проектҡа килеп ҡапҡаныбыҙҙы төшөнөп етмәнек ҡапылда. Режиссер баланың биш йәшлек кенә булыуынан да хәүефләнде, арымаҫмы, ҡурҡып ҡалмаҫмы, көйһеҙләнеп китмәҫме, тигән һорауҙар бирҙе. Ә беҙ Арыҫландың ниндәй талымһыҙ энергияға эйә икәнен үҙебеҙ генә беләбеҙ.

Баланың ике телдә лә яҡшы һөйләшеүе кәрәк ине. Ә беҙҙең өйҙә аралашыу башҡортса, русса иһә ул тиҫтерҙәре менән дә, баҡсала ла телен шымартты. "Тамыр"ҙа шөғөлләнеп, тасуири һөйләүҙе һеңдерҙе, камераларға өйрәнде. Фильмдың продюсеры Тимербулат Кәримов улыбыҙҙың "тап ауыл малайы" булыуын да, хатта уның үҙенең бала сағына оҡшауын да телгә алған.

Арыҫлан бөгөн дә әле ниндәй масштаблы эш башҡарып сығыуын баһалай алмай. Ул быларҙың барыһын да уйынлы-ысынлы бер мәшәҡәттәр итеп кенә ҡабул итте. Йондоҙ сире лә юҡ унда. Иптәштәре араһында ла айырылмай. Сөнки балалар донъяһында ундай айырымланыу, мин-минлек төшөнсәләре булмай, ундай йәмһеҙ ғәҙәттәрҙе уларға ололар ғына һеңдерә ала.

**➔ Арыҫландан өйҙә нимәләр талап ителә? Бигерәк тә бөгөн, билдәле малай булып киткәс, уға һеҙҙең тарафтан иғтибар арттымы?**

- Тыуған телде яҡшы итеп үҙләштереүҙе талап итәбеҙ. Төрлө ғаилә йолаларында, ғөрөф-ғәҙәттәрендә ҡатнаштырабыҙ. Олатай-өләсәйҙән башлап, бер нисә быуынды белергә тейешлеген йыш ҡабатлайбыҙ. Ата-бабаларының һуғыштарҙа ҡатнашыуын, ниндәй юлдар үтеүен батырлыҡ билдәһе итеп күрһәтәбеҙ. Бына ошондай милли үҙенсәлектәрҙе белгәндә генә һин башҡа халыҡтарға, тамашасыларға ҡыҙыҡлы шәхес буласаҡһың, тип аңлатабыҙ.

Ул ғаиләлә өлкән бала тип әйттек бит инде, ундай хәлдә, һеҙ беләһегеҙ, кесе туғандарҙы ҡарау, нимәләргәләр өйрәтеү һәм башҡалар оло бала иңдәренә төшә. Арыҫлан да һеңлеһенә ағай икәнен бер минутҡа ла онотмай.

**➔ Баланың бөтөн мөмкинлектәрен дә үҫтереү, өҫкә сығарыу өсөн ата-әсә көс һалырға тейешме? Әлекке тәрбиә менән бөгөнгө тәрбиә айырыламы?**

- Балалар бөгөн беҙҙең кеүек ағас ҡылыс менән алышып, ағас трактор яһап уйнамай. Уларҙың уйындары ла бер башҡаткыс кеүек. Смартфондар, гаджеттар, компьютер быуыны улар. Һәм был балаларҙың ҡыҙыҡһыныуҙары ла үҙенсәлекле булырға мөмкин. Арыҫланды беҙ, мәҫәлән, төрлө йәш йырсыларҙың йырҙарын отоп алып, үҙе йырлап, үҙе бейеп тороуына һәм бер урында саҡ ҡына ла тыныс ултыра алмағанына ҡарап, "Тамыр"ға алып барғайныҡ. Артисланырға яратыуын тыйып ҡына ҡуйыу дөрөҫ булмаҫ ине. Бына шул "Тамыр"ға барып, "эшләп" алды ла китте инде.

Балаға иғтибар бирергә кәрәк. Ул үҫер ҙә унан үҙ юлын һайлар әле, тип кенә яйына ҡуйыу дөрөҫ түгел. Әлбиттә, уны шөғөллө итәм тип, көсләп, илатып, маҙаһыҙлап ташлау ҙа ярамай, әммә һәләтен, мөмкинлектәрен аңғарып, йүнәлеш биреү, ҡыҙыҡһындырып әйҙәкләү мөһим.

Арыҫланды йыш ҡына ауылдарҙа "Был беҙҙең башҡорт малайымы ни?" тип һорайҙар. Йәнәһе, ул шундай кинола төшөп йөрөгәс, ҡайҙандыр Мәскәүҙән килгән йә билдәле актерҙарҙың балаһы. Йәнәһе, ролде шундай танышлыҡ арҡаһында алған. Йәнәһе, бындай бөхет бары тик һайланма кешеләргә генә асыла. Бына шундай комплекстар менән, ниндәйҙер сикләүҙәр ҡуйып йәшәй беҙҙекеләр. Асылда, бары ниәт кенә кәрәк. Ниәт итеп нимәләр эшләргә, ҡыбырларға, тәүәккәлләргә! Унан аҙым артынан аҙым яһалып, мотлаҡ бер һөҙөмтә күренә. Ҡурҡмаҫҡа, оялмаҫҡа, кәмһенмәҫкә, ә өйрәнергә, ынтылырға, тырышырға!

**➔ Арыҫлан актер буласаҡмы?**

- Әлеге мәлдә ул актер булырға хыяллана, шул өлкәлә белем туплай. Әммә актер булыуҙы беҙ уға маҡсат итеп ҡуймайбыҙ. Кем булә, бәлки был уның берҙән-бер роле булып ҡалыр, бәлки, тағы ла сағыуыраҡтары булыр әле. Актер булыуҙан алда ул яҡшы кеше булырға тейеш. Беҙ уны кеше итеп үҫтерергә теләйбеҙ. Белемле, уҡымышлы, төрлө яҡтан үҫешкән, үҙ милләтенә тоғролоҡ һаҡлай белгән, яҡындары өсөн яуаплылыҡ тойған, ҡулында шөғөлө булған, сәләмәт тормош алып барған, йәғни, бөгөнгө заманда үҙ урынын табып йәшәй алырҙай һәм был тормошта бөхет ауларҙай ысын кеше иткебеҙ килә.

Әле ул "Айназ" тигән ҡыҫҡа метражлы фильмда төштө. Бик фәһемле, шундай психологик-тәрбиәүи әҫәр. Атай менән бала мөнәсәбәте илатырлыҡ, уйландырырлыҡ итеп бөтөн нескәлектәрендә бирелә. Бына ошондай сюжеттар, шул геройҙарҙың әске донъяһын асҡандағы кисерештәр, режиссерҙарҙың һөнәри мәктәбе, төрлө кешеләр менән аралашыу һәм башҡалар ҙа баланың рухи үҫешенә йоғонто яһамай ҡалмаясаҡ, әлбиттә. Был үҙе бер тәрбиә мәктәбе.

**➔ Арыҫлан фильмдағы "һеңлекәше" Марта Тимофеева менән бәйләнеш тотамы?**

- Мартаның да ата-әсәһе билдәле актерҙар йәки режиссерҙар түгел. Әсәһе балерина булған еренән эшен ташлап, ҡыҙының карьераһына бар ваҡытын бағышлаған. Атаһы хәрби оркестрҙа музыкант. Ул да беренсе тапҡырға дөйөм кастинг үтеп килә был кино сәнғәтенә. Әле ун бер йәшендә ул төрлө ролдәрҙә ҡырҡ ике картинала уйнаған. Сентябрҙән алып Голливудта киноға төшөп ята ул бала. Эйе, балалар дуҫлаша, ҡыҙыҡай Америкала булғанда ла ватцаптан видеобәйләнешкә инде, аралашып торалар. Мәскәүгә барғанда ла отелгә әйберҙәрҙе генә ҡалдырабыҙ ҙа, Марталарҙың фатирына төшәбеҙ. Өфөгә килгәндә улар беҙҙә туҡтай. Арыҫлан да Мартанан өлгө ала, инглиз телен өйрәнә, ҡыҙыҡайҙың төрлө яҡлап үҫешеүен һәм уңыштарға өлгәшеүен күреп тора. Донъя кимәленә сығыу өсөн сит телдәрҙе белеүҙең мөһим икәнен аңланы инде.

**➔ "Һеңлекәш" фильмында Башҡортостан, башҡорт донъяһы матур күрһәтелде, шулай бит?**

- Эйе. Бәләкәс балалар мөхитендә лә миллилек, шул миллилеккә хас оригиналлек ярылып ятты бит. Бөтөн мәғәнәүи төшөнсәләр ҙә балалар ҡылығы, балалар телмәре аша асылды. Хатта ололар йәшәйеше, һуғыш, ил кисерештәре лә тап башҡорт балалары тормошо аша һүрәтләнде. Унан һуң, Башҡортостан тәбиғәте бөтөн күркәмлегендә бирелде. Ҡараған һайын шуға һоҡланам һәм ғорурлыҡ кисерәм. Был фильм ысын мәғәнәһендә беҙҙең сәнғәт әҫәре, беҙҙең донъя булды. Киләсәктә ошо беҙ тәрбиәләгән балалар тыуған еребеҙҙең, милләтебеҙҙең данын тик яҡшы яҡтан ғына күтәреү өсөндә эшләр, тигән ышаныс бар. Беҙ уларҙы шуның өсөн үҫтерәбеҙ бит.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Бына шундай төплө, фекерле, милли рухлы атай улы икән Арыҫлан Ҡырымсурин. Бындай ғаиләлә тәрбиәләнгән бала, һис шикһеҙ, яҡшы әҙәм буласаҡ. Ә уның актермы, уҡытыусымы, табипмы булыуы - икенсе мәсьәлә...**

**Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА әңгәмәләште.**

✔ **Мөхәммәт-Ғәли Соҡорой тыумышы менән башҡорттарҙан була һәм байтаҡ ҡына әҫәрҙәрендә үҙенең башҡортлоғон айырым-асыҡ рәүештә күрһәтә. Ул сығышы менән Ирәкте башҡорттарынан була.**



ИНТЕРНЕТТАН



# ВАҠЫТЫНДА ЯЛ ИТ

■ Американың ғаилә һәм хеҙмәт институтында үткәрелгән яңы тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, ҡыҫҡа эш көнө хеҙмәткәрҙәр өсөн дә, ойошма өсөн дә файҙалы. Аныҡлап әйткәндә, медицина күҙлегенән сығып ҡарағанда, офиста оҙаҡ ултырыу йөрәккә насар тәьҫир итә. Аҙнаһына 55 сәғәт һәм унан да күберәк эшләүсе кешелә аҙнаһына 40 сәғәт эшләүселәргә ҡарағанда инсульт хәүефе 33 процентҡа юғарыраҡ. Бынан тыш, тик эш менән генә шөғөлләнеүселәр насар йоҡлай, шуға ла тиҙерәк арый. Иң мөһиме, ти ғалимдар, кем оҙағыраҡ ял итә, улар һөҙөмтәлерәк эшләй.

■ Йоҡоһоҙлоҡ - организм һәм психика өсөн етди һынау. Йоҡоноң сифатына күп факторҙар, мәҫәлән, стрестан башлап генетик ауырыуҙарға тиклем тәьҫир итә, әммә нисек туҡланыуға ла иғтибар итергә кәрәк, ти ғалимдар. Йоҡоһоҙлоҡ менән интегеүселәрҙең рационына банан индерергә кәрәк. Уның составында калий менән магний бар. Триптофан тигән аминокислота серотонин синтезында ҡатнаша. Серотонин иһә "йоҡо гормоны" мелатонинға әйләнә. Шуға ла йоҡларға ятыр алдынан банан ашағыҙ. Шулай уҡ аҡһымға бай йомортҡа, эремсек, тауыҡ ите йоҡлап китергә ярҙам итер. Бер стакан йылы һөт тә тик файҙаға буласаҡ.

■ Италияның Пиза университеты ғалимдары ҡыҙыҡлы һынауҙар үткәргән. Ҡатын-ҡыҙҙар ир-егеттәргә ҡарағанда йышыраҡ иҫнәй ти улар. 100 кеше эштә, төшкө аш мәлендә, дуҫтар менән аралашҡандағы ҡылыҡтарын күҙәткән. Мәғлүмәттәр күрһәтеүенсә, ҡатын-ҡыҙҙар башҡаларҙың иҫнәүен күреп, уларға эйәрә икән. Быҙың сәбәбе шунда - гүзәл зат башҡаларҙы яҡшыраҡ аңлай, уларға йәлләү, ваҡиғаларға яраҡлаша белеү сифаттары хас. Был осраҡта ла ҡатын-ҡыҙҙың ҡылығы ошо холҡона бәйле.

■ Бөгөн киң таралыу алған 3D-сеанстарға барыһы ла йөрөй алмай, сөнки фильм ҡараған ваҡытта уларҙың башы әйләнә. Белгестәр был сирҙе кибер ауырыу тип атай. Бәктиһәң, кинотеатрҙарҙа бирелгән күҙлектәрҙең линзаһы менән күҙ хәрәкәттәре тура килмәй. Йәғни экрандағы объект кешегә ҡарай хәрәкәт иткән саҡта күҙ алмалары мөйөшө үҙгәрә, ә линзалар - юҡ. Шуға ла кеше экранға ни тиклем яҡыныраҡ ултыра, шул тиклем тиҙерәк ул үҙен насар тоя башлауы ихтимал. Япония тикшеренеүселәре әйтеүенсә, ауырлы ҡатындарға, ололарға, йоҡоһоҙлоҡ менән яфаланыусыларға бындай сеанстар бөтөнләй тыйыла.

■ Гетеборг университеты эргәһендәге ғилми үҙәк ғалимдары иҫәпләүенсә, ярты йыл дауамында кеше тын ҡыҫылыу менән яфалана икән, йөрәк-ҡан тамырҙары, шулай уҡ тын алыу системаларын тикшерергә кәрәк. Тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, хроник тын ҡыҫылыу күҙәтелгән кешеләрҙең 60 процентында йөрәк сирҙәре табыла. Үпкәнең тейешенсә эшләмәүе лә ошо уҡ һөҙөмтәгә килтерә. Был сир үҙгәреүсән ҡан баҫымынан да ҡурҡынысыраҡ, ти табиптар. Тын ҡыҫылыуға артыҡ ауырлыҡ та килтереүе ихтимал. Шуға ла сәләмәтлегегеҙҙе лә, тән массаһын да даими тикшереп тороғоҙ. Был һәр йәштә лә мөһим.

ТАРИХ ҺӨЙЛӘЙЕМ...

**Ағымдағы йылдың ғинуар айында күренекле башҡорт шағиры, мәғрифәтсе, суфыйсылыҡтың Нәҡшбәндиә тәриҡәтенә ҡараған билдәле дин эшмәкәре Мөхәммәт-Ғәли Соҡоройҙоң тыуыуына 195 йыл тулды. Ҡыҙғаныска ҡаршы, билдәле сәбәптәр арҡаһында замандаштарыбыҙ, хатта ки зыялыларыбыҙҙың күпселеге уның тормошо, эшмәкәрлеге һәм ижады хағында мәғлүмәтле түгел. Үҙе йәшәгән замандың барса ауырлыҡтарын еңеп сығып, туған халҡына бай әҙәби мираҫ ҡалдыра алыуына шағирҙың суфыйсылыҡ фәлсәфәһен бар күңеле, йөрәге менән ҡабул итә алыуы ла сәбәп булғандыр.**

# КЕМ УЛ МӨХӘММӘТ-ҒӘЛИ СОҠОРОЙ?

Хәҙерге көндәрҙә күрше республиканан бәғзе берәүҙәр Мөхәммәт-Ғәли Соҡоройҙо татар сығышлы итергә маташа. Был сафсатаға бары тик шағирҙың үҙ һүҙҙәре менән генә яуап бирепбула. "Манзумати Ғәлийә" ("Ғәли назымдары") тигән ҡулъяҙма китабының баш һүҙендә үҙ тормошон ошолай һүрәтләй: "Беҙ урман башҡорто булабыҙ. Игенсе улы игенсе, крәҫтиән улы крәҫтиәндәр. Төп шөғөлөбөҙ - урман әрсеп, бесәнселек вә игенлек яһамаҡтыр. Мин, аллаһтың ғәрип һәм көсһөҙ бәндәһе, бер тапҡан ваҡытымды вә хәл вә форсатымды даими шундайын шөғөлгә сарыф әйләнем. Юҡ хәл менән муллалыҡҡа указ алып вә йорт һалып, вә тормош кәрәк-ярағтары һатып алып, ярлы кеше балаһы кеүек, бик күп бурысҡа баттым. Вә шул арала һаман юҡ мәҙрәсәне бар итеп, мәҙрәсә ямаштырырға бер үҙем тырышлыҡ һалып, суҡ михнәттәр араһында өйөмдә ауыл балаларын вә мәҙрәсәмдә ҡабилә балаларын уҡытып, вә бөтә ауыл халҡынан артыҡ мәсет һәм мәҙрәсә араһында йөрөп, ирәкте башҡортоноң иң ҙур михнәтле кешеһе булып торамын..."

Ошо иҫтәлекле дата айҡанлы уҡыусыларыбыҙға РФ Мосолман диниә назаратының "Бүләк" мәҙәни үҙәге һәм Мәрджәни Фондының Исламды өйрәнеү үҙәге тарафынан 2020 йылдың 28 декабрендә Мәскәү ҡалаһы мосолмандары өсөн ойошторолған онлайн-лекцияның башҡортса вариантынан өҙөк тәҡдим итәбеҙ. Авторы - филология фәндәре кандидаты, БДУ доценты, Мәскәү мосолмандарының Диниә назараты һәм "Зәкәт" фонды стипендиаты Искәндәр Сәйетбатталов. Руссанан башҡорт теленә Арыҫлан Таймасов тәржемәһендә һәм әҙәби эшкәртеүендә бирелә.

"Мөхәммәт-Ғәли Соҡорой поэзияһында мосолман символизмы һәм уның поэтик техникаһы хаҡында һүҙ башларҙан алда, бер аҙ ғына ситкәрәк тайпыла биреп, шағир биографияһының иң мөһим факттары менән танышып үтәйек. Мөхәммәт-Ғәли Соҡорой 1826 йәиһә 1828 йылдың ҡышында тыуған. Уның тыуған йылын билдәләүгә ҡарата төрлө ҡараштар бар. Был әҙәби сығанаҡтарҙа һәм ревиз сказкаларында (ул замандағы иҫәп алыу документтарында) шағирҙың йәшен төрлөсә күрһәтеү менән бәйле, әммә, әҙәбиәт ғилемендә ҡабул ителгәнсә, Мөхәммәт-Ғәли Соҡорой 1826 йылдың ғинуар айында тыуған, тип иҫәпләнә.

Мөхәммәт-Ғәли Соҡорой тыумышы менән башҡорттарҙан була һәм байтаҡ ҡына әҫәрҙәрендә үҙенең башҡортлоғон айырым-асыҡ рәүештә күрһәтә. Ул сығышы менән бик арҙаҡлы нәҫелдән - ҙур башҡорт берләшмәләренең береһе булған Ҡара Табын ырыуының бер тармағы - Ирәкте башҡорттарынан була. Уның ата-бабалары олоҫ старшиналары булып,



Төньяҡ Башҡортостан территорияһына ҡараған клан һәм бер үк ваҡытта административ структура етәкселәре вазифаһын биләй.

Ирәкте ырыуының легендар тәү бабаһы итеп Сыңғыҙ хан ярандарының береһе - Майҡы бей иҫәпләнә. Күренекле фарсы тарихсыһы Рәшид ад-Дин Хамадани ысынында шул уҡ исем менән билдәле булған әмир Байку (Байҡы) хаҡында иҫкә ала, ул тәүҙә Сыңғыҙ ханға хеҙмәт итеп, һуңынан уның оло улы Джучи ғәскәренең уң ҡанатын етәкләй.

Шағирҙың атаһы Абд ас-Салих ибн Абдул (Ғәбделсәлих Абдулла улы Кейеков) ауыл мәсете имамы вазифаһында хеҙмәт итә, суфый шәйехе була. Мөхәммәт-Ғәли Соҡорой хәҙерге Башҡортостан, Пермь крайы һәм Татарстан территорияһындағы 5 мәҙрәсәлә белем ала. XIX быуаттың 70-80-се йылдарында шағир 4 мәртәбә Мәккәгә хаж ҡылырға бара. Үҙе иҫән сағында уҡ ул 6 китабын нәшер итә (барыһы ла иҫке төрки телендә) һәм бик киң күләмле ҡулъяҙма мираҫ ҡалдыра. Уның тулыҙ күләмле ҡулъяҙмаһы Өфөлә Башҡортостан Республикаһының Ә.-З. Вәлиди исемендәге Милли китапханаһында, шунса уҡ яҙмалары Ҡаҙан федераль университеты Ғилми китапханаһының көнсығыш ҡулъяҙмалары секторында, ә бер ни тиклем хеҙмәттәре Санкт-Петербургта Рәсәй фәндәр академияһының Көнсығыш ҡулъяҙмалары институты тупланмаһында һаҡлана. Мөхәммәт-Ғәли Соҡорой 1889 йылда алтмыш өс йәшендә вафат була.

Уның ижади мираҫы жанрҙары, характеры һәм күләме буйынса бер-береһенән айырылып торған күп һанлы текстарҙан тора.

1. Мосолман дине ҡиммәттәрен ҡыҫҡа һәм аңлайышлы формала тасуир итеүсе дини-әхлаҡи әҫәрҙәр. Был текстар ҙа шулай уҡ төрки телендә яҙылған. Улар иҫәбенә мосолман кешеһе өсөн мотлаҡ булған ғәмәлдәр хаҡындағы "40 фард" поэмаһы, "Тархиб-и Рамадан" ("Рамаҙан айын тәбрикләү") һәм башҡа әҫәрҙәр инә.

2. Тарихи яҙмалар (историография). Мөхәммәт-Ғәли Соҡорой үҙ ырыуының килеп сығышы, ҡара-табын кланы башҡорттары тарихы хаҡында күп яҙған. Улар араһында айырыуса билдәле булғандарынан ҡаратабындарҙың Себерҙән Башҡортостандың төньяҡ һәм көнбайыш тарафтарына күсенеүе тураһында бәйән иткән "Хикәйәт" поэмаһы, "Тазкират ли-л-ихван ва-л-ахбаб" ("Туғандарыма вә яратҡан кешеләремә иҫкәрмә") трактаты.

3. Әүәлерәк замандарға ҡараған дини эшмәкәрҙәрҙең һәм историографтарҙың хеҙмәттәренә комментарийҙар. Уның комментарий сифатында яҙылған хеҙмәттәре араһында иң билдәлеләренән "Фусул-и арба'а" ("Йыл-дың дүрт миҙгеле") поэтик яҙмы - арҙаҡлы Урта Азия мистик шағиры Суфый Аллаһыярҙың "Сабат ал-'аджизин" ("Көсһөҙҙәр раҫлауы") һәм "Мурад ал-'арифин" ("Хәҡиҡәткә өлгәшеүселәр маҡсаты") поэмаларынан һайлап алынған шиғырҙарға комментарийҙар, шулай уҡ Хисам ад-Дин ибн Шәрәф ад-Дин һәм Хөсәйен ибн Әмирхандың историографик хеҙмәттәренә "Таварих-и Булгарийа йаки Такриб-и Гари" ("Булгар тарихы, йәки Ғари яҡынлауы") исеме аҫтында киң форматтағы тәнҡит комментарийы.

Мөхәммәт-Ғәли Соҡорой әҫәрҙәре һис тә бер тиң кимәлдә өйрәнелмәгән: бер яҡтан, тикшеренеүселәр иғтибарын, башлыса, дини-әхлаҡи нәсихәттәр йәлеп итә, быларҙы Ҡаҙан ғалимдары бик әүҙем өйрәнә һәм баҫып сығара. Башҡортостан тарихсыларын, филологтарын һәм башҡа тикшеренеүселәрен иң элек тарихи яҙмалар ҡыҙыҡһындыра. Был Мөхәммәт-Ғәли Соҡоройҙоң хәҙерге милли мәҙәниәттәр формалашыуына индергән өлөшөн асыҡлау мөмкинлеген бирә, әммә уның үҙе һәм ижады хаҡында бары тик фрагментар ҡараш барлыҡҡа килтерә. Мөхәммәт-Ғәли Соҡоройҙо тик дини текстар авторы, йәиһә бары историограф итеп кенә ҡарау, ахыр сиктә, уның донъяһын һәм ижадын бар тулылығында күҙ алдына килтерергә мөмкинлек бирмәй. Бөгөнгә филологтарҙың бурысы - шағир ижадына дөйөмләштерелгән, бер бөтөн ҡараш булдырыу.

Шағир ижадының хронологияһы бик яҡынса ғына билдәләнә, иң элек маргиналийҙар, йәғни ҡулъяҙмаларының ситтәрендәге аңлатмалар буйынса, һәм дә бәғзе бер икенсе хеҙмәттәрендә үҙенә үҙе биргән һылтанмаларына нигеҙләнеп. Күрәһең, Мөхәммәт-Ғәли Соҡорой Танып ауылы мәҙрәсәһендә (хәҙерге Пермь крайының Барҙа районында) уҡып йөрөгән сағында, ике эмоциональ кисереш фонында, 17 йәшендә уҡ яҙ-

✔ **Тулыһынса азат булғанда ғына һөйөүҙе һаҡларға мөмкин. Берегеҙ икенсегеҙҙе үҙгәртергә маташырға тейеш түгелһегеҙ. Тормошта иһә был йыш күҙәтелә һәм айырылышыуҙарҙың төп факторы булып тора.**



ыша башлаған. Ошо ваҡытта уның әсәһе вафат була, ә буласаҡ шағир көсөргәнешле рухи эҙләнеүҙәр юлында тәүләп, ысынлап тороп һәм аҡлы рәүештә суфыйсылыҡ ғәмәлдәрен үҙ итә башлай. Үҙе әйткәнсә, тап ошо саҡтан Мөхәммәт-Ғәли Соҡоройҙоң шиғри ғәмәлиәте башлана. Уның һаҡланып ҡалған һәм яҙылыу датаһы билдәле булған беренсе әҫәре "Китаб ал-асма" ("Исемдәр китабы") поэмаһы.

Өфөлә һаҡланған ҡулъяҙмаларының күбеһе - XIX быуаттың 70-се йылдарында ижад ителгән әҫәрҙәр. Уның историографик әҫәрҙәре, шул иҫәптән "Таварих-и Булгарийа" китабы ла, ғүмеренең аҙаҡҡы осоронда, 80-се йылдарҙа яҙыла. Йылдар үтеү менән Мөхәммәт-Ғәли Соҡоройҙоң ижади әүҙемлеге ҡеүәтләнә һәм төрләнәбара.

Мөхәммәт-Ғәли Соҡоройҙоң суфыйсылыҡ юлындағы рухи бағаналарын билдәләү зарурлығы бар. 1872 йылда ул "Машаийх-и Али Гари Бахари" ("Ғәли Ғари Бахари остаздары") тигән әҫәрендә суфый булараҡ үҙенең рухи эҙләнеүҙәр тарихын бәйән итә. Ул 10 йәшендә атаһының нисек итеп суфый ритуалын уҙғарыуын ҡарап тора. Атаһы үҙенең мөриде менән шөғөлләнгән саҡта ул ошо күнекмәләрҙә ҡатнашырға теләүен белдергәс, атаһынан Аллаһты йөрәк менән иҫкә алыу хаҡында тәүге нәсихәт ала. 17 йәшендә ата-әсәһе менән тәриҡәттә шәйех Мөхәммәт-Морат Бадахшани юлынан барыусылар рәтенә баҫа. Был дини эшмәкәр Ташкентта тыуған һәм, инде хөрмәтле суфый шәйехе дәрәжәһен алғас, 40-сы йылдарҙа Рәсәй империяһы территорияһына күсеп килеп, Сараши ауылында (хәҙерге Пермь крайының Барҙа районы) төпләнә.

Стәрлебаш мәҙрәсәһендә уҡыған сағында Мөхәммәт-Ғәли Соҡорой арҙаҡлы суфый остазы Ниғмәтуллаһтың улы шәйех Харис әл Истәрлебашиҙың рухи тәрбиәһендә була. Мәҙрәсәне тамамлап, тыуған яҡтарына ҡайтҡас, йәш рухани йәнә дүрт суфый остазы ойоштороған йыйылыштарға йөрөй. 1872 йылда хаж ҡылғанда суфый шағир үҙенә рухташ булырлыҡ остаз таба - ул Мөхәммәд-Мазһар әл Мәҙәни була. Мөхәммәд-Мазһар - Һиндостанда танылыу тапҡан суфый шәйехе Әхмәт Сәйеттең улы, XVI - XVII быуаттар сигендә Акбар шахтың дини реформаларын ҡабул итә алмаған мосолмандарҙың ҡаршылыҡ хәрәкәте етәксеһе, һинд шәйехе, арҙаҡлы дин эшмәкәре Әхмәт Сирхиндиҙең туранан-тура вариҫы. Мөхәммәд-Мазһар шулай уҡ яҙыусы була, агиографик хеҙмәттәр (әүлиәләргә арналған) авторы, ғәрәп һәм фарсы телдәрендә шиғырҙар ижад итә. Мөхәммәт-Ғәли Соҡорой унан үҙенең остазы булырға рөхсәт ала.

Мөхәммәт-Ғәли Соҡоройҙоң әҙәби мираҫын, башҡа бер суфыйсылар ижады кеүек үк, айырымланған текст итеп кенә, уның контексынан башҡа, мосолман мәҙәниәте һәм донъяны суфыйҙарса тойоу сиктәрендә абруйлы һаналған башҡа текстар менән интертекстуаль бәйләнештәр системаһынан айырып алып ҡарарға ярамай. Әгәр Мөхәммәт-Ғәли Соҡоройҙоң текстарын ошо контекстан тыш уҡыһаң, уны тулыһынса аңлау мөмкин булмаясаҡ. Суфыйсылыҡ поэзияһын тикшереүсе һәр кем алдында теге йәки был авторҙың үҙаллы ижадына булған йоғонтоно, ошо ижадта сағылыш таба алған һәм дауам ителгән әҫәрҙәр өлкәһен билдәләү бурысы тора. Мөхәммәт-Ғәли Соҡорой әҫәрҙәренә енелсә генә анализ биргән осраҡта ла уның поэзияһында өс яҡтан йоғонто яһалыуы асыҡлана. Беренсенән, башҡа ил һәм төбәктәрҙең XII - XVII быуаттарҙа ижад иткән төрки телле шағирҙар мираҫы: төрки телдәрендәге дини поэзияға нигеҙ һалыусы Әхмәт Йәсәүи, уны дауам итеүсе Сөләймән Баҡырғани, XV быуатта үтә ҙур күләмле "Мөхәммәҙиә" поэмаһын яҙған осман шағиры Мехмед Йазыджиоглу Челеби, Урта Азия шағиры Суфый Аллаһыяр.

Икенсенән, Мөхәммәт-Ғәли Соҡорой ижадына Урал-Волга буйының төрки телле шағирҙары йоғонто яһай: Ҡол Ғәли, Абд ар-Рахман Утыҙ-Имәни, Тадж ад-Дин Ялсығол, Һибәтуллаһ әл Ҡарғалы. Башҡорт мистигы хеҙмәттәрендә уларҙың әҫәрҙәренә туранан-тура йәиһә ситләтеп әйтелгән һылтанмалар бар.

Өсөнсөнән, фарсы классик шағирҙары, иң элгәре Джалал ад-Дин Руми, Саади Ширази һәм Абд ар-Рахман Джами. Уларҙың әҫәрҙәренән цитаталар шағирҙың поэзияһында ла, сәсмә хеҙмәттәрендә лә осрай.

Соҡоройҙоң поэтик ижады хәҙерге заман тикшеренеүсеһенә һәм уҡыусыһына ла ҡыҙыҡлымы һуң? Мөхәммәт-Ғәли Соҡорой текстары, Башҡортостанда йәшәгән һәм ижад иткән XIX быуат шағирҙары мираҫының иң күләмлеләренән булып, бик күренекле әҙәби корпусты хасил итә, шуға күрә уға бер нисек тә иғтибарһыҙ ҡалып булмай: күп поэтик жанрҙар, формалар, темалар бары уның ижадында ғына сағылыш тапҡан. Соҡорой поэзияһы тығыҙ йөкмәткеле, һәм ысынбарлыҡта ул әлегә тиклем тейешле баһа алмаған тарихи сығанаҡ булып тора...

*ФӘҺЕМЛЕ ХИКӘЙӘТТӘР*

# НӘУАДИР ТӘРЖЕМӘҺЕ

**XIX-XX быуат саттарында милли мәҙәниәт өлкәһендә тәрән эҙ ҡалдырыусыларҙың береһе, билдәле башҡорт уҡымышлыһы Хәбибназар Үтәки ғәрәп әл-Ҡолйубиҙың "Нәуадир" йыйынтығын төрки теленә ирекле тәржемәлә баҫтырып сығара. Уның "Нәуадир тәржемәһе" китабы XIX-XX быуат башҡорт мәғрифәтселек әҙәбиәтенең айырылғыһыҙ биттәрен тәшкил иткән әһәмиәтле ҡомартҡы булып тора. Ошо китаптан ҡайһы бер фәһемле хикәйәттәрҙе "Киске Өфө" гәзитен уҡыусыларға тәҡдим итәбеҙ.**

## Бер йәш падишаһтың хәле тураһында

Бер падишаһтың балаһы атаһының вафатынан һуң тәхеткә ултыра, ләкин һис кенә лә батшалыҡ итеүҙең ләззәтен тапмай икән. Бер көндө ул үҙенең ярҙамсыларынан: "Һәр кеше лә минең кеүекме, әллә батшалыҡ итеүҙән ләззәт табыусылар ҙа бармы?" - тип һораған. "Ҡайһы бер әҙәмдәр һинең кеүек түгел, улар батшалыҡ итеүҙән ләззәт табалар. Сөнки улар намыҫлы һәм тәүфиҡлы", - тип яуаплаған улар. Шаһтың: "Улайһа, миңә лә шундай булырға кәрәк, быға нисек өлгәшергә мөмкин?" - тигән һорауына ярандары: "Ғалимдар һәм изгелекле ирҙәр белер", - тигән. Бынан һуң әлеге шаһ ҡалаһында булған ғалимдарҙы һәм изгеләрҙе үҙенә йыйған. Шаһ үҙен уратып алып ултырған ғалимдарға: "Әй, ғалимдар, миңә низәр ҡылырға кәрәк - әмер итегеҙ; нимәләрҙән тыйылырға кәрәк - аңғартығыҙ", - тип мөрәжәғәт иткән. Йыйылғандарҙың барыһы ла һүҙ алып, шаһты өйрәтергә тотонған. Был хәлдән һуң падишаһ тура юлға төшөп һәм тәүфиҡлы булып, батшалыҡ итеүҙән ләззәт табып, дүрт йөҙ йыл рәхәтлектә ғүмер һөрҙө, ти.

Бер көн быға Иблис килеп ингән. Шаһ бынан: "Әй мосафир, һин кемһең?", - тип һорағас, уныһы: "Мин - Иблисмен. Һинең кем булыуыңа ғәжәпләнәмен", - тигән. Шаһ уға: "Әҙәм балаһынан булған бер падишаһмын мин", - тигәнде ишетеп, Иблис: "Әгәр һин әҙәм балаһы затынан булһаң, күптән вафат булыр инең! Һинең тиңдәштәреңдән һәр ҡайһыһы үлеп бөттө, бәлки, һин Аллаһының үҙе булһа кәрәк! Әҙәмдәрҙе үҙеңә ғибәҙәт ҡылырға өндә", - тип ҡотҡо һалған, ти. Күңелен был ҡотҡо ялмап, әҙәм заттарын үҙенә ғибәҙәт ҡылырға өндәү өсөн шаһ минбәргә сыҡып: "Әй, әҙәмиҙәр, мин һеҙгә үҙемдең кем икәнемде әйтмәйенсә, йәшереп торҙом, хәҙер ваҡыты килеп етте. Беләһегеҙ, мин һеҙгә дүрт йөҙ йыл ашыу падишаһлыҡ ҡылам. Әгәр әҙәм балаһы булһам, күптән үлер инем. Мин - Алламын, миңә ғибәҙәт ҡылығыҙ, миңә ғибәҙәт тотоғоҙ", - тигән. Был хәлдән һуң Аллаһы Тәғәлә шул замандың бәйғәмбәренә: "Был ахмаҡ падишаһтың күңеле яҡшы ваҡытында дәүләтенә тыныслыҡ, үҙенә лә именлек биргәйнем. Инде ярҙамсы ҡолома ирек ҡылдым..." - тип хәбәр ебәргән. Күп тә торманы, йомошсо ҡоло килеп, падишаһтың үҙен һәм ғәскәрен һәләк итеп, хазинаһынан теймәш алтынды алып та киткән, ти.

**Илшат ЯНБАЕВ әҙерләне.**
**(Дауамы. Башы 7-се һанда).**

*УҢЫШ ҠАҘАН*



# МӨХӘББӘТ БЕРӘҮ ГЕНӘМЕ?

Үҙ-ара мөнәсәбәттәрҙә мөхәббәтте һаҡлау мөһим. Быныҡ өсөн һеҙгә үҙегеҙҙең бер бөтөн булмауығыҙҙы аңларға кәрәк. Күп төрлө романтик фараздарға ҡарамаҫтан, ике кешене берәү итеп ҡойоп булмай. Һеҙҙең һәр берегеҙ айырым шәхес. Был донъяға һин яңғыҙ килгәнһең һәм унан яңғыҙ китәсәкһең.

Ялҡынлы романтик тойғоларға ҡарамаҫтан, мәңге бер генә кешене һөйөргә вәғәҙә итеү буш хәбәр ул. Сөнки мөхәббәт туҡтауһыҙ үҫешә. Кисәгене уткән инде, иртәгәһе әлегә юҡ, ә бөгөнгөһөнә лайыҡ булырға кәрәк. Үҙ-ара мөнәсәбәттәргә һәр иш үҙ өлөшөн индергәндә генә мөхәббәт дауам итәсәк.

Шулай уҡ тулыһынса азат булғанда ғына һөйөүҙе һаҡларға мөмкин. Берегеҙ икенсегеҙҙе үҙгәртергә маташырға тейеш түгелһегеҙ. Тормошта иһә был йыш күҙәтелә һәм һүҙгә килешеүҙәрҙең, айырылышыуҙарҙың төп факторы булып тора. Ишенә үҙ индивидуаллеген сағылдырырға мөмкинлек биргәндә генә мөхәббәт, романтика һәм көслө кисерештәр булыуы ихтимал. Һин үҙеңде ни тиклем бойондороҡһоҙораҡ тойһаң, ишеңде шул тиклем ныҡыраҡ ҡәҙерләйәсәкһең. Бергә үткәргән ваҡытығыҙ һөйөү тураһындағы уйҙарға һәм икегеҙҙе лә шатландырған шөғөлдәргә арналырға тейеш. Был үҙ-ара мөнәсәбәттәрегеҙҙе йәнләндерер, күңелһеҙ уйҙарға бирелергә юл ҡуймаҫ.

Үҙеңдә романтик шәхесте үҫтереү бик мөһим. Күптәр иһә, романтика ҡыҫҡа ғүмерле, тип фекер йөрөтә. Уларға "өлгөргән" мөнәсәбәттәрҙә үҫтереү менән романтика аҡрынлап тоноҡлана бара кеүек тойола. Әгәр был ҡараштыяҡлаһаң, һин үҙеңде тормоштағы иң матур кисерештәрҙең береһенән мәхрүм итәһең. "Өлгөргән" мөнәсәбәттәр, тип әйтеү ул ир менән ҡатындың, еңелдән булмаған килешеүгә килеп, түҙемлелеккә нигеҙләнеп кенә статус-квоны һаҡлауҙарын белдерә.

Романтика менән бергә кеше тормошонан тартыу көсө лә китә, шуға күрә уны даими һуғарып торорға кәрәк. Үҙеңдә романтик шәхесте үҫтереү тартыу көсөндә арттырасаҡ һәм кәрәкле кешеләрҙе үҙ эргәңдә тоторға, шулай уҡ теләгәненә ирешергә, уңайлы шарттар тыуыуына булышлыҡ итәсәк.

Беҙ романтикаға мохтажбыҙ һәм уны дәртләндереүсегә рәхмәтлебеҙ генә. Романтик кеше - ул аҡыллы кеше.

Һәр кем яратылырға теләй. Һиңә осраған һәр бер кеше уйынан ғына: "Зинһар, ярат мине!" - тип ялбара. Беҙҙең ҡылыҡтарға ҡарап фекер йөрөтһәң, быға ышаныуы ла ҡыйын; ҡайһы берҙә үҙеңдәге ошо эске аслыҡты кеше үҙе лә һиҙмәй.

Күп кеше үҙен етерлек яратмайҙар, тигән фекерҙә. Сөнки улар бала саҡта кисергән әсә һөйөүен эҙләп, юҡһынып бер була. Ә әсә һөйөүе - ул иң камил һөйөү. Шуға күрә улар ошо матур тойғоно ҡабаттан табырға маташып йәшәй һәм уны үҙенән ситтә эҙләй.

Әгәр үҙеңде яратыр кешеләрҙе эҙләү һинең төп маҡсатыңа әйләнһә, һин аҙым һайын тәңөлөп йәшәйәсәкһең. Мөхәббәт ул үҙеңде яратыуҙан һәм үҙең булып ҡала белеүҙән башлана. Йәғни ул һинән башланырға тейеш. Әгәр һин башта үҙеңде яратмаһаң, башҡа кешелә һөйөү таба алмаясаҡһың. Һөйөүеңдең нуры үҙеңде уратып алыусыларға ла ҡағылырлыҡ көслө булғанда ғына - һине ярата башлаясаҡтар.

Ләкин шуны иҫеңдә тот: һин үҙ һөйөүеңде башҡа кешегә бирә алмайһың. Һин яратыусы ғына була алаһың. Яратыусы булыу - ул үҙ аҡылыңды, уйҙарыңды, тәнеңде, тормошоңдо һәм үҙ эсеңдәге Аллаһ көсөн яратырға өйрәнеү. Был ағастарҙы, сәскәләрҙе һәм хайуандарҙы, ҡояш яҡтыһын һәм үҙең күргән, ҡағылған йәки тәмләп ҡараған бөтә нәмәне яратырға өйрәнеү.

Мөхәббәт - иң көслө талаптарҙың береһе. Психологтар шәхестең күп кенә кире яҡтары һөйөү булмауҙан түгел, ә яратыусы була белмәүҙән икәнлеген асыҡланы.

**Роберт ЭНТОНИ.**
**(Дауамы бар).**



### 1 МАРТА
### ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00, 3.00 Новости.
9.50 Жить здорово! [16+]
10.55 Модный приговор. [6+]
12.10, 1.10, 3.05 Время покажет. [16+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 Давай поженимся! [16+]
16.00, 3.30 Мужское / Женское. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.40 На самом деле. [16+]
19.45 Пусть говорят. [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера. "Курорт цвета хаки". [16+]
23.30 Вечерний Ургант. [16+]
0.10 Познер. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 "Утро России".
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 "Доброе утро, республика!"
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 Судьба человека. [12+]
12.40, 18.40 "60 минут". [12+]
14.55 Т/с "Склифосовский". [12+]
17.15 Прямой эфир. [16+]
21.20 Т/с "Акушерка. Счастье на заказ". [16+]
23.35 Вечер с Владимиром Соловьевым. [12+]
2.20 Т/с "Тайны следствия-4". [12+]
4.05 Т/с "Черчилль". [12+]
4.55 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**9.00, 16.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**9.15 Сәләм, Республика!**
**10.00, 16.30 Т/с "Любовь тракториста". [12+]**
**11.00 Итоги недели (на рус. яз.).**
**11.45 Специальный репортаж. [12+]**
**12.00 Счастливый час.**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз.).**
**13.30 Бәхетнамә.**
**14.30, 4.45 "Бай". [12+]**
**15.00, 18.15, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15 Әлләсе... [6+]**
**16.15 "Гора новостей".**
**17.30 Ради добра. [12+]**
**17.45 История одного села. [12+]**
**18.00 "Пофутболим?" [12+]**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.45 Инцидент-репортаж. [12+]**
**21.00 Спортивная история. [12+]**
**22.00 Бишек. Колыбельные моего народа. [6+]**
**23.00 Кұстәнәс. [12+]**
**23.30 Топ 5 клипов. [12+]**
**0.00 Х/ф "Свидетели". [12+]**
**1.45 Бәхетнамә. [12+]**
**2.30 Спектакль "Прекрасная возлюбленная". [12+]**
**4.30 "Йөрәк һүҙе". [12+]**
**5.15 Преград. Net. [6+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**

### 2 МАРТА
### ВТОРНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00, 3.00 Новости.
9.50 Жить здорово! [16+]
10.55 Модный приговор. [6+]
12.10, 1.10, 3.05 Время покажет. [16+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 Давай поженимся! [16+]
16.00, 3.35 Мужское / Женское. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.40 На самом деле. [16+]
19.45 Пусть говорят. [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера. "Курорт цвета хаки". [16+]
22.30 Премьера сезона. "Док-ток". [16+]
23.30 Вечерний Ургант. [16+]
0.10 Д/ф "Михаил Горбачев. Первый и последний". [12+]

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 "Утро России".
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 "Доброе утро, республика!"
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 22.00 Вести.
11.30 Судьба человека. [12+]
12.40, 18.40 "60 минут". [12+]
14.55 Т/с "Склифосовский". [12+]
17.15 Прямой эфир. [16+]
21.05 Вести. Местное время.
21.20 Т/с "Акушерка. Счастье на заказ". [16+]
23.35 Вечер с Владимиром Соловьевым. [12+]
2.20 Т/с "Тайны следствия-4". [12+]
4.05 Т/с "Черчилль". [12+]
4.55 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**9.00, 11.00, 16.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**9.15 Сәләм, Республика! [12+]**
**10.00, 16.30 Т/с "Любовь тракториста". [12+]**
**11.15 Республика LIVE #дома. [12+]**
**11.45 Дорожный патруль. [16+]**
**12.00 Счастливый час.**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз.).**
**13.30 Бәхетнамә.**
**14.30 "Дорога к храму". [0+]**
**15.00, 18.15, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15 Бишек. Колыбельные моего народа. [6+]**
**15.45 Брифинг Министерства здравоохранения РБ по коронавирусу.**
**16.15 "Гора новостей".**
**17.30 "Времечко".**
**18.00 "Криминальный спектр". [16+]**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.45 Мусорная реформа. [12+]**
**21.00 По сути дела... [12+]**
**22.00, 4.30 Тормош. [12+]**
**23.00 Колесо времени. [12+]**
**0.00 Х/ф "Графомафия". [12+]**
**2.00 Бәхетнамә. [12+]**
**2.45 Спектакль "Наш одуванчик". [12+]**
**5.00 Автограф. [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**

### 3 МАРТА
### СРЕДА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00, 3.00 Новости.
9.50 Жить здорово! [16+]
10.55 Модный приговор. [6+]
12.10, 1.05, 3.05 Время покажет. [16+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 Давай поженимся! [16+]
16.00, 3.25 Мужское / Женское. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.40 На самом деле. [16+]
19.45 Пусть говорят. [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера. "Курорт цвета хаки". [16+]
22.30 Премьера сезона. "Док-ток". [16+]
23.30 Вечерний Ургант. [16+]
0.10 Премьера. "101 вопрос взрослому". [12+]

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 "Утро России".
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 "Доброе утро, республика!"
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 Судьба человека. [12+]
12.40, 18.40 "60 минут". [12+]
14.55 Т/с "Склифосовский". [12+]
17.15 Прямой эфир. [16+]
21.20 Т/с "Акушерка. Счастье на заказ". [16+]
23.35 Вечер с Владимиром Соловьевым. [12+]
2.20 Т/с "Тайны следствия-4". [12+]
4.05 Т/с "Черчилль". [12+]
4.55 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**9.00, 11.00, 16.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**9.15 Сәләм, Республика! [12+]**
**10.00 Т/с "Холостяк". [12+]**
**11.15 По сути дела... [12+]**
**11.45 "Криминальный спектр". [16+]**
**12.00 Счастливый час.**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз.).**
**13.30 Бәхетнамә.**
**14.30 "Аль-Фатиха". [12+]**
**15.00, 17.15, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15 Преград.net. Мобильная помощь на дому. [6+]**
**15.30 "Сулпылар". [0+]**
**16.15 "Гора новостей".**
**16.30 Спортивная история. [12+]**
**17.00 Дорожный патруль. [16+]**
**17.30 Министерство правды.**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.45 "Честно говоря". [12+]**
**22.00 Историческая среда. [12+]**
**23.00 "Байык" представляет... [12+]**
**0.00 Х/ф "Ивановы". [12+]**
**1.30 Бәхетнамә. [12+]**
**2.15 Спектакль "Тамарис". [12+]**
**4.15 "Йөрәк һүҙе". [12+]**
**4.30 Үткән гүмер. [12+]**
**5.00 Детей много не бывает. [6+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**

### 4 МАРТА
### ЧЕТВЕРГ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00, 3.00 Новости.
9.50 Жить здорово! [16+]
10.55 Модный приговор. [6+]
12.10, 1.10, 3.05 Время покажет. [16+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 Давай поженимся! [16+]
16.00, 3.35 Мужское / Женское. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.40 На самом деле. [16+]
19.45 Пусть говорят. [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера. "Курорт цвета хаки". [16+]
22.30 Большая игра. [16+]
23.30 Вечерний Ургант. [16+]
0.10 Д/ф Премьера. "Диагноз для Сталина". [12+]

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 "Утро России".
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 "Доброе утро, республика!"
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 Судьба человека. [12+]
12.40, 18.40 "60 минут". [12+]
14.55 Т/с "Склифосовский". [12+]
17.15 Прямой эфир. [16+]
21.20 Т/с "Акушерка. Счастье на заказ". [16+]
23.35 Вечер с Владимиром Соловьевым. [12+]
2.20 Т/с "Тайны следствия-4". [12+]
4.05 Т/с "Черчилль". [12+]
4.55 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**9.00, 11.00, 16.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**9.15 Сәләм, Республика! [12+]**
**10.00, 16.30 Т/с "Холостяк". [12+]**
**11.15 "Честно говоря". [12+]**
**12.00 Счастливый час.**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз.).**
**13.30 Бәхетнамә.**
**14.30 Моя планета Башкортостан. [12+]**
**15.00, 18.15, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15 Бирешмә. Профи. [12+]**
**16.15 "Гора новостей".**
**17.30 "Времечко".**
**18.00 "Криминальный спектр". [16+]**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.45 Инцидент-репортаж. [12+]**
**21.00 Башкорттар. [6+]**
**22.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**23.00 "Ете егет". [12+]**
**23.45 История одного села. [12+]**
**0.00 Х/ф "Услышь меня". [6+]**
**2.15 Бәхетнамә. [12+]**
**3.00 Спектакль "Оставайтесь солнцем". [12+]**
**5.00 Бишек. Колыбельные моего народа. [6+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**

### 5 МАРТА
### ПЯТНИЦА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00 Новости.
9.50 Жить здорово! [16+]
10.55, 2.30 Модный приговор. [6+]
12.10 Время покажет. [16+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15, 3.20 Давай поженимся! [16+]
16.00, 4.00 Мужское / Женское. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.40 "Человек и закон" с Алексеем Пимановым. [16+]
19.45 "Поле чудес". Праздничный выпуск. [16+]
21.00 Время.
21.30 "Голос. Дети". Новый сезон. [0+]
23.05 Вечерний Ургант. [16+]
0.00 Д/ф Премьера. "Женщина". [18+]
1.50 Вечерний Unplugged. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 "Утро России".
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 "Доброе утро, республика!"
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 Судьба человека. [12+]
12.40, 18.40 "60 минут". [12+]
14.55 Близкие люди. [12+]
17.15 Прямой эфир. [16+]
21.20 Т/с "Акушерка. Счастье на заказ". [16+]
23.35 Дом культуры и смеха. Весна. [16+]
2.00 Х/ф "Кабы я была царица". [12+]

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**9.00, 11.00, 16.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**9.15 Сәләм, Республика! [12+]**
**10.00, 16.30 Д/ф "Асель-Туй. Потомок Туя". [12+]**
**11.15, 21.00 "Йома". [0+]**
**11.45 "Криминальный спектр". [16+]**
**12.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**12.30, 3.30 Башкорттар. [6+]**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз.).**
**13.30 Үткән гүмер. [12+]**
**14.00 "Курай даны". [12+]**
**14.15 "Красная кнопка". [12+]**
**15.00, 18.15, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15 "Алтын тирмә". [0+]**
**16.15 "Гора новостей".**
**17.30 Моя планета Башкортостан. [12+]**
**18.00 Дорожный патруль. [16+]**
**19.00 "Башкорт йыры". [12+]**
**19.45 История одного села. [12+]**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 "Сәнгелдәк". [0+]**
**20.45 Инцидент-репортаж. [12+]**
**22.00 "ВасСәләм!" [12+]**
**23.00 Караоке по-башкирски. [12+]**
**23.30, 4.00 Автограф. [12+]**
**0.00 Х/ф "Чужая жизнь". [18+]**
**1.30 Спектакль "Аҫылйәр". [12+]**
**4.30 Вопрос+Ответ=Портрет. [6+]**
**5.15 Юбилейный концерт композитора Данила Хасаншина. [12+]**
**6.00 Культура малой Родины. [12+]**

### 6 МАРТА
### СУББОТА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

6.00 Телеканал "Доброе утро. Суббота".
9.00 Умницы и умники. [12+]
9.45 Слово пастыря. [0+]
10.00 Новости.
10.15 Д/ф Премьера. "Александр Балуев. Герой, одержимый страстью". [12+]
11.15, 12.15 Видели видео? [6+]
12.00 Новости (с субтитрами).
13.55 Х/ф "Интердевочка". [16+]
16.45 "Кто хочет стать миллионером?" с Дмитрием Дибровым. [12+]
18.25 Премьера. "Сегодня вечером". [16+]
21.00 Время.
21.20 Х/ф Премьера. "Давай разведемся!" [16+]
23.05 Премьера. Юбилейный концерт Анжелики Варум. [12+]
0.35 Х/ф "Как украсть миллион". [6+]
2.35 Модный приговор. [6+]
3.20 Давай поженимся! [16+]
4.05 Мужское / Женское. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00 "Утро России. Суббота".
8.00 Местное время. Вести-Башкортостан.
8.20 Местное время. Суббота.
8.35 По секрету всему свету.
9.00 Тест. [12+]
9.25 Пятеро на одного.
10.10 Сто к одному.
11.00 Вести.
11.30 Юмор! Юмор!! Юмор!!! [16+]
12.35 Доктор Мясников. [12+]
13.40 Х/ф "Нарисованное счастье". [12+]
18.00 Привет, Андрей! [12+]
20.00 Вести в субботу.
21.00 Х/ф "Жизнь прекрасна". [12+]
1.40 Х/ф "Поезд судьбы". [12+]
4.26 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**8.00, 18.30 Новости (на баш. яз.).**
**8.15 "Аль-Фатиха". [12+]**
**8.45 М/ф "Мультфильмы". [0+]**
**9.15 "Ете егет". [12+]**
**10.00 "Физра". [6+]**
**10.15 "Выше всех!" [6+]**
**10.30 "Гора новостей". [6+]**
**10.45 "Книга сказок". [0+]**
**11.00 "Сыйырсыҡ". [6+]**
**11.15 Бишек. Колыбельные моего народа. [6+]**
**11.30 Детей много не бывает. [6+]**
**12.00 Кұстәнәс. [12+]**
**12.30 Автограф. [12+]**
**13.00 Үткән гүмер. [12+]**
**13.30 Башкорттар. [6+]**
**14.00 "Дарю песню". [12+]**
**16.00 Колесо времени. [12+]**
**17.00 Концерт, посвященный памяти Хусаина Ахметова. [12+]**
**19.00 Вопрос+Ответ=Портрет. [6+]**
**19.45 Полезные новости. [12+]**
**20.00 Ради добра. [12+]**
**20.15 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.30 "Байык-2021". Республиканский конкурс исполнителей башкирских танцев. [12+]**
**21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**22.00 Караоке по-башкирски. [12+]**
**22.30, 1.45 Новости недели (на баш.яз.).**
**23.15 "Башкорт йыры". [12+]**
**0.00 Х/ф "Грешник". [12+]**
**2.30 Спектакль "Эх, невеста, невестушка!" [12+]**
**4.15 "Алтын тирмә". [0+]**
**5.00 "Млечный путь". [12+]**
**6.00 "Наука 102". [12+]**

### 7 МАРТА
### ВОСКРЕСЕНЬЕ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.10, 6.10 Х/ф "Гусарская баллада". [12+]
6.00, 10.00 Новости.
6.55 Играй, гармонь любимая! [12+]
7.40 Часовой. [12+]
8.10 Здоровье. [16+]
9.20 "Непутевые заметки" с Дмитрием Крыловым. [12+]
10.10 Жизнь других. [12+]
11.10, 12.10 Видели видео? [6+]
12.00 Новости (с субтитрами).
13.25 Д/ф "Скользить по краю". К юбилею Андрея Миронова. [12+]
14.20 "ДОстояние РЕспублики". К юбилею Андрея Миронова. [12+]
15.50 Х/ф "Ищу жену с ребенком". [16+]
19.25 "Лучше всех!" Праздничный выпуск. [0+]
21.00 Время.
21.50 Премьера. "Ледниковый период". [0+]
23.55 Премьера. Концерт группы "Рондо". [12+]
1.45 Вечерний Unplugged. [16+]
2.25 Модный приговор. [6+]
3.15 Давай поженимся! [16+]
3.55 Мужское / Женское. [16+]

### РОССИЯ 1

4.30, 1.30 Х/ф "Родная кровиночка". [12+]
6.00, 3.05 Х/ф "Любовь из пробирки". [12+]
8.00 Местное время. Воскресенье.
8.35 Устами младенца.
9.20 Когда все дома.
10.10 Сто к одному.
11.00 Х/ф "Неотправленное письмо". [12+]
15.25 Х/ф "Лёд". [12+]
17.45 Ну-ка, все вместе! [12+]
20.00 Вести недели.
22.00 Москва. Кремль. Путин.
22.40 Воскресный вечер с Владимиром Соловьевым. [12+]
5.02 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**8.00 Новости (на баш. яз.).**
**8.15 "Йома". [0+]**
**8.45 "Бай". [12+]**
**9.15 "Курай даны". [12+]**
**9.30 Тормош. [12+]**
**10.00 "Люблю тебя, мамочка!" Детский концерт. [0+]**
**10.30 "Гора новостей". [6+]**
**10.45 Нурбостан сәйәхәте. [6+]**
**11.00 Территория женского счастья.**
**14.00 "Дарю песню". [12+]**
**16.00 "Дорога к храму". [0+]**
**16.30, 3.30 Историческая среда. [12+]**
**17.00 "Нам 25 лет!" Народный ансамбль бального танца "Вираж". [12+]**
**19.00 "Алтын тирмә". [0+]**
**19.45 Лидеры региона. [12+]**
**20.15, 4.00 Әлләсе... [12+]**
**21.00, 22.30 Республика LIVE #дома. [12+]**
**21.30, 6.00 Итоги недели (на рус. яз.).**
**22.15, 6.45 Специальный репортаж. [12+]**
**23.00 "Красная кнопка". [16+]**
**23.45 "ВасСәләм!" [12+]**
**0.15 Х/ф "Розовое или колокольчик". [12+]**
**1.45 Спектакль "Гәйфи агай, женись, давай!" [12+]**
**4.45 "Йөрәк һүҙе". [12+]**
**5.00 "Млечный путь". [12+]**

*БАШ ЭШЛӘТМӘК*

# 3 МАРТ - БӨТӘ ДОНЪЯ ЯҘЫУСЫ КӨНӨ




**Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.**

**8-се һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Кейекбаев. Ғәләүетдинов. Тәләкә. Ҡабан. Түтәл. Хәбәрсе. Аҡаев. Көнбағыш. Ризыҡ. Амстердам. Иртәк. Саҡсауыл. Рим. Саян. Ишбирҙин. Индонезия. Ислам. Көйәрмән. Спорт. Яран. Аманат. Аризона. Рәссам. Турһыҡ. Әхтәмов. Йорт. Ыласын. Буран. Анкета. Ләйсән. Нәүкәр. Әүен.

**Вертикаль буйынса:** Рәми. Хисамитдинова. Кәнфит. Әҙрәс. Ятаҡ. Абыз. Ғата. Термин. Зәйнуллин. Әсә. Алтын. Әхлаҡи. Епте. Анар. Ҡына. Ураҡсин. Кәмә. Аҙнабаев. Сван. Нәркәс. Истәк. Ятаған. Асыш. Өйөрмә. Борай. Бисә. Әкәмәт. Радар. Утыҙ. Мәйкәм. Лайнер. Нуриев.

**"Баш - һандыҡ, тел - асҡыс" йәшерен һүҙен сәғәт теүәл 11-ҙә шылтыратып дөрөҫ әйтеүсе Иҫке Сибай ауылынан Миңлегөл Усманова еңеүсе тип табылды һәм "Башҡорт халыҡ ижады" X том китабын отто. Шулай уҡ иң беренсе булып яуап биргән Белорет районы Сосновка ауылынан Земфира Кәримоваға "Мөнәжәттәр" китабын бүләк итәбеҙ.**

*СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ*



## М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**2 март "Йәнем, иртәгә тағы яңы көн тыуыр"** (Я. Пулинович). 18+
**3 март "Шәмсетдин һәм Шәмсура"** (Т. Ғиниәтуллин), новелла. 12+
**4 март "Хыялға ҡаршы"** (А. Ишбулдина, А. Баймөхәмәтовтың "Ҡалдырма, әсәй!" повесы буйынса) 12+
**5 март "Ҡыҙ урлау"** (М. Кәрим), комедия. 12+
**6 март "Һөйәһеңме - һөймәйһеңме..."** (Ф. Бүләков), трагикомедия. 18.00 12+
**7 март "Бәхет хаҡы"** (Х. Мөҙәрисова), музыкаль мелодрама. 18.00 16+

## М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**2 март "Йәшәгән, ти"** (М. Ладо), драма. 16+
**4 март "Ал яулыҡлы тирәккәйем"** (С. Айтматов), драма. 16+
**5 март "Хәтер юғалтҡыс мөхәббәт"** (В. Красногоров), комедия. 18.00 16+
**6 март "Мосты"** Гөлшат Ғайсина концерты. 12+
**7 март "Ханума"** (А. Цагарели), музыкаль комедия. 18.00 12+
(Иҫкәртмә: һауа шарттарына бәйле Сибай һәм Баймаҡ ҡалаларына гастролдәр ойошторолмай).

## Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

**6 март "Волк и семеро козлят"** (А. Рахманкулова). 12.00, 14.00, 16.00 0+
**7 март "Красная шапочка"** (Ш. Перро). 12.00, 14.00, 16.00 0+
**8 март "Муха-Цокотуха"** (И. Романов). 12.00, 14.00 0+

## Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**3 март "Һөйөү ялҡыны"** Л. Ишемйәрова етәкселегендәге төркөм концерты. 6+
**6 март "Музыку слушаем вместе"** 11.00 0+
**"Ҡомло фантазия"** ҡурайҙа И. Хәйруллин, анимация авторы - Е. Король. 6+
**7 март "Орган плюс"** В. Мортазин концерты. 18.00 6+
**8 март Рәфис Сирусиндың концерты.** 18.00 6+

## Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе

**4 март "Минең йөрәк һиндә тибә"** (Р. Ҡуйбағаров), драма. 12+
**7 март "Сказка об избалованных детях"** музыкаль-әҙәби лекторий. 12.00 0+
**"Эти лунные ночи... Привет из 90-х"** филармония солистары концерты. 6+

## Сибай театр-концерт берекмәһе

**5 март "Егеттәрҙән ҡайнар сәләм!"** Сибай драма театры залында байрам концерты. 6+

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1442 һижри йыл.*

| Март (Рәжәб) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 1 (17) дүшәмбе | 6:37 | 8:07 | 13:30 | 17:20 | 18:50 | 20:20 |
| 2 (18) шишәмбе | 6:35 | 8:05 | 13:30 | 17:22 | 18:52 | 20:22 |
| 3 (19) шаршамбы | 6:33 | 8:03 | 13:30 | 17:24 | 18:54 | 20:24 |
| 4 (20) кесе йома | 6:30 | 8:00 | 13:30 | 17:26 | 18:56 | 20:26 |
| 5 (21) йома | 6:28 | 7:58 | 13:30 | 17:28 | 18:58 | 20:28 |
| 6 (22) шәмбе | 6:25 | 7:55 | 13:30 | 17:30 | 19:00 | 20:30 |
| 7 (23) йәкшәмбе | 6:23 | 7:53 | 13:30 | 17:32 | 19:02 | 20:32 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

*БЫЛ - ҠЫҘЫҠ*

# ТАНЫҠЛЫҠТА...



Рәсәйҙә водитель таныҡлығы һәм транспорт сараларына паспорттар үҙгәрәсәк. Таныҡлыҡта "Водитель таныҡлығы" тигән яҙыу өс телдә биреләсәк, шул иҫәптән Permis de conduir, Driving Licence, тип белдерә "Автостат" агентлығы. Ул документ йөҙлөгөнөң өҫкө өлөшөндә буласаҡ. Транспорт сараһы паспортында шулай уҡ автомобилдә нисә ултырыу урыны барлығы һәм автоның тейешле техник ауырлыҡ күләме, элек үткәрелгән тикшереүҙәр хаҡында мәғлүмәттәр күрһәтеләсәк. Транспорт сараһын теркәү таныҡлығына двигателдең ат көсө күләмендә ҡеүәте һәм таможня сикләүҙәре тураһында ла яҙыу урын аласаҡ.

2020 йылдың 1 июленә ҡарата Рәсәй Федерацияһында еңел автомобиль паркы 44,6 млн берәмек тәшкил итә ине. Шул уҡ ваҡытта беҙҙең илдә теркәлгән бөтөн еңел машиналарҙың уртаса "йәше" 14 йыл тирәһе. "Автостат" агентлығы эксперттары белдереүенсә, сит ил маркалары күрһәткестәре кәмерәк - 11,6 йыл, ә ватан автомобилдәре уртаса 17 йыл ҡулланыуҙа. Сит ил маркалары араһында иң "йәше" - Ҡытай машиналары - 8 йыл, унан Корея брендтары - 8,2 йыл. Европа етештереүендәге машиналарҙың уртаса "йәше" - 11, Американыҡылар - 12 йыл. Сит ил маркалары араһында иң "оҙон ғүмерле"ләре - Японияныҡылар - 14 йыл.

АФАРИН!

# АТАҠАЙ ҘА, АТЫҢ КҮКМЕ НИ,

## Сергетышҡайҙарың суҡмы ни?



**Бөрйән ағинәйҙәренең "Кәрәҙ" халыҡ ҡорамасылар клубы атҡарған эштәр, саралар районда ғына түгел, республикала ла яҡшы таныш. Улар бигерәк тә ұҙҙәренең "Ҡорама", "Сергетыш"тары менән танылыу яулай бара.**

Беҙҙең ағинәйҙәр көнкүрештә ҡулланыуҙан төшөп ҡалып, онотолоуға дусар була барған ҡорамаларҙы ла, сергетыштарҙы ла ғаиләләрҙә һаҡланған боронғо өлгөләрҙән ҡарап өйрәнеп, шулар нигеҙендә районыбыҙҙың бөтә ауылдарында тиерлек оҫталыҡ дәрестәре үткәреп, милли ҡомартҡы булараҡ тергеҙеүгә өлгәште. Мәҫәлән, сергетыштың ҡомартҡы булараҡ ҡына түгел, ә байрамдарҙа, туйҙарҙа, ҡунаҡтар алдында ҡулланыр милли ҡаралты булараҡ та тергеҙелергә тейеш икәне раҫланды. Шуға күрә Бөрйән ағинәйҙәренең йыл да Ватанды һаҡлаусылар көнөнә арналған саналы аттар һәм һыбайлылар ярыштарын ҡорамалар һәм сергетыштар менән байрамса биҙәүгә бер матур йолаға әйләнде. Быйыл да ошо сарала сергетыш күргәҙмәһе ойошторолдо һәм иң яҡшы эштәргә конкурс иғлан ителде. Шуныһы ҡыуаныслы, район ауылдарында был эшкә ең һыҙғанып тотоноусы оҫталар арта бара.

Тәғәйен көндә ҡаты һыуыҡтар булыуға ҡарамаҫтан, үҙҙәренең иң матур эштәре менән Күҙәмбәт яланына йыйылды ҡорамасылар. Күҙҙе сағылдырырлыҡ аҡ ҡар ҡаплаған аланда тарттырылған тимер сымға эленгән сергетыштар күҙҙең яуын ала! Быйыл район хакимиәте тарафынан ағинәйҙәрҙең күҙ нурын түгеп башҡарған был эштәренә конкурс сиктәрендә баһа ҡуйылыуы шатландыра. Мәҫәлән, Кейекбай ауылы ағинәйҙәре етәксеһе Гөлдәр Сөләймәнова командаһы менән дә, шәхси эштәре менән дә матур уңышҡа өлгәште һәм быйылғы конкурста 1-се урын яуланы. Жюри тарафынан "Кәрәҙ"се Мәҙинә Барыева - 2-се урынға, Иҫке Монасиптан Миңлегөл Бикмәтова 3-сө урынға лайыҡлы тип баһаланды.

Беҙҙең эштәребеҙгә Өфөнән килгән мәртәбәле ҡунаҡтарҙың һоҡланыуы тағы ла нығыраҡ күңелдәрҙе күтәрҙе. "Ағиҙел" берекмәһе етәксеһе Гүзәл Кәримованың баһаһы буйынса, республика кимәлендә сергетышты Бөрйәндең бренды итеп танытыуға өлгәштек шикелле. Барыһы ла билдәләүенсә, сергетыш ҡулланмаһан, тирмәләрҙең биҙәлеше камил булып етмәй. Шуға күрә Бөрйән ағинәйҙәре һәм оҫта ҡатын-ҡыҙҙары алдында әле эш күп был йүнәлештә.

**Рәшиҙә ҒИЗЗӘТУЛЛИНА,**
**Бөрйән "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһы етәксеһе.**

АҒИНӘЙ МӘКТӘБЕ

# АЛҒЫШТАР ӘЙТЕП...



**Рухи ҡәнәғәтлек, күңел бөтөнлөгө табыу өсөн бала мотлаҡ үҙенең туған телендә һөйләшергә тейеш. Был хәҡиҡәтте йәш быуынға тапшырыуҙы беҙҙең Баймаҡ районы Ишмырҙа ауылы ағинәйҙәре үҙҙәренең төп бурысы тип һанай.**

Шуға ла, ниндәй генә эшкә тотонһаҡ та, сараларға йәш быуынды, мәктәп уҡыусыларын йәлеп итергә тырышабыҙ. Йыл да 1-се синыфҡа киләсәк балалар менән осрашыу үткәрәбеҙ. Йәнһүрәт, әкиәт геройҙары саҡырыла. Йомаҡтар ҡойошабыҙ, мәҡәлдәр әйтешәбеҙ, һамаҡлы-йырлы башҡорт милли уйындары уйнатабыҙ. Был башҡорт ауыҙ-тел ижады аша балаларҙа үҙ теленә һөйөү, тоғролоҡ тәрбиәләүгә булышлыҡ итә. Ағинәйҙәр шулай уҡ мөнәжәттәр әйтеп, "иман", "әҙәп", " белемле кеше" кеүек төшөнсәләрҙе лә һеҙгә улар үҙ күңеленә. Беҙ үткәргән саралар программаһына "Донъяла иң матур тел - ул минең туған телем" темаһына арналған түңәрәк ҡор, "Иң күп китап уҡыусы" темаһына фекер алышыуҙар ҙа индерелә. Ағинәйҙәр үҙ сығыштарында мәҙәниәтле, белемле, әхлаҡлы, милли рухлы кеше булыу өсөн үҙ телеңде үҫтереү, байытыу, быныһ өсөн иһә әҙәби китаптар, башҡорт телендә ижад ителгән гәзиттәр, журналдар уҡыу кәрәклеген иҫкә алырға ла онотмай.

Балалар менән матурлыҡ темаһына төрлө дәрестәр, осрашыуҙар үткәргәндә тышҡы һәм эске матурлыҡҡа ниндәй сифаттар инеүен асыҡлайбыҙ. Нигеҙенә "әҙәп", "иман", "тәүфиҡ" төшөнсәләре һалынған, шулай уҡ туған телдең кешене биҙәүе тураһындағы мәҡәлдәрҙе (мәҫәлән, "Үҙ телен белгән кеше - фекерен әйтә белгән кеше", "Тел гәйрәтле ҡорал: тамуҡҡа ла төшөрә, күктәргә лә ашыра") бергәләп иҫкә төшөрәбеҙ һәр улар тураһында ла фекер алышабыҙ. Мәҡәлдәр аша яғымлы һүҙҙәр кешене биҙәй, бер-берегеҙгә яғымлы һүҙҙәр әйтегеҙ, тигән нәсихәт тә еткерәбеҙ. Балаларға ағинәйҙәребеҙҙең алғышлау тураһында һөйләүе бигерәк тә оҡшай икәнен белеп ҡалдыҡ та, бындай осрашыуҙарҙы йышыраҡ ҡабатларға булдыҡ. Алғышлау - бер-береңә яҡшы мөнәсәбәтле булыуҙы, изге теләк теләүҙе аңлата. Боронғо ата-бабалар ауыҙҙан сыҡҡан яҡшы һүҙҙең дә, яман һүҙҙең дә ғаләмде гиҙеп, эйәһенә әйләнеп ҡайтырына ышанған. Шулай алғыштар барлыҡҡа килгән. Өй һалғанда, һуғым һуйғанда, ҡунаҡ һыйлағанда, бала тыуғанда һәм башҡа осраҡтарҙа алғыш әйтеү күркәм йолабыҙға әйләнгән ("Минән ҡеүәт - һинән көс", "Эшегеҙ уң булһын", "Нигеҙең ныҡ булһын", "Ҡулдәгең ҡотло булһын" һәм башҡалар). Мәҫәлән, 12 февраль көнөндә генә әле Ишмырҙа ауылы мәҙәниәт йортонда ағинәйҙәребеҙ менән берлектә "Кот ҡойоу", "Тел-теш ҡырҡыу", "Һоҡот һалыу" йолалары күрһәттек. Ысынлап та, һуңғы йылдарҙа йолалар үтәлмәй, юҡҡа сығып бөтөп бара. Юғалып барған һыу юлы, килен һөйөү, теләк теләү һәм башҡа йолаларҙы тергеҙеүгә нәҡ ағинәйҙәребеҙ үҙ өҫтөнә алды ла инде.

Төрлө йолалар үткәрер алдынан балаларға алдан өй эштәре бирәбеҙ: бишек йырҙарын өйрәнеү, таҡмаҡтар сығарыу, яғымлы һүҙҙәр уйлап килеү, алғыштар әҙерләү, үҙ исемдәренең мәғәнәләрен аңлатыу һәм башҡалар. Исемдәргә нығыраҡ туҡталабыҙ. Борон ата-бабалар балаға исемде бик ныҡ уйлап ҡушыр булған. Сөнки исем баланың киләсәк яҙмышын хәл итә тип һанағандар. Бына шулай, беҙ балалар менән үткәргән бар саралар үҙ туған телебеҙгә ҡарата һөйөү уята, уны байыта, балаларҙың телмәрен үҫтерә, тип ышанабыҙ һәм үҙебеҙҙең ойошма ағзаларының бер эш йүнәлеше булараҡ дауам итәбеҙ.

**Гөлгөнә ТОТМАНОВА,**
**Баймаҡ районы Ишмырҙа ауылы ағинәйе.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ЯҢҒЫҘ БАЛА...

## атаһына баш булыр

Үҙең ҡарға булһаң, балаң һандуғас булмаҫ.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Күп ир-егеттәр биттәге ярыҡҡа ғашиҡ булып, яңылыш ҡына ҡатын-ҡыҙҙың үҙен кәләш итеп алып ҡуя.

**(Стивен Ликок).**

Гел генә уңышлы алдау өсөн бер кемдең дә хәтере етмәйәсәк.

**(Авраам Линкольн).**

Доға ҡылыу өсөн ышаныу кәрәкмәй, ышаныу өсөн доға ҡылыу кәрәк.

**(Франсуа Мориак).**

Ҡул сабыуын ишетер өсөн, йә һәр кеше аңларлыҡ еңел, йә бер кеше лә аңламаҫлыҡ ауыр нимә яҙырға кәрәк.

**(Вольфгант Амадей Моцарт).**

Көслө рухлы булыр өсөн көн һайын ике батырлыҡ эшләргә кәрәк. Мин шулай эшләйем дә: иртән торам һәм кис йоҡларға ятам.

**(Сомерсет Моэм).**

Мин сәләмәтмен һәм оҙаҡ йәшәйем, сөнки бер тапҡыр ҙа тәмәкегә лә, рюмкаға ла, ҡатын-ҡыҙға ла тейгәнем булманы... Ун йәшкә хәтлем...

**(Джордж Мур).**

Ҡатын-ҡыҙ күҙҙәренә ҡом һибеүҙе ярата. Ҡом күберәк булған һайын ул күҙҙәрен нығыраҡ аса.

**(Альфред де Мюссе).**

Кешене насарлап һөйләү нимәгә кәрәк, мин аңламайым. Яуызлыҡ эшләргә теләһәң, уның тураһындағы берәй ысынбарлыҡты әйт.

**(Фридрих Ницше).**

Оптимист беҙ иң яҡшы донъяла йәшәйбеҙ, тип уйлай. Пессимист быны белә.

**(Роберт Оппенгеймер).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Бер ваҡыт университет профессоры Нан-ин исемле япон аҡыл эйәһенә килгән.**

**Нан-ин сәй яһау менән булған. Ҡунаҡтың кәсәһен тултырһа ла, барыбер сәй ҡойоуҙы дауам иткән. Профессор түгелеп торған сәйгә оҙаҡ ҡарап торған да, түҙмәйенсә, ҡысҡырған:**

**- Тулған бит инде. Бүтән һыймай!**

**- Бына ошо кәсә кеүек, - тип яуап биргән Нан-ин, - һеҙ ҙә үҙ уйҙарығыҙ, фекерҙәр, ышаныуҙар менән тулыһығыҙ. Кәсәгеҙҙе бушатмағас, мин һеҙгә нисек аҡыл өйрәтергә тейешмен? "**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһендә ҡанунды үтәүгә күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы
№ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

1 582218 911006 21009

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәррирәт:**
Сәриә ГАРИПОВА,
Сәрүәр СУРИНА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**

«Печатник» ЯСЙ типографияһында баҫылды (450591, Башҡортостан Республикаһы, Өфө районы, Чесноковка ауылы, Воровский урамы, 32).

**Телефондар:**
**Баш мөхәррир** 253-25-44
**Хәбәрселәр** 252-39-99, 246-03-24
**Матбуғат таратыу** 246-03-23

**Ҡул ҡуйыу ваҡыты -**
26 февраль 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44, 246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**

Тиражы - 3400
Заказ - 146/02